ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

31-6 октябрь - ноябрь (ҡарасай - ҡырпағай)

2015

№44 (670)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Табиплыҡҡа уҡы һәм...**

тыуған районыңа эшкә ҡайт!



5

**Руслан Алмаев ...**

Ер шарын урап сыҡмаҡсы



6

**Ҡоролтай ул...**



һинән, минән, беҙҙән башлана 8-9

**Шәхес булырға теләһәң...**

милли тамырҙарыңа ҡайт



11

**ТВ-программа** 14

***"Бер саҡ Аркадий Гайдарҙан хәрби дуҫтары былай тип һорай икән: "Һеҙ үлемгә нисек ҡарайһығыҙ?" "Кире ҡарайым", - тип яуап биргән Гайдар. "Ни өсөн улай булғас пуля аҫтына аяуһыҙ ташланаһығыҙ?" "Йәшәү өсөн", тип яуап биргән Гайдар".***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн һеҙ халыҡтар берҙәмлеге сағылышын нимә күрәһегеҙ?

*Әнисә ТАҺИРОВА, шағирә:* Халыҡтар берҙәмлеге һәр заманда ла, айырыуса әлеге мәлдәрҙә, тормошобоҙҙоң нигеҙе булырға тейеш. Бынан элек, совет осоро йылдарында ул тап шулай булды ла. Советтар Союзы тигән бөйөк держава юҡҡа сығарылғас, союздаш республикалар сит илгә әүерелде, улар менән бәйләнеш тә юғалды. Һеҙҙең был һорау минең күҙ алдына 1981 йыл Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙа уҡыған йылдарымды күҙ алдына баҫтырҙы. Ул саҡ беҙ, 18 төрлө милләт ҡыҙҙары һәм егеттәре, бер ғаилә кеүек дуҫ йәшәнек. Минең бүлмәләш ҡыҙҙарымдың береһе - рус, икенсеһе - әрмән, өсөнсөһө украинка ине. Иртәнсәк коридорҙың егеттәр йәшәгән арғы башынан тулҡын-тулҡын булып беҙҙең яҡҡа ағылған думбыра көйөнә уянып китә инек. Ҡаҙаҡ егете Ирәндек Оразбаев яҙыусы ла, оҫта думбырасы ла ине. Кухняға сыҡһаң, берәү - борщ, икенсеһе - былау, өсөнсөһө тағы үҙенең берәй милли ризығын бешерә... Элекке союздаш республикалар менән рухи берҙәмлек юҡ инде бөгөн, үкенескә. Әлеге украинка әхирәтем Валя Кузьменконың да яҙмышы билдәһеҙ, башҡалары менән дә аралар өҙөлдө, йәл. Ләкин заманалар үҙгәреп тора, яҡшы ваҡыттар яңынан әйләнеп ҡайтыр әле, тигән өмөттәмен. Уның ҡарауы, беҙгә үҙ илебеҙ Рәсәйҙең, унан ҡала ватаныбыҙ Башҡортостандың именлеген, берлеген һаҡлау һәм нығытыу буйынса нығышмалыраҡ эшләргә кәрәк, тип уйлайым. Яҙыусыға - йөрәктәргә үтеп инер дуҫлыҡ һүҙе менән, ябай эшсе һәм хеҙмәтсәнгә - тыныс тормошта ҡулланыласаҡ етештергән продукцияһы менән, уҡытыусыға - бөтөн илебеҙгә таралып, унын ҡеүәтен күтәрер кадрҙар әҙерләүе менән һ.б. 2001 йыл республикабыҙға килгәнендә Владимир Путиндың, Башҡортостанда, тамсылағы һыу кеүек, мәҙәниәттәр, диндәр, телдәр күп төрлөлөгө һәм халыҡтар дуҫлығы менән беҙҙең бөтөн Рәсәй сағыла, тигән ҡанатлы һүҙҙәрен яҡшы хәтерләйһегеҙҙер, моғайын. Ана шул гармония тантана итһен һәр саҡ илебеҙҙә, сөнки Башҡортостан кеүек төбәктәре менән көслө бит Рәсәй. Ә был бик ҙур яуаплылыҡ өҫтәй күп милләтле республикабыҙ өсөн: беҙҙә именлек, татыулыҡ булһа, илдә лә хөрлөк булыр. Ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә, халыҡтар берҙәмлеге сағылышы миңә һөйөклө Башҡортостанымда ул.

*Азат ҠАҺАРМАНОВ, БДУ-ның II курс студенты:* Илдә тыныслыҡ булһа - шул халыҡтар берҙәмлеге, минеңсә. Шунын кескәй генә сағылышы - үҙем уҡыған төрлө милләт йәштәренән тупланған төркөм. Дөрөҫ, мин тәүҙә үҙем белгән тағы ла өс башҡорт егетенән башҡаларҙы рустар икән, тип уйлағайным, сөнки йәштәр араһында кемдең ниндәй милләттән булыуын айырыу мөмкин түгел - бөтәһе лә урыҫлашҡан. Ә бына ятаҡта бергәләп йәшәй һәм яҡындан аралаша башлағас, милләт айырмалыҡтары бик тиҙ асыҡланды: сыуаш, татар, мари, хатта украин егете лә бар булып сыҡты бер үк төркөмдә. Шуға күрә мин бер дуҫымдың, хәҙер милләттәр араһында айырма юйыла бара, тигәне менән ризалаша алмауымды аңланым. Мине бер нәмә ғәрләндерҙе: яңыраҡ Ватан тарихынан лекция ваҡытында студенттарҙың күпселеге Халыҡтар берҙәмлеге көнөнөң ни аңлатыуын да әйтеп бирә алманы. Бынан 4 быуат элек төрлө милләт халыҡтары бер булып, Мәскәүҙе поляк баҫҡынсыларынан һаҡлап алып ҡала. Бөгөн дә яҫҡыныусылар күп Рәсәйгә. Ватанды һаҡлай, яҡлай алырлыҡ йәштәр үҫәме һуң бөгөн беҙҙә? Үкенескә күрә, йәштәр хәҙер тарих менән ҡыҙыҡһынмай, улар араһында милләттәр, халыҡтар дуҫлығын нығытыу маҡсатында ла, патриотик тәрбиә буйынса ла етерлек эш алып барылмай. Әлбиттә, республика һәм баш ҡалабыҙ кимәлендә һабантуй, науруз, масленица һымаҡ төрлө милләт халыҡтарының байрамдары булып тора, тик йәштәр унда әллә ни йөрөмәй. Шуға ла уларҙың күпселеге хатта башҡорт менән татарҙы бутай. Ана шундай наҙанлыҡ булмаһын өсөн мин, мәҫәлән, йәштәр дискотекаһы ойоштороп, уны аҙна һайын бер милләт көнөнә бағышлап үткәрергә тәҡдим итер инем. Мәҫәлән, был шәмбе башҡорт дискотекаһы була икән, унда тик башҡорт музыкаһы яңғырай, башҡорт ризыҡтары, ә эсемлектәрҙән ҡымыҙ, буҙа һатыла. Башҡорт тарихы, йолалары һәм мәҙәниәте, шулай уҡ билдәле шәхестәре хаҡында һөйләүсе күргәҙмә ойошторола һ.б. Киләһе шәмбе тағы бер милләт вәкилдәре үҙҙәре менән таныштыра. Үҙ илебеҙҙәге тыныс, матур тормош менән генә хушһынып йәшәү эгоизм булыр ине. Шуға ла Рәсәйҙә, Башҡортостанда бөтөн донъя халыҡтарының йәштәрен саҡырып, тыныслыҡ, хеҙмәттәшлек фестивалдәре ойошторолһа ине, тип хыялланам. Халыҡтар берҙәмлеге хаҡында донъя кимәлендә һүҙ алып барырға кәрәк бөгөн.

(Дауамы 2-се биттә).

ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ

# ҺӘР КЕМДЕҢ ЙӨРӘГЕНДӘ...

## үҙ милләте өсөн хәстәрлек булһын

**Халыҡ вәкиллеге органы булараҡ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, тәү сиратта, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыусы, милләтебеҙҙең терәге һәм таянысы булырлыҡ, барыбыҙҙың да ниндәй осраҡта ла күҙ терәп барырлыҡ, ярҙам һәм кәңәш һорап мөрәжәғәт итә алырлыҡ ойошма булырға тейеш. Ҡоролтай үҙе тирәләй республикала йәшәгән башҡорттарҙы ғына түгел, ә башҡа төбәктәрҙә һәм хатта сит илдәрҙә көн күргән милләттәштәребеҙҙе бергә туплаусы, тарихыбыҙҙы күҙ ҡараһылай һаҡлаусы, киләсәгебеҙҙең ышаныслы булырына өмөт уятыусы йәмәғәт берекмәһе дәрәжәһенә күтәрелергә тейеш.**

(Дауамы 2-се биттә).



12+

✓ **Республикабыҙға исем биргән милләттең йөнәшәһендә көн күргән башҡа халыҡтарға толерантлылығы, иплелеге һәм тотанаҡлылығы ла ошо берҙәмлек сағылышы ул.**



ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ

# ҺӘР КЕМДЕҢ ЙӨРӘГЕНДӘ...

## үҙ милләте өсөн хәстәрлек булһын

(Башы 1-се биттә).

Әлбиттә, Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты был йәһәттән ниндәйҙер эштәр башҡара, әммә республика район һәм ҡалаларындағы ҡоролтай ойошмаларының һүлпән эше дөйөм ойошма эшенә бәҫ өҫтәмәй. Шуның өсөн бынан ары урындағы ҡоролтай рәйесе һәм ағзалары итеп вазифа биләп ултырғандарҙы түгел, ә ысынлап та үҙ халҡы өсөн янып-көйгән, әүҙем, йәмғиәт эшендә ҡайнарға яраткан кешеләрҙе һайларға кәрәк, тип тәҡдим итәм. Шул саҡта, бәлки, "Ҡоролтай эшләмәй", "Ҡоролтайҙың эше бармай", тигән һүҙҙәр ишетеүҙән туҡтарбыҙ. Ни тиһәң дә, халыҡ фекере үҙенең күҙ алдында булған кешеләрҙән, уларҙың эшенән сығып төйнәлә.

Ләкин халыҡтың үҙе яғынан да берҙәмлеккә ынтылыш булмаһа, һәр кемдең йөрәгендә үҙ милләте өсөн хәстәрлек ятмаһа, Ҡоролтайҙың ғына тырышлығы менән әллә ни эш ҡыйратып булмаясаҡ. Шуға күрә, эштәр ике яҡтан да алып барылырға һәм бер-беренән тулыландырып килергә тейеш. Бының өсөн Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты ағзаларының халыҡ менән йышыраҡ осрашыуы, уларҙы борсоған мәсьәләләрҙе һәм һорауҙарҙы халыҡтың үҙ ауыҙынан ишетеүе мөһим. Буласаҡ IV Ҡоролтайға комитет ағзаларының ҡасан һәм ҡайҙа осрашыуҙар үткәреүе тураһында график төҙөп, уны киң йәмәғәтселек иғтибарына сығарыуына өмөтләнәм.

Бөгөнгө еңел булмаған замандың тәьҫире айырым кешегә, ғаиләгә генә түгел, ә ошондай йәмәғәт ойошмаларына ла ҡағылмайынса үтмәй, һис шикһеҙ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Ҡоролтай Башҡарма комитеты үҙ өҫтөнә алған бурыстарҙы теүәл үтәү һәм ошондай ҡорҙа бөтә халыҡ менән берләктә ҡабул ителгән резолюцияларҙың тормошҡа ашыуын контролдә тотоуҙан ситләшмәҫкә тейештер. Ошонан сығып, IV Ҡоролтай барышында бынан алдағы йылдарҙа ҡабул ителгән резолюцияларҙың үтәлеше тураһында халыҡҡа еткереү ҡамасауламаҫ ине.

Ҡоролтайҙарҙа күберәген тарихҡа, мәҙәниәткә, телгә, ғөмүмән, гуманитар йүнәлешкә арналған һорауҙар күберәк күтәрелә. Тик бөгөнгө ысынбарлыҡ Ҡоролтай Башҡарма комитетының һәм уның район-ҡалалардағы ойошмаларының тел, мәғариф өлкәһендәге көсһөҙләгән күрһәтә. Мәктәптәрҙән ябылыуына, башҡорт теленең ҡыҫҡартылыуына ҡарата Ҡоролтай тарафынан әйтелгән ҡырҡыу фекерҙәрҙе ишетергә тура килмәне. Шул уҡ ваҡытта халыҡты иҡтисади, сәйәси һәм башҡа ошондай донъяуи мәсьәләләр ҙә борсой һәм әлеге йыйында ошо юҫыҡта ла фекер алышыуҙар булыр, тип өмөтләнәм.

Хоҡуҡи һәм иҡтисади белемебеҙҙең түбән булыуы бәҡәлгә һуға. Шуға күрә Ҡоролтай Башҡарма комитеты янында халыҡҡа иҡтисади һәм хоҡуҡи яҡтан ярҙам күрһәтеүсе, кәңәш биреүсе Үҙәк асыу тураһында ла һүҙ күтәргәндә һәм уны тормошҡа ашырғанда яҡшы булыр ине.

Мине генә түгел, ә күптәрҙе борсоған хәл - тәбиғәтебеҙҙең юҡҡа сығыуы, урмандарыбыҙҙың киҫелеүе, тауҙарыбыҙҙың ағасһыҙ һерәйеп, ҡола ялан булып ултырып ҡалыуы. Тәбиғи ресурсҡа бай республика булыуыбыҙ уны ҡомһоҙ рәүештә таларға хоҡуҡ бирмәй. Әгәр ҙә райондарҙағы ағас эше менән булған һәм тик аҡса тип күҙе тоноп, урмандарҙы ҡырған эшҡыуарҙарға урындағы власть органдарының көсө етмәй икән, Ҡоролтай Башҡарма комитеты, халыҡ ихтыярын көүҙәләндереүсе ойошма булараҡ, уларҙың ҡомһоҙлоғон йүгәнләрлек сара табыу тураһында уйларға тейеш. Ошо тема ла күтәрелеп, урмандарыбыҙҙы яҡларлыҡ һәм һаҡларлыҡ ҡарар ҡабул ителеп, ул тормошҡа ашырылһа, Ҡоролтайҙың мәртәбәһе күтәрелер ине.

**Ғәзинур НӘБИУЛЛИН.**
**Әбйәлил районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн һеҙ халыҡтар берҙәмлеге сағылышын нимә күрәһегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Тәлғәт ШАҺМАНОВ, Күмертау ҡалаһы "Юшатыр" гәзитенең яуаплы секретары, журналистарҙың Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге республика премияһы лауреаты:*** Башҡортостанда йөҙҙән ашыу төр милләт халыҡтары йәшәүгә ҡарамаҫтан, беҙҙә бер ҡасан да милләт-ара ыҙғыш һәм конфликттар булғаны юҡ, шөкөр. Был хаҡта ябай халыҡ ауыҙынан да күп ишеткәнем бар. Үткәндә генә әле ауылыма ҡайтҡан саҡта бер апай ҙа ошо хаҡта: "Телевизор ҡарауы ҡурҡыныс: көн-төн һуғыш барған, өҫтәренә бомба яуып торған илдәр бар, Кавказ төбәктәрендә лә боевиктарға ҡаршы көрәш, шартлауҙар туҡтағаны юҡ. Үҙебеҙҙә, исмаһам, йәнгә рәхәт, тыныс - Башҡортостанымда тыуып, ошонда йәшәгәнемә ҡыуанып бөтә алмайым", - тип һөйләп торҙо. Дөрөҫ һүҙгә ни әйтәһең, артабан да шулай булһын, тип теләргә генә ҡала. Халыҡтар берҙәмлеген беҙҙә күп йәһәттән дәүләт власы органдарының дөрөҫ милли сәйәсәте һөҙөмтәһе, тип баһаларға була.

Икенсе яҡтан, республикабыҙға исем биргән милләттең йәнәшәһендә көн күргән башҡа халыҡтарға толерантлылығы, иплелеге һәм тотанаҡлылығы ла ошо берҙәмлек сағылышы ул. Борон аҫаба халҡы башҡа яҡтарҙан ҡасып, яҡшы ер эҙләп килгән халыҡтарҙы үҙ янына һыйындырыуы, киң күңеллелек күрһәтеүе тарихтан билдәле. Күренеүенсә, улар ҙа рәхмәтле беҙгә: быуаттар буйы бергә-бергә көн итеп, туғанлашып бөткәнбеҙ. Улар ҙа көстәренән килгәнсә Башҡортостаныбыҙ ҡеүәтен арттырыуға, уның мәҙәниәте, сәнғәте һәм әҙәбиәтенә үҙ өлөштәрен индерә, уға тоғро хеҙмәт итә. Ошо тәңгәлдә Башҡортостандың халыҡ йырсыһы Фәдис Ғәниевтың, милләтем - мишәр, телем - татар, рухым- башҡорт тигәне республикабыҙҙағы халыҡтар берҙәмлеге сағылышының нәҡ үҙе булып тойола миңә. Башҡортостанда тыуып, Татарстанда йәшәгән ижад кешеләре байтаҡ. Мәҫәлән, табын ырыуы башҡорттары Хәниә Фәрхи менән Салауат Фәтхетдинов ике республика халыҡтарына ла ихлас хеҙмәт итә. Йылдар үтә барған һайын, танылған яҙыусы - Илеш башҡорто Роберт Миннуллиндың ижадында ла тыуған яҡ һағышы айырым-асыҡ ярылып ята. Әйткәндәй, "Ағиҙел" журналының бер һанында уның шәжәрәһе лә баҫылып сыҡҡайны. Халыҡтар берҙәмлеге нимә сағыла, тигән һорауға туғандаш халыҡтарҙың рухи донъяһын берләштереп торған ана шундай әҙәбиәт, сәнғәте миҫалдарына таянып яуап бирергә була, тип уйлайым. Ә улар иҫәпһеҙ-һанһыҙ тормошобоҙҙа. Татар яҙыусылары яҡташтарыбыҙ Мирсәй Әмир, Әмирхан Еники кеүек шәхестәр ҙә үҙ әҫәрҙәрендә Башҡортостан ере, тәбиғәте, мәңгелеккә ошонда төйәкләнгән башҡорттарҙың рухы, башҡорт характеры хаҡында һоҡланыуҙарын йәшермәй яҙалар. Беҙҙең Көйөргәҙе районында бер нисә сыуаш ауылы ла бар. Тарихтан билдәле булыуынса, заманында улус старшинаһы булып торғанында Кинйә Арыҫланов үҙе ҡул ҡуйып, махсус килешеү нигеҙендә сыуаштарға бында йәшәргә рөхсәт биргән. Шуны әйтмәксемен: бөтөн республикабыҙҙағы кеүек үк, Көйөргәҙе ерендә лә әлегә тиклем төрлө милләт халыҡтары бер ғаилә булып йәшәй.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# БЕҘ БЕР ЮЛДАБЫҘ...

**Халыҡ күңеле, һис һүҙһеҙ, рухи танһығын ҡандыра торған гәзит-журналдар көсәй. "Киске Өфө" гәзите ошондай ихтыяжды ҡандыра тип уйлайбыҙ.**

Гәзиттә милләтебеҙҙең тарихына ла күп урын бирелә. Башҡорттоң этногенезынан башлап, яҡындағы үткәненә хәтлем өйрәнгән ғалимдар, тарихсылар телмәр тота гәзит биттәрендә. Уларҙың сығышы уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу, һорауҙар тыуҙыра, төрлө фекер алышыуҙарға этәргес бирә - был үҙе бер мәктәп.

Телгә, ергә, рухи ҡомартҡыларға ҡағылышлы мәсьәләләр ҙә баҫманың иғтибар үҙәгендә. Ошо өлкәлә хеҙмәт итеүсе белгестәр менән һөйләшеүҙәр, республикала алып барылған эш программаларын анализлау бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙыр, моғайын. Йәш быуынды тәрбиәләү алымдары тураһында аҡыллы, тәжрибәле халыҡ педагогтары менән фәһемле аралашыуҙар әллә күпме уҡыусының ойоп яҡтан сәмен, ғәмен уятыр.

Бөгөнгө глобалләшеү заманында, сәйәсәттең киҫкен боролоштар алған мәлендә ошондай йән аҙығы булырҙай, бер ҡанлы, бер аңлы халыҡты туплаға, таратмаҫҡа, һаҡлап ҡалырға тырышып эшләгән баҫма ул "Киске Өфө". Уның үҙ һүҙе, фекере, ҡарашы бар. Ә иң мөһиме, уны халыҡ ишетә, ҡабул итә. Ошо юлындан тайпылма, "Киске Өфө"! Беҙ бер юлдабыҙ.



*Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Башҡорттар" мәғлүмәти тапшырыуҙар редакцияһы.*

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә XV Рәсәй энергетика форумы бара. Сараны уҙғарыу урыны итеп "ВДНХ-Экспо" күргәҙмә комплексы һайланған. Унда Рәсәйҙең 12 төбәгенән, Беларусь Республикаһынан, Ҡаҙағстандан вәкилдәр ҡатнаша. Программала 17 эшлекле осрашыу ҡаралған. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй энергетика форумы Башҡортостанда 2000 йылдан уҙғарыла. Уның маҡсаты - Башҡортостандың, Уралдың һәм Рәсәйҙең энергетика һөҙөмтәлелеген арттырыу юлдарын тикшереү. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов энергетика форумын асыу тантанаһында сығыш яһаны, форум сиктәрендә ойошторолған күргәҙмәләрҙе ҡараны.

✓Башҡортостанда "Республикам минең" тип исемләнгән I республика әҙәби конкурс үтә. Бәйгенең маҡсаты - талантлы балаларҙы асыҡлау, уларҙың һәләттәрен үҫтереү, әҙәби ижадҡа ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу. Идея авторы, конкурс комиссияһы рәйесе, республика Дәүләт Йыйылышы Рәйесе урынбаҫары Йомабикә Ильясова әйтеүенсә, ошо маҡсатта конкурс барышында мәктәптәрҙә балалар менән осрашыуҙар ойошторолаасаҡ, яҙыусылар һәм шағирҙар осталыҡ дәресе күрһәтәсәк. Конкурс йомғаҡтары буйынса "Республикам минең" тип аталған йыйынтыҡ баҫылып сығасаҡ.

✓Башҡортостанда тәүге Берҙәм миграция үҙәге асылды. Ул Туймазы ҡалаһында урынлашҡан. Башҡортостан буйынса федераль миграция хеҙмәте идаралығы начальнигы Борис Гөзәйеров һүҙҙәренсә, Берҙәм миграция үҙәге - республикала тәүгеһе. Уның Туймазы районында асылыуы осраҡлы түгел. Бында 136 фермер хужалығында эшләү өсөн сит ил граждандары йәлеп ителә. Йәй көнө хеҙмәт мигранттарының һаны дүрт меңгә етә. Улар хәҙер Берҙәм миграция үҙәге хеҙмәттәре менән файҙалана аласаҡ.

✓2015 йылдың ғинуар-август айҙарында Башҡортостанда айлыҡ уртаса эш хаҡы 25139,5 һум булды. Реаль эш хаҡы 90,4 процент тәшкил итте (ҡулланыу хаҡтары индексын иҫәпкә алып), тип хәбәр иттеләр Башҡортстанстатта. Ағымдағы йылдың 1 октябренә эш хаҡы буйынса кисектерелгән бурыстың дөйөм суммаһы 3,3 миллион һум тәшкил иткән. 2015 йылдың 1 сентябре менән сағыштырғанда, бурыстың дөйөм күләме 0,3 миллион һумға (9,7 процент) артҡан.

✔ *Элек байрамдарҙың да байрамы булған 1917 йылғы Октябрь революцияһы тураһында хәҙер ҡәҙимге көндәрҙең береһе рәтендә баҫалҡы ғына әйтеп кителә. Уны килешеү һәм ярашыу көнө тип тә үҙгәртергә маташтылар түгелме?*



БЫЛ АЙҘА...

# ҠЫРПАҒАЙҘА - НИ АРБА,

## ни сана



**Йылдың ун беренсе айын "ни арба, ни сана" тип ҡылыҡһырлай халыҡ. Рашҡы мәле әҙәмгә лә, мал-тыуарға ла ҡыйын. Етмәһә, эңер иртә төшә. Шул уҡ ваҡытта "ҡырпағай" тип тә исем биргән боронғолар ноябргә. Борон ни, ямғыр ҙа ваҡытында яуып, ҡыш та үҙ мәлен белеп килгән замандарҙа тап ошо айҙа ятҡандыр инде тәүге ҡар. Заман, заман артынан климат үҙгәрә хәҙер: сентябрҙә ҡар һибәләп китеүенә лә, ул иреп, декабрҙә генә "нәстәйәшший" ҡыш башланыуына шаһит булғылап торабыҙ бик йыш.**

Быйыл ни күрһәтер тәбиғәт, алдан күҙаллау ҡыйын. Ғалимдар ҙа хатта буталып киткеләй бит ҡай саҡ: бер ҡараһаң, климат йылына, мәңгелек боҙлоҡ ирей; икенсе ҡараһаң, ер шары һыуына, сөнки гольфстрим ағышы туктай, ҡояш һүрәнләнә, тип ҡурҡыталар... Интернет кинлектәрендә был турала төкөрөк сәсеп бәхәсләшеүселәрҙең берәүһе булһа ла шул саҡ тағы бер климат - кешелек мөхите - планетабыҙ халыҡтары араһындағы климат хаҡында уйлап бирһәсе! Тәбиғи мөхиттең бысраныуында һәм шул арҡала климат боҙолоуында кешелек факторының туранан-тура йоғонтоһо иҫбат ителгән инде. Шуға ла бөтөн ҡитғалар халыҡтары, бөтөнөһө бер булып, планетабыҙ именлеген һаҡларға ынтылырға, ошо маҡсатҡа берләшергә, тыныс нигеҙҙә хеҙмәттәшлек итергә тейеш. Был **4 ноябрҙә** Рәсәй буйынса билдәләнә торған Халыҡтар берҙәмлеге көнө айҡанлы тыуған уйҙар һәм хыял ғына ни бары...

**7 ноябрь** Рәсәйҙә тағы бер иҫтәлекле дата: Хәрби дан көнө. 1941 йыл Мәскәү йөрәге Ҡыҙыл майҙанда хәрби парад үткәрелә һәм унда ҡатнашыусылар шунан тура фронтҡа оҙатыла. Ошо уҡ көн совет заманында байрамдарҙың да байрамы булған 1917 йылғы Октябрь революцияһы тураһында хәҙер ҡәҙимге көндәрҙең береһе рәтендә баҫалҡы ғына әйтеп кителә. Әйткәндәй, был датаны Б. Ельцин булһа кәрәк, килешеү һәм ярашыу көнө тип үҙгәртергә лә маташты түгелме әле? Тик быны кемдәрҙе һәм ни юҫыҡта яраштырырға тырышты икән ул? Олигархтар менән фәҡирҙәрҙеләр, бәлки? Шулай итеп, был ике дата бер ҡаҙандағы ике тәкә башы кеүек, йәнәшә торалар әле...

Күңеллерәк темаға күсәйекме әллә? Улайһа, шундуҡ күсәбеҙ уны, иртәгәһенә үк! **8 ноябрь**, әйткәндәй, Халыҡ-ара Шаяндар һәм тапҡырҙар (КВН) көнө лә баһа! Әйҙә, көлөгөҙ! Әллә ни шашып та китмәгеҙ, алда тағы етди көндәр бар әле. Тик бына уларын нисек аңлатырға уҡыусыға - аптырап. Календарға аҡҡа ҡара менән яҙып ҡуйылған ике дата ла (**12**) ысынбарлыҡта иһә күренмәй ҙә, "еҫе" лә сыҡмай хатта. Хәтерләгеҙ әле, профсоюздар хаҡында ҡасан һуңғы тапҡыр ишетергә тура килде һеҙгә? Йә, әйтәйек, Сифат көнөнөң ошоға тиклем бер ни булмағандай йәшәп ятыуы гәжәпләндермәйме һеҙҙе? Бөгөн тормош сифатыбыҙ түбәнгә тәгәрәй, рационыбыҙҙа экологик таҙа, натураль ризыҡтар кәмегәндән-кәмей барғанда. Сифат нимә ул бөгөн һәм уны нимәгә ҡушып ашайҙар икән? Пальма, үҫемлек, хайуан майҙары, маргарин ҡушып эшләнгән "аҡ" май микән ул, әллә ни эләкһә, шунан үткәрелеп, яһалма тәмләткестәр ҡушып ыҫланған колбасамы? Бик ауыр һорау. Бындай ризыҡ һаулыҡҡа түгел - шуны ғына әйтеп була. Ә һаулыҡты бер нәмәгә ҡарамай һаҡларға кәрәк. **14 ноябрь**, шулай итеп, Бөтөн донъя шәкәр сиренә ҡаршы көрәш көнө иғлан ителгән. Кем әйтмешләй, ин яҡшыһы - һаулыҡты йәштән һаҡлау. Был **17**-һе билдәләнә торған Студенттар көнөнә лә ҡағыла, сөнки Халыҡ-ара тәмәкенән баш тартыу көнөнә (**19**) улар ҙа дәррәү ҡушылыр бит, моғайын? Унан ары сиратлап киләсәк Бөтөн донъя бала (**20**), ТВ (**21**), Мәғлүмәт (**26**), Мәғлүмәтте һаҡлау (**30**) көндәре һәм, ниһайәт, Әсә көнө (**29**) - бөтөнөһө лә уйлығәмле әҙәмде бөткөһөҙ уйға һалыр даталар.

Заманабыҙ шул тиклем үҙгәрҙе, элек ҡәҙимге тойолған был көндәр хәҙер ихтыярһыҙҙан башҡасараҡ ҡараш талап итә төҫлө. Нисек кенә булмаһын, фекерҙәр яңырһа, яңыра торһон. Тик хәтеребеҙ генә юйылмаһын. Үткәндәрҙе лә, һәр заманда ла халҡына хеҙмәт күрһәтеп, абруй ҡаҙанған шәхестәребеҙҙе лә онотмайыҡ. Бына улар, ҡырпағайҙа тыуғандарҙың ҡайһы бер күренеклеләре:

**5** - телсе, профессор һәм академик, оҙаҡ йылдар БДУ-ның филология факультетын етәкләгән ғалим **Марат Зәйнуллинға** 80 йәш.

- телсе, яҙыусы, профессор һәм академик, тиҫтә йылдан ашыу БР Фәндәр академияһы вице-президенты булып эшләгән ғалим **Зиннур Ураҡсиндың** тыуыуына 80 йыл.

**7** - телсе, филология фәндәре докторы, профессор Ҡасим Әхмәровтың тыуыуына 115 йыл.

- Һуғыш, хеҙмәт, Ҡораллы көстәр һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары ветерандарының Башҡортостан республика советы рәйесе **Марат Муллағәлләмовҡа** 85 йәш.

**11** - журналист, яҙыусы, публицист, Шәһит Хоҙайбирҙин һәм Муса Мортазин исемендәге премиялар лауреаты **Рәүеф Насировтың** тыуыуына 80 йыл.

**19** - яҙыусы, II дәрәжә Ватан һуғышы ордены кавалеры **Шакир Янбаевтың** тыуыуына 90 йыл.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЮНЫСҠЫНЫ ЛА...

## аҡсаға әйләндерергә мөмкин

**Барыһы ла нефть бизнесына, күсемһеҙ милек эшҡыуарлығына тотона йәки башҡа төрлө ҙур эшмәкәрлек менән була алмай. Шулай ҙа һәр кем, теләге һәм тырышлығы булғанда, бер аҙ аҡса эшләй ала. Бының өсөн төрлө юлдар, ысулдар, мөмкинлектәр бар - бары тик үҙенә ҡулай булғанын һәм күңеленә ятҡанын табырға ғына кәрәк. Ниндәй кәсепкә тотонорға белмәгәндәргә интернет селтәрендә урынлаштырылған эшҡыуарлыҡ төрҙәре араһында ҡараштырырға була. Шулай уҡ "Киске Өфө"лә даими сығып килгән һәм халыҡҡа аҡса эшләүҙең төрлө юлын күрһәткән рубрика ла ярҙам итә ала. Был яҙмамда үҙемдең эшмәкәрлек тураһында бәйән итмәксемен. Ул ябай ҙа, шул уҡ ваҡытта ярайһы ғына килем дә килтерә.**

Статистика буйынса, Рәсәй ҡалаларында йәшәүселәрҙең яҡынса 70% ҡала янында баҡса тота. Ә ауыл-ҡасабаларҙа иһә һәр кемдең тиерлек милкендә баҡса бар. Мин бында бәрәңге йәки башҡа төрлө йәшелсәемеш үҫтерә торғанды түгел, ә матурлыҡ өсөн булдырылған баҡса тураһында һүҙ йөрөтәм. Һәм, тәбиғи, уларҙың һәр береһе үҙ ерҙәрен матурыраҡ, үҙенсәлеклерәк һәм башҡа берәүҙә лә булмағанса биҙәргә, матурларға тырыша. Һуңғы ваҡытта күп баҡсасылар бының өсөн төрлө төҫтәге мульчаны (сүп үләне үҫмәһен өсөн тупраҡҡа йәйелә торған материал) тотона. Был ысул, шулай уҡ практик йәһәттән дә ҡулай, сөнки сүп үләндәрен даими йолҡоп тормаҫҡа ярҙам итә. Мульча түшәлгән тупраҡта һыу оҙағыраҡ һаҡлана - был да көн һайын баҡсаға һыу һибеүҙән ҡотҡара.

Мульча өсөн күп осраҡта юнысҡы (тап) тотонола. Ғөмүмән, ағастың был ҡалдығы байтаҡ ҡына өлкәлә ҡулланыла. Мәҫәлән, юнысҡы һалып, бейек түтәлдәр эшләйҙәр. Шулай уҡ уны ыҫлауҙа һәм хатта бинаны йылытыу өсөн дә тотоналар. Шуға күрә юнысҡыға һорау һәр ваҡыт ҙур. Ләкин һәр кем уны таба алмай, ә тапҡан хәлдә лә күптәрҙең алдында баҡсаға тиклем алып килеү мәсьәләһе тора. Минең "эшҡыуарлыҡ" баҡсасыларҙы юнысҡы менән тәьмин итеүгә ҡайтып ҡала ла инде. Хәҙер ағас эше менән булған шәхси эшҡыуарҙар күп. Уларҙың пилорамаларында юнысҡы күпләп туплана һәм уны ҡырға алып барып түгәләр. Был, беренсенән, ҡул көсө талап итә, икенсенән, техника һәм яғыулыҡ яғынан да бәкәлгә һуға. Шуға күрә, ситтән килеп үҙе тейәп алып китеүсене пилорамаларҙа ҡуш ҡуллап ҡаршылайҙар. Әлбиттә, юнысҡыны үҙҙәре ҡайҙалыр алып барып һатыусылар ҙа бар, ләкин күпселек осраҡта эшҡыуарҙар был ваҡ эш менән булышыуҙан баш тарта. Шулай ҙа әгәр юнысҡыларын буш бирергә теләмәһәләр, уның кубометрын (яҡынса 600-800 килограмм) 200-400 һумға һатып алам. Ә һатҡанда юл хаҡын, тейәү-бушатыу хеҙмәттәрен ҡушып, уның хаҡын күтәрәм һәм 600-800 һумға һатам, ә айырманы кеҫәмә һалам. Әлбиттә, был ысул ҡала яны баҡсасылары менән эш итеү өсөн генә ҡулай, сөнки ауылда йәшәүсе һәр кем пилораманан үҙенә етерлек юнысҡыны үҙе барып алырға мөмкин. Шулай итеп, килем килтереүселәр исемлегенән ауылда йәшәүселәрҙе алып ташлаһаң да, кеҫә яҙ-йәй миҙгелендә арыу ғына ҡалыная.

Эшмәкәрлекте киңәйтеп, баҡсасыларға төҫһеҙ юнысҡы урынына төрлө төҫтәргә буялғанын тәҡдим итергә була. Был, әлбиттә, мәшәҡәтле эш, ләкин мин хаҡлы ялдамын һәм ваҡыт яғынан тығыҙлыҡ кисермәйем. Ул саҡта хаҡтар ҙа икенсе төрлө була - 10 килограммлыҡ тоҡ 300-500 һумға барып төшә. Тик буяуҙарҙың хәүефһеҙ булырға тейешлеге хаҡында онотorға ярамай. Төҫлө юнысҡыларҙы баҡсасылар юлдарға, сәскә үҫкән биләмәләргә түшәүҙән тыш тәрәхәт итеүсе һалыу өсөн бик теләп ала. Шулай уҡ ҡала фатирҙарында йәки эш офистарында гөл һауыттарына һалыу өсөн һатып алыусылар ҙа байтаҡ. Юнысҡыны, төҫһөҙөн дә, буялғандарын да, төрлө ауырлыҡта үлсәп төрөп, үҫенте йәки хужалыҡ тауарҙары һатҡан магазиндарға ла һатыуға сығарам.

Бына ошондай юл менән ҡар ирип, баҡсасылар ҡыбырлай башлау менән, улым менән эшкә тотонабыҙ. Үҙебеҙҙең ҡаланы ғына түгел, күршеләрҙе лә ошондай мульча менән тәьмин итәбеҙ. Әллә ни ҙур көс түгергә лә кәрәкмәй, ә аҡсаһы килеп тора. Ҡышҡылыҡ, әлбиттә, кәсеп һүрелә, ләкин яҙ-көҙ мул ғына килем алырға була.

**Фаяз АБЫҘГИЛДИН.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Быйылғы йылдың туғыҙ айы йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында йән башына торлаҡ төҙөү һәм уны сафҡа индереү буйынса тәүге урынды биләй. Статистика мәғлүмәттәре буйынса, ауыл ерендә - 919,4 мең, ҡалала 1029,5 мең квадрат метр торлаҡ сафҡа индерелгән (2014 йылдың ғинуар-сентябрь айҙарына ҡарата 98,5 процент һәм 111,2 процент). Шәхси төҙөүселәр үҙ иҫәбенә һәм кредит ярҙамында дөйөм майҙаны 1280,6 мең квадрат метр булған 11,2 мең йорт төҙөгән (былтырғы ошо уҡ осорҙағы кимәлгә ҡарата 93,2 процент). Торлаҡ төҙөлөшө структураһында уларҙың өлөшө 65,7 процент тәшкил итте.

✔Өфөлә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 23-сө ултырышы булды. Республика закон сығарыусылары 60-тан ашыу мәсьәләне ҡараны. Депутаттар иғтибарына Кушнаренко районының Салауат исемендәге ауыл хужалығы етештереү кооперативында булған хәлгә үткәрелгән парламент тикшереүе йомғаҡтары тәҡдим ителде. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының Дәүләт Думаһына коррупцияға ҡаршы ҡануниәтте үҙгәртеүсе федераль закон проектын индереү буйынса закон сығарыу башланғысы ҡаралды. Үҙгәреш яҡын туғандарҙың дәүләт граждандыҡ һәм муниципаль хеҙмәттәндә вазифалар биләүен сикләүгә ҡуҙ унында тота.

✔Башҡортостандың "Әсә йөрәге" әсәләр советы төбәк йәмәғәт ойошмаһы "Быуын" II республика конкурсына ғаризалар ҡабул итә башлауы хаҡында иғлан итте. Сара Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры һәм "Тамыр" телеканалы ярҙамында уҙғарыла. Бәйгелә һаулығы буйынса мөмкинлектәре сикләнгән балалар тәрбиәләүсе ғаиләләр ҡатнаша. Ғаризалар 20 ноябргә тиклем igulshat-2010@mail.ru электрон адресына ҡабул ителә. Сара 9 декабрҙә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт драма театрында уҙғарыла.

✔Башҡортостанда 2016 йылға Ураҙа һәм Ҡорбан байрамдары көнө билдәләнде. 2015 йылдың 26 октябрендә республика Хөкүмәтенең тейешле ҡарары на ҡул ҡуйылды. "Башҡортостан Республикаһында байрамдар һәм иҫтәлекле даталар тураһында"ғы Законға ярашлы, 2016 йылда 5 июль - Ураҙа байрамы һәм 12 сентябрь - Ҡорбан байрамы көндәре тип иғлан ителә.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Башҡортостан Рәсәйҙә беренселәрҙән булып бындай иғтибарға лайыҡ булды. Был ваҡиғаны халыҡ-ара хәлдәр ҡиҫкенләшкән донъяла үҙебеҙҙең абруйыбыҙҙы арттырыу, имиджыбыҙҙы нығытыусы сара тип ҡабул итергә кәрәк.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАЙРАМ КИЛӘ, БАЙРАМ!



**2020 йылда Башҡортостан халыҡ-ара традицион мәҙәниәттәр фестивален - Бөтөн донъя фольклориадаһын ҡабул итә. Был турала Перуҙың Арекипа ҡалаһында үткән ЮНЕСКО эргәһендәге Фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәрен ойоштороусыларҙың халыҡ-ара советының (CIOFF) Бөтөн донъя ассамблеяһы сиктәрендә иғлан ителде.**

Бөтөн донъя фольклориадаһын үткәреү республика өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Фольклориада - Фольклор фестивале һәм традицион сәнғәт халыҡ-ара советының рәсми сараларының береһе. Фестиваль Олимпиада принцибы буйынса дүрт йылға бер тапҡыр уҙғарыла. Тәүге Фольклориада 1996 йылда Голландияла уҙған, 2012 йылда уны Корея ҡабул итте, 2016 йылда мәҙәниәт әһелдәре Мексикала осрашасаҡ. Йәғни, Башҡортостан Рәсәйҙә беренселәрҙән булып бындай иғтибарға лайыҡ булды. Дәүләт Рәсәй Халыҡ ижады йорто етәксеһе Тамара Пуртова билдәләүенсә, был ваҡиғаны халыҡ-ара хәлдәр ҡиҫкенләшкән донъяла үҙебеҙҙең абруйыбыҙҙы арттырыу, имиджыбыҙҙы нығытыусы мөһим сара тип ҡабул итергә кәрәк.

РФ Мәҙәниәт министры Владимир Мединский ҙа "Россия 24" телеканалы эфирындағы сығышында был ваҡиғаға үҙ фекерен белдерҙе: "Санкциялар сәйәсәтенә ҡарамайынса, Фольклориада үткәреү урыны итеп Рәсәй һайланыуы айырыуса шатлыҡлы. Тимәк, мәҙәниәт иң яҡшы дәүләт илсеһе икәненә тағы бер тапҡыр инанырға тура килә".

Рәсәйҙә CIOFF статусындағы һәм ЮНЕСКО яҡлауы аҫтындағы фольклор фестивалдәре күп түгел. Мәскәүҙәге фольклор фестивале, Владимир өлкәһендәге - "Золотое кольцо", Бөйөк Новгородтағы "Садко", Дағстандағы "Горцы" һәм Башҡортостандағы "Берҙәмлек" фестивалдәре ойошторолоуын иҫәпкә алғанда, Фольклориада үткәреү теләге менән ошо төбәктәр генә мөрәжәғәт итә ала һәм республика быныӊ менән файҙалана ла инде. Тамара Валентиновна әйтеүенсә, Башҡортостанда быныӊ өсөн бөтөн уңайлыҡтар, иң мөһиме, теләк һәм тәжрибә бар. Фестивалгә яҡынса 205 мең ҡатнашыусы килеүе көтөлә. Һәр Фольклориаданың үҙенең флагы, гимны, символикаһы була, әммә уларҙы "Кулдар ҡулда" тигән бер девиз берләштерә. Был девиз халыҡтар дуҫлығын, мәҙәни мираҫ өлкәһендә тәжрибә уртаҡлашыуҙы символлаштыра. Концерттарҙан тыш, милли кейемдәр, ҡул эштәре, милли аш-һыу күргәҙмәләре үтә. Фольклориаданың төп маҡсаты ла кешелектең матди булмаған мәҙәниәтенә иғтибар йүнәлтеү, уны һаҡлау һәм донъя илдәренә таратыу.

# ӘКИӘТ БҮЛӘК ИТ



**Былтыр беренсе тапҡыр Өфө ҡалаһының ҡарауға бала алған ғаиләләрендә тәрбиәләнеүселәр өсөн "Өйгә килгән әкиәт" тип аталған Яңы йыл менән ҡотлау акцияһы үткәрелгәйне.**

Байрам алдынан Ҡыш Бабай менән Ҡарһылыу һәм уларҙың әкиәттәге дуҫтары бер нисә көн буйына төрлө сәбәптәр арҡаһында байрам сараларында ҡатнаша алмаған балаларҙы ҡотлап йөрөнө. Акцияның үҙенсәлеге булып үҙҙәре лә ғаиләнә алмаштырыусы ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүсе олораҡ йәштәге балаларҙың изге тылсымсылар ролен башҡарыуы булды. Улар ҡотлау сценарийын да үҙҙәре яҙған, балаларҙың сирен һәм йәшен иҫәпкә алып, уларға тап килгән уйындар һайлаған, бүләктәр әҙерләгән. Быйыл да был акцияны дауам итеү теләге бар, әммә ҙалыҡтан да ярҙам кәрәк. Әгәр кемдер уйынсыҡтар тегә, бәйләй, сигә, биҙәүестәр яһай, декупаж менән мауыға, быяланы биҙәй йәки ниндәйҙер ҡул эшенә маһир икән - ошо акцияға үҙ өлөшөгөҙҙө индерә алаһығыҙ. Һеҙҙең ҡул эштәрен йәрминкәлә һатыуҙан килгән аҡса балаларға бүләк алыуға тотоноласаҡ. Йәрминкә буйынса мәғлүмәтте 241-42-25 телефон номеры буйынса шылтыратып алырға мөмкин. Балаларға бергәләп әкиәт бүләк итәйек!

# ИНТЕРНЕТТА - БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ

WIKIPEDIA ASIAN MONTH NOVEMBER 2015

**1 ноябрҙән 30-на тиклем Ҡытай, Һиндостан, Индонезия, Филиппин, Тайвань, Япония, Үзбәкстан һәм Таиланд ирекмәндәренең башланғысы буйынса "Wikipedia Asian Month" халыҡ-ара викимарафоны уҙғарыла. Сара Азия тематикаһы буйынса яңы мәҡәләләр яҙыуға йүнәлтелгән. 27 тел бүлектәре, шул иҫәптән Башҡорт Википедияһы мөхәррирҙәре, ирекмәндәре был идеяны хупланы.**

Башҡорт Википедияһы администраторы Рөстәм Нуриев хәбәр итеүенсә, интернет-энциклопедияның башҡорт бүлеге ирекмәндәре ошондай халыҡ-ара сараларҙа тәүге тапҡыр ғына ҡатнашмай. 2012 йылда улар Алматыла төрки телле Википедиялар конференцияһында туған телдәге виртуаль энциклопедия менән таныштырҙы. Быйыл Башҡорт Википедияһының 10 йыллығына арналған "Вики-Һабантуй"ҙы юғары кимәлдә үткәрҙе. Сентябрҙә Эстонияла Үҙәк һәм Көнсығыш Европа илдәре ирекмәндәре менән осрашыуҙа ҡатнашты. Улар коллегаларына Башҡортостан, үҙҙәренең эше, шул иҫәптән республиканың киң мәғлүмәт саралары менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итеүе хаҡында һөйләне.

"Ағымдағы йылдың 25 апрелендән 14 июнгә тиклем "Викимедиа РУ" һәм "Беҙҙең киләсәк" төбәк социаль программалар фонды ойошторған Рәсәй конкурсында ҡатнаштыҡ һәм социаль эшҡыуарлыҡҡа арналған 221 мәҡәлә өҫтәнек", - тип һөйләне Рөстәм Нуриев. Уның фекеренсә, Башҡорт Википедияһының сираттағы, әммә күләмлерәк һәм әһәмиәтлерәк халыҡ-ара сарала ҡатнашыуы Башҡортостанды - донъя кимәлендә, Википедияны иһә республикала популярлаштырыуға тағы ла бер аҙым буласаҡ.

# ӘҘӘМИ САРА БУЛА ИНДЕ БЫЛ

**Баш ҡалала 9 - 12 декабрҙә Евразияның гуманистик форумы үтәсәк. Был сара Рәсәйҙең Шанхай хеҙмәттәшлеге ойошмаһында рәйеслек итеү планына ярашлы уҙғарыла.**

Форум фән, мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендә, Евразия кинлеге контексында мәғрифәтселек идеяларын популярлаштырыу, гуманитар өлкәләге берлектәге ғилми-тикшеренеү программалары һәм проекттарын тормошҡа ашырыу, студенттарҙы һәм йәш ғалимдарҙы Евразияның, ШОС илдәренең тарихын, мәғарифын, мәғрифәтселек традицияларын өйрәнеүгә йәлеп итеү, берлектәге халыҡ-ара белем биреү программаларын артабан үҫтереү өлкәһендә дәүләт-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә йүнәлтелә. Сараға Рәсәй төбәктәренән, Ҡаҙағстандан, Үзбәкстандан, Ҡырғыҙстандан, Ҡытайҙан, Тажикстандан 2000 ҡатнашыусы килеүе көҙәллана. "Беҙ үҙебеҙ өсөн форумдың девизын билдәләнек: гуманизм - ул, тәү сиратта, кешегә һәм уның асылында булған бөтөн нәмәгә һаҡсыл ҡараш. Өфөлә үтәсәк Евразияның гуманистик форумы дөйөм кешелек ҡиммәттәре буйынса фекер алышыу майҙансығы буласаҡ, - ти Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов. - Сарала политологтар, социологтар, медицина хеҙмәткәрҙәре, мәғариф, фән һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ҡатнашасаҡ. Беҙ бер майҙансыҡҡа төрлө йүнәлешле, әммә бер-береһен тулыландырып тороусы белгестәрҙе, алдынғы ғалимдарҙы йыйырға тырыштыҡ".

2015 йыл Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына ҡаршы көрәш йылы тип иғлан ителгәйне, был гуманистик форумда төп йүнәлештәрҙең береһе буласаҡ. "Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфаланған кешеләрҙе иҫкәртеү, дауалау һәм реабилитациялауҙың мөһим мәсьәләләре" тигән халыҡ-ара конференцияға Ҡытай, Ҡаҙағстан, Рәсәй һәм Иорданиянан ошо тармаҡ белгестәре килә. Осрашыу барышында медицина ҡоралдары, дарыуҙар һәм сығым материалдары күргәҙмәһе ойоштороло. Форум сиктәрендә ҙур мәҙәни ваҡиға - Икенсе Халыҡ-ара "Аҡбуҙат" милли һәм этник кино фестивале буласаҡ. Әле конкурс һәм конкурстан тыш программалар өсөн фильмдар һайлап алыу буйынса ҙур эш алып барыла, Башҡортостандан дүрт ғариза бирелгән.

# ҺӨҘӨМТӘЛЕ ЭНЕРГЕТИКА

Российский Энергетический Форум Уфа 2015

**27-30 октябрҙә "ВДНХ-Экспо" күргәҙмәләр комплексында XV Рәсәй энергетика форумы үтте. Ул Башҡортостанда 2000 йылдан алып эшләп килә һәм илдең энергетика тармағында иң ҙур ваҡиғаларҙың береһе булып тора. Форум сиктәрендә шулай уҡ "ШОС һәм БРИКС энергетикаһы" Халыҡ-ара һәм "Энергия һаҡлау. Яҡтылыҡ техникаһы. Кабель" XXI махсуслаштырылған күргәҙмә эшләй. Унда Рәсәйҙең 25 төбәгенән, Беларустан, Сербиянан һәм Германиянан 150 предприятие үҙ экспозицияһын тәҡдим итте.**

Быйыл XV Рәсәй Энергетика форумының темаһы - "Һөҙөмтәле энергетика". Уның бурыстары булып төбәктең энергетик инфраструктураһын үҫтереү мәсьәләләрен хәл итеү, кадрҙар сәйәсәте, инвестиция механизмдары, ҡала төҙөлөшө, импортты алмаштырыу, үҙәкләштерелгән йылылыҡ менән тәьмин итеү өлкәһендә энергоэффектив энергетика үҫеше стратегияһын формалаштырыу торҙо. Форум сиктәрендә 20 сара, шул иҫәптән 10 секция эше алып барылды. Шулай уҡ Рәсәйҙә тиңе булмаған Smart Grid концепцияһын - заманса технологик үҙәкте презентациялау менән бер рәттән Өфө ҡалаһы Селтәрҙәре менән идара итеү үҙәген тантаналы асыу, Хәйбулла районының Бүребай ауылында ҡояш электр станцияһын телекүпер режимы аша асыу ойошторолдо.

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Инженер Эльвир Ишкилдин Өфөлә уҙған "Юлдаш йыры-2015" конкурсында еңеүсе исемен яуланы. Бәйгесе Күгәрсен районынан килгән. Фестивалдең гала-концертында еңеүселәргә бүләктәр тапшырылды. Беренсе урынға Сибайҙан Ринат Тулыбаев һәм Бүздәк районынан Филүс Вәлиев лайыҡ булды. Быйыл республика асыҡ конкурсында республиканан һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән башҡорт һәм татар телдәрендә йырлаған 60 үҙешмәкәр башҡарыусы ҡатнашты. Уларҙың 23-ө генә финалға сыҡты.

✓3 ноябрҙә республиканың Хәрби Дан музейы "Сәнғәт төнө" акцияһында ҡатнаша. Сара Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына һәм Халыҡтар берҙәмлеге көнөнә бағышлана. Музей кискә сәғәт 6-нан төнгө 11-гә тиклем асыҡ буласаҡ. Белешмәләр өсөн телефон: 260-44-64; 260-44-16.

✓Быйылғы уҡыу йылынан алып мәктәптәрҙә Бөтә Рәсәй тикшереү эштәре уҙғарыла. Улар майҙың тәүге яртыһына планлаштырылған. "Был Берҙәм дәүләт имтиханы форматы түгел. Дүртенсе класс уҡыусылары тикшереү эштәрен үҙҙәренең мәктәбендә яҙа, белемдәрен дә уҡытыусылары тикшерә. Быны йыллыҡ контроль эштәр һәм диктанттар менән сағыштырырға мөмкин", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Башҡортостан Мәғариф министрлығының дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы һәм белем сифатын баһалау бүлеге етәксеһе Жанна Миникаева. Артабан Бөтә Рәсәй тикшереү эштәрен һәр уҡыу йылы йомғаҡтары буйынса уҙғарыу ҡарала: 2016 йылда - 4 класс, 2017 йылда 4 һәм 5 кластар өсөн.

✓"ПроЗерно" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте күҙаллауынса, быйыл Рәсәй карабойҙай йыйыуҙы арттырасаҡ. Уларҙың баһаһы буйынса, карабойҙай етештереү 823 мең тоннаға етәсәк. Был былтырғыға ҡарағанда 24,3 процентҡа күберәк, тип хәбәр итә "Интерфакс". Ғәҙәттәгесә, Башҡортостан Рәсәйҙә ҡарабойҙай етештереүселәр исемлегендә төп урынды биләй. Быйыл республикала 97 мең тонна йыйып алынған (2014 йылда - 64,5 мең). Алтай крайында - 335 мең (былтыр - 206 мең тонна), Орел өлкәһендә 77 мең (72 мең) тонна йыйылған.

✓Башҡортостанда пенсионерҙың 2016 йылға йәшәү минимумы 7842 һум күләмендә билдәләнгән. "Дәүләт социаль ярҙамы тураһында"ғы Федераль законда ҡаралғанса, йәшәү минимумы күрһәткесе пенсияға социаль өҫтәмә билдәләү өсөн файҙаланыла. 2015 йылда пенсияға социаль өҫтәмәне билдәләү өсөн пенсионерҙың йәшәү минимумы дәүмәле 6513 һум тәшкил итә.

КӨНАУАЗ

# ТАБИПЛЫҠҠА УҠЫ ҺӘМ...

## тыуған районыңа эшкә ҡайт!



**Ошо көндәрҙә "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһендә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева инициативаһы менән "Башҡортостан Республикаһының һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә кадрҙар мәсьәләһен хәл итеүҙең механизмы булараҡ, белгестәрҙе маҡсатлы әҙерләү" тип аталған түңәрәк ҡор үтте. Уның эшендә профиль министрлыҡтары һәм ведомстволары, муниципалитет вәкилдәре ҡатнашты.**

Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы белдереүенсә, Рәсәй Президентының майҙа ҡабул иткән Указдарын тормошҡа ашырыу сиктәрендә дәүләт медицина кадрҙары ҡытлығын бөтөрөү өсөн аныҡ саралар күрелә. Был йәһәттән табиптарҙы ауыл ерҙәрендә ҡалдырыу йүнәлешендә төрлө социаль ярҙам булдырылған. Ләкин Башҡортостанда былтыр "Земство табибы" программаһы 56 процентҡа ғына тормошҡа ашырыла. Бының үҙенә күрә сәбәбе лә бар: программа тулыһынса федераль бюджет иҫәбенә башҡарылғанда, ул 100 процентка үтәлә, әммә 2013 йылдан сығымдарҙы ҡаплауҙың 50 проценты субъекттар иңенә һалынғанлыҡтан, хәл ҡатмарлаша. Сөнки күпселек төбәктәрҙең аҡсаһы юҡ. Төбәк бюджеты күпме күләмдә аҡса бүлә, федераль бюджет та шул күләмдә генә финанслай. Әлеге ваҡытта федераль бюджетта ошо программаны тормошҡа ашырыу маҡсатында 500 миллион һум резервта ята. Әгәр субъекттар аҡса бүлеп, өҫтәмә заявка бирә икән, резерв фонд шунда уҡ аҡса бүлергә әҙер. Быйыл 100 заявка бирелгән һәм уның былтырғы кеүек яртылаш ҡына тормошҡа ашырылыуына юл ҡуйырға ярамай.

Әммә "Земство табибы" - урындарҙа медиктар проблемаһын хәл итеү юлдарының береһе генә. Бынан тыш, йәш белгестәрҙе матди яҡлау, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләү, торлаҡ проблемаларын хәл итеү, эш хаҡтарын арттырыу һ.б. кеүек өҫтәмә социаль ярҙам саралары менән берлектә алып барылған юғары медицина уҡыу йорттары менән хеҙмәттәшлек кенә медицина кадрҙарына ҡытлыҡты бөтөрөргә мөмкин. Миҫал өсөн, сарала ҡатнашыусы Мәләүез районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рита Сәмиғуллина әйтеүенсә, районда 48 процент табиптар етешмәй. Әлбиттә, Тәтешле, Янаул кеүек көнбайыш райондар был мәсьәләне үҙҙәренсә хәл иткән - улар Ижевск медицина университеты менән 20 маҡсатлы урынға килешеү төҙөгән. Әммә Башҡортостанда башҡа райондар ҙа бар һәм уларҙың бар ҡарап торғаны - Башҡорт дәүләт медицина университеты. Унда ла, Рита Мадарик ҡыҙы әйтеүенсә, килешеү аныҡ төҙөлмәгән һәм төрлө ҡатмарлыҡтар тыуҙыра. "Республиканың башҡа юғары уҡыу йорттары менән йүнәлтмә буйынса маҡсатлы уҡытыуға килешеү төҙөү - ябай процедура, бер медуниверситетҡа килеп терәлһәк, лабиринтҡа эләккәндәйбеҙ", - ти ул.

БР Һаулыҡ һаҡлау министрының беренсе урынбаҫары Рөстәм Вәлиев иһә республикала медицина хеҙмәткәрҙәре дефициты буйынса мониторинг алып барылыуы тураһында һәм уҡыуға ҡабул итеүҙәге проблемалар тураһында белдерҙе. "Маҡсатлы ҡабул итеү кем өсөндөр балаһын уҡырға тығыу мөмкинлеге генә булмаһын ине. Сөнки күп ата-әсә өсөн һөнәр түгел, ә юғары белем мөһим. Шул сәбәпле күптәр диплом алғандан һуң һөнәре буйынса эшләмәй. Икенсе яҡтан, муниципаль райондарҙы комплекслы үҫтермәй тороп, бер генә йәш белгес тә унда эшкә барырға атлыҡып тормаясаҡ. Йәштәрҙе ылыҡтырыу өсөн инфраструктура булыуы мөһим. Шул уҡ ваҡытта, социаль ярҙам күрһәтеү өсөн бөгөн муниципалитеттарҙың да, үҙәк район дауаханаларының да аҡсаһы юҡ. Ә был тормошҡа ашырылырға тейешле проекттың төп талабы булып тора. Тағын бер мөһим мәсьәлә - бөгөн маҡсатлы ҡабул итеү өсөн берҙән-бер критерий - БДИ. Ә ҡала балаларының күрһәткестәре ауыл районында уҡыған балаларҙың һөҙөмтәһенә ҡарағанда яҡшыраҡ. Шуға бында төрлө яҡты күҙаллаған дөйөм критерий булдырырға кәрәк", - тине. Уның был фекере менән йыйылыусылар ҙа килеште, сөнки Сәлиә Мырҙабаева белдереүенсә, маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡырға ебәреүселәр исемлеге БДИ һөҙөмтәләре билдәле булғандан һуң түгел, ә 1 апрелгә тиклем әҙер булырға тейеш. БДМУ-ның уҡытыу эштәре буйынса проректоры Олег Ғәлимов фекеренсә, маҡсатлы йүнәлтмә буйынса килеүселәрҙең муниципаль райондарҙа уҡ һайланып, профориентация үтеүе зарур.

Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы ауыл райондарынан медик һөнәрен һайлаусы йәштәр өсөн БДМУ-ла маҡсатлы ҡабул итеү квоталары арттырылырға тейеш, тип иҫәпләй. Бөгөнгә был һан вуздағы дөйөм бюджет урындарының 50 процентын тәшкил итә (бюджет урындары дөйөм урындарҙың яртыһына тиң). Депутат был йәһәттән сирҡаныу алған да инде: былтыр уның хәстәрлеге һөҙөмтәһендә Мәскәү, Санкт-Петербург, Ырымбур, Пермь, Силәбе һәм Ижевск ҡалаларының медицина университеттарына Башҡортостан йәштәре өсөн 90 квоталы урын бүленгән. Башҡортостан студенттары уҡыған вуздар исемлегендә И. М. Сеченов исемендәге Беренсе Мәскәү дәүләт медицина университеты, Н. И. Пирогов исемендәге Рәсәй милли тикшеренеү медицина университеты, академик И. П. Павлов исемендәге Беренсе Санкт-Петербург дәүләт медицина университеты бар. "Йүнәлтмә буйынса уҡыусы студенттар 1-се курстан башлап үҙҙәрен ебәреүсе учреждениела практика үтәсәк һәм вузды тамамлағансы уҡ үҙен ниндәй эш көтәсәге тураһында хәбәрҙәр буласаҡ", - ти депутат.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ҠАРА КӨСТӨҢ АУЫ...

## йыраҡ түгел



**Терроризм - күп башлы аждаһа кеүек. Әлеге мәлдә күпселек ваҡиғалар ИГИЛ террористик төркөмө тирәһендә барһа ла, бөтә донъя өсөн шундай уҡ ҙур хәүеф тыуҙырыусы башҡа ошондай ойошмалар барлығы тураһында онотоорға ярамай. "Талибан", "Аль Каида", "Хамас", "Хизб ут-Тахрир аль ислами" һәм башҡа бихисап ойошмалар төрлө төбәктә үҙҙәренең эшмәкәрлеген әүҙемләштереүен дауам итә. Улар әленән-әле үҙ рәттәренә яңы ағзалар йәлеп итә, көс туплай. Рәсәй өсөн әлеге ваҡытта Көньяҡ төбәктәрҙә ҡуйырған ваҡиғалар айырыуса хәүефле һәм ҡурҡыныс.**

Афғанстан билмәһендә тупланған һәм әүҙем эшмәкәрлек алып барған террористик ойошмалар хәлдәрҙе ныҡ киҫкенләштерә. Уларҙың бөтә Урта Азия илдәрен генә баҫып алыу түгел, ә Рәсәй һәм хатта Европа илдәренә лә үтеп инеү мөмкинлеге юғары. Афғанстандағы террористар һаны Сирияла урынлашҡандарынан күпкә ҡалыша, ләкин тарих күрһәтеүенсә, теге йәки был илдә мәхшәр ойоштороу өсөн бындай ойошма ағзаларына һәр ваҡыт ҙур армия һәм бихисап ҡорал кәрәкмәй. Мәҫәлән, уҙған быуаттың 90-сы йылдары аҙағында Ҡырғыҙстанға үтеп ингән "Үзбәкстандың ислам хәрәкәте"нә ҡараған бер-нисә тиҫтә генә террорист тотош илде тарҡатыуға алып килде тиерлек. Шуға күрә һәр илдең үҙ сиктәрен һаҡлау, халҡын яҡлау һәм ниндәйҙер хәүеф-хәтәр янау осрағы тыуыу менән террорсыларҙы тиҙ арала кире ҡағырға әҙер булыуы бер ваҡытта ла актуаллеген юғалтмай. Ләкин был эшмәкәрлек берҙәм һәм ойошҡан булғанда ғына уңыш яулай ала. Тимәк, донъя илдәренә тик үҙ мәнфәғәтен генә алға ҡуйып, үҙ "ҡапҡаһының" ғына хәүефһеҙлеген ҡайғыртыу файҙаһыҙ, сөнки аждаһаның бер киҫелгән башы урынына тиҙ арала икенсеһе үҫеп сығып, икенсе яҡтан һөжүм итәсәк.

Афғанстанда ИГИЛ-ға ҡаршы ҡыҙыу көрәш алып барылған саҡта башҡа террористик ойошмалар иғтибарҙан ситтә ҡалып, көстәрен арттыра ғына бара. Ил сигенең 60 проценттан ашыуын үҙ контроле аҫтында тотҡан "Талибан" террористик ойошмаһы, билдәле, ойоп ятмай, ә үҙенең ҡанлы эшмәкәрлеген дауам итә. Ә был ике зәһәр көскә тағы ла ундағы "Аль-Каида"ның да ҡеүәтен ҡушһаң, ни тиклем ҙур хәүеф алдында тороуыбыҙҙы күҙ алдына килтерергә була. Рәсәйҙә һәм күрше илдәрҙә ошо араларҙа киҫәтелгән террористик акттар һанының артыуы ла, ҡалаларҙа кешеләрҙе вербовкалаусыларҙың күбәйеүе лә ошоға яҡшы дәлил. Шуға күрә, һәр кем урамдағы тыныслыҡтың үтә лә нескә булыуын һәм теләһә ҡайһы ваҡытта селпәрәмә килеү мөмкинлеген аңларға тейеш. Бөгөнгө көндә ҡайҙалыр алыҫта күренгән һәм беҙҙең ғәҙәти тормошҡа бер ниндәй йоғонто яһай алмаҫтай тойолған ҡара көстөң ауы беҙ уйлағанса уҡ йыраҡта түгел. Быны яҡшы төшөнгән ил етәкселеге ошо юҫыҡта әүҙем эшмәкәрлек алып бара. Шулай ҙа илебеҙ биләмәһендә ҡанлы һуғыштарҙың булмаҫына, террористарҙың әлеге ояларында дөмөгөүҙәренә ышанғы килә. Тыныслыҡтың ҡәҙерен ҡанлы ваҡиғалар аша аңларға яҙмаһын.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡан тамырҙарына килешә

❖ Веналарҙың варикоз киңәйеүе, простата биҙе шешеүе мәлендә 1 ҡалаҡ сәтләүек ағасы япрағына (лещина обыкновенная) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 50 мл эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай. 10 көн ял иткәндән һуң, кәрәк булһа, тағы ла ҡабатлағыҙ.

### Йоҡоһоҙлоҡ

❖ Йоҡлай алмай яфаланһағыҙ, нервы системаһын нығытып алырға теләһәгеҙ, бер семтем арыҫлан ҡойроғо (пустырник) үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғансы төнәтергә, һөҙөргә һәм йоҡлар алдынан 1-әр стакан эсергә.

### Эт дегәнәге

❖ Эт дегәнәге (череда) төнәтмәһе бөйөрҙәр шешеүен дауалай. Бер семтем үләнгә бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғансы төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан алда 50-100 мл эсергә.

❖ Эт дегәнәгенең ҡуйыраҡ төнәтмәһе аллергияның ҡайһы берҙәренә килешә. Бының өсөн төнәтмәне ваннағы һыуға өҫтәргә.

### Йөрәк сирҙәре

❖ Йөрәк мускулы нығынһын, йөрәк ауыртыуҙан туҡтаһын өсөн энәлек емешен (боярышник) ваҡлап, уға ҡайнар һыу өҫтәп, төнәтергә. Көнөнә 2 тапҡыр 50-әр мл эсергә. Төнәтмәне оҙаҡ һаҡламағыҙ, һәр ваҡыт яңыһын әҙерләгеҙ.

### Меңъяпраҡ

❖ Ашҡаҙан сей яраһы, бауыр, бөйөрҙәр, бәүел ҡыуығы һәм бәүел юлдары шешеүен меңъяпраҡ дауалай. Бер семтем киптерелгән меңъяпраҡ сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Тауыш бөтһә...

❖ Кәстрүлгә 1 стакан һыу ҡойорға, ярты стакан әнис үләне орлоғо һалып, 15 минут ҡайнатырға. Һөҙөргә һәм 2 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Ярты сәғәт һайын эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

***✓ Фрилианс менән шөғөлләнәм, "Бәйләнештә" сайтындағы үҙемдең төркөмдәрем аша реклама ярҙамында аҡса эшләйем, лекциялар уҡыйым. Минең тормош девизым: "Теләгән - әмәлен табыр, теләмәгән - сәбәбен табыр".***



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# РӘНЙЕШТӘРЕ...

## ҡаты аҡҡоштоң

**Айырым кешеләр төркөмөнөң аҡҡоштан барлыҡҡа килеүе тураһындағы ышаныуҙарҙың ярсыҡтары ырыу-ара номенклатураһында һәм антропонимдарҙа ла күренә.**

Ҡыуаҡан ырыуының атамаһын тап ошо ышаныуҙарға бәйләй ғалим Р. Кузеев. "Ку" төрки телендә аҡҡошто белдерә. Аҡҡош ырыуы әйле һәм ҡырғыҙ ырыуҙарында теркәлгән. Ҡыпсаҡ һәм юрматы ырыуы шәжәрәһендә Аҡҡош тигән исем осрай. Башҡорт исеме Аҡкужа ла аҡҡош орнитонимынан килеп сыҡҡан булыуы бар.

Икенсе яҡтан, башҡорттар аҡҡоштар кешенән барлыҡҡа килгән, тип ышанған. Аҡҡоштар Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың ҡәбере өҫтөндә үҫкән алмағастарҙың һутынан барлыҡҡа килгән (Ғ. Сәләм версияһы). "Көнһылыу" легендаһында бер-береһенә ғашиҡ йәндәр - Арыҫлан менән Көнһылыуҙың үлеменән һуң уларҙың кәүҙәләре өҫтөндә ҙур таш тау барлыҡҡа килә. Туғыҙ ай үткәндән һуң тау ярылып китә һәм унан ике аҡҡош осоп сыға. Әйтеүҙәренсә, Әй йылғаһы үҙәнендәге аҡҡоштар ошо ҡоштарҙан таралып киткән. "Мостафа мулла" әкиәтендә үлгән кешеләрҙең рухы төрлө сүрәткә, шул иҫәптән аҡҡошҡа ла әүерелә алған. Был фольклор мотивтарында кешенең йәне аҡҡошҡа әйләнә, тигән ышаныуҙар ята. "Урал батыр" эпосында аҡҡоштар башҡорттарҙың тәү әсәһе - аҡҡош-ҡатын-ҡыҙ Һомайҙың нәҫеле, тиелә.

Ышаныуҙар буйынса, аҡҡоштар парлашып ҡына йәшәй. Әгәр ҙә ҡоштоң ишен кемдер үлтерә икән, икенсеһе башын ҡанаты аҫтына тығып, һауанан ергә ташланып һәләк була. Башҡорттарҙың бөтөн этнографик төркөмдәрендә лә аҡҡошто үлтереү тыйылған. Уны ҡоштар батшаһы (Бөрйән районында), изге ҡош (Ишембай, Мәләүез, Яңауыл райондарында), ожмах ҡошо (Ырымбур өлкәһе Ҡыуаныҡ районында), һағышлы ҡош (Ырымбур өлкәһе Красногвардейский районында), ҡарғышлы ҡош (Баймаҡ, Бөрйән, Борай райондарында) тип атап йөрөтәләр.

Был тыйыуҙы боҙған кеше мотлаҡ язаһын татыясаҡ, тиҙәр. Аҡҡош үлтергән кешенең бөтөн нәҫеле ҡорой, тигән ышаныу бөгөн дә киң таралған. Бөрйән районынан Х. Зарипова атаһының һунарҙа аҡҡош атыуын һәм ҡайтҡас та ауырып китеп, үлеүен һөйләгәйне. Кемдәрҙер әйтеүенсә, инә аҡҡош үлтерелһә, ғаиләлә ҡатын кеше, ата аҡҡош булһа, ир кеше үлә. Улай ғына ла түгел, был рәнйеш тотош тоҡом-нәҫел, зат-ырыуға төшә. Шишмә районында М. Иҙрисова ағаһының ихатаһындағы бейек тирәккә йыл да пар аҡҡоштар килеүен, ағаһының уларҙы атҡандан һуң, ҡатыны менән икәүләп бер юлы мәрхүм булыуҙарын телгә алды.

Шул уҡ ваҡытта, яҙмышынды юрау маҡсатынан аҡҡош атыу күренеше барлығын да ишетергә тура килде. Баймаҡ районы Һәмән ауылынан Ә. Шәрипова һөйләүенсә, яҙмыш юрау өсөн аҡҡошто атырға ярай, әгәр ҙә аҡҡош шунда уҡ үлмәйенсә, тыпырсынып ятһа - ошо уҡ йылда яҡты донъяны ҡалдыраһың, киреһенсә булһа, оҙаҡ йәшәйһең. Яңғыҙ ҡалған ҡоштоң ҡарғышы төшмәһен өсөн парлы ҡоштарҙың икеһен дә атырға кәрәк, имеш.

Аҡҡоштоң изге ҡош булыуы 2005 йылда Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районында яҙып алынған мәғлүмәт дәлилләй: электр сымына эләгеп һәләк булған аҡҡошто ауылдың зыяратында ерләп ҡуялар. Дөйөм алғанда, башҡорттарҙа аҡҡошҡа таш бәреү, уларҙың ояһын туҙҙырыу, башҡа төрлө зыян килтереү тыйыла.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ

**Кеше тигәнең ҡыҙыҡ инде. Кемдер тормоштоң бөтә ығы-зығыһынан арып-талып, бөткән ауылды ҡабаттан тергеҙеп, тәбиғәт ҡосағында, халыҡтан алыҫта, яңғыҙы ғына йәшәргә хыяллана, ҡайһылары инде был теләген тормошҡа ашырған, өсөнсөләре ауылдағы тормоштан ялҡып, ҡалаға ынтыла. Минең бөгөнгө геройым да ҡәҙимге тормош ағышынан баш тартып, хатта уҡыуын туҡтатып, "баш һуҡҡан" яҡҡа сығып киткән. Руслан Алмаев сәйәхәтсе генә түгел, ә блогер, "Бәйләнештә" сайтында - "Өфө яңылыҡтары", "Сәйәхәттәр", "Типичный творческий" кеүек әллә күпме уңышлы пабликтарҙың авторы. Унең төркөмдәрен 200 меңдән ашыу кеше уҡый. Был унең өсөн мауығыу ғына түгел, ә аҡса эшләү сығанағы ла. Илгиҙәр Руслан менән интернетта "Бәйләнештә" социаль сайты аша әңгәмәләшергә насип булды. Ул яҙғандарҙы түкмәй-сәсмәй гәзит уҡыусыларына еткерергә тырыштым.**

# РУСЛАН АЛМАЕВ ...

## Ер шарын урап сыҡмаҡсы



**➔ Әлеге ваҡытта ҡайһы тарафтарҙа йөрөйһөң?**

- Бангкоктамын, гәзит сыҡҡанға ҡәҙәр, моғайын, Чиангмайҙа булырмын...

**➔ Үҙең менән ҡыҫҡаса таныштырып үт әле...**

- Мин Өфө ҡалаһында тыуғанмын. Минә ике-өс йәштәр тирәһендә Хәйбулла районының Иҫәнгилде ауылына күсеп килгәнбеҙ. Унда оҙаҡ тормай, Аҡъярға күстек һәм шунда мин башланғыс мәктәп белемен алғас, Өфө ҡалаһындағы Ҡасим Дәүләткилдеев исемендәге гимназия-интернатҡа уҡырға барҙым. Гимназияны тамамлағас, Өфө дәүләт нефть техник университетына уҡырға индем һәм 3-сө курсҡа еткәс, донъя гиҙергә сығып киттем. ВУЗ-да уҡыуҙан баш тартып, тормош һабаҡтары аша белем алырға тотондом. Тураһын әйткәндә, интернетта "уҡыйым". Инглиз телен ныҡлап өйрәнергә, камиллаштырырға ниәтләйем.

***"РУСЛАНСТАТИСТИКА"***
***1 йыл, 344 көн, 30-лап ил, 5 виза, 25 мең саҡрым автобустарҙа һәм поездарҙа, самолетта, 14 мең саҡрым "автостоп", 140-лап "попутка", 6 мең саҡрым мотоциклда, страховка - 0, авария - 6, ике тапҡыр дауаханаға барып күренеү, эшлектән сыҡҡан 7 техника, 13 юлдаш (иң әҙе бер аҙна бергәбеҙ, иң күбе - 1,5 ай), киң мәғлүмәт саралары менән 8 интервью, аҙаҡҡы тапҡыр өйгә ҡайтып китеүемә 232 көн, Таиландта 3 ай, Джунглиҙа 1 ай, был донъяға килеүемә 9033 көн - ни өсөн мин элегерәк башламаным?***

**➔ Үҙеңдең даими йәшәү урының юҡ шикелле, эйеме?**

- Шулай. Күп ваҡыт мин иртәгә ҡайҙа булырымды белмәйем. Минең тормошом үҙгәрештәрҙән тора. Унда "һәүетемсә"гә урын юҡ. Ҡайҙа күңелем тарта, шунда юлланам, ҡайҙа оҡшай, шунда булам, ялҡыһа, икенсе ергә ашҡынам.

**➔ Ил гиҙер өсөн аҡса ла кәрәктер бит, нисек аҡса эшләйһең?**

- Фотоға төшөрөү менән мауығам, хәҙер инде видеография менән дә ҡыҙыҡһына башланым. Ә былай фрилианс менән шөғөлләнәм, йәғни, "Бәйләнештә" сайтындағы үҙемдең төркөмдәрем аша реклама ярҙамында аҡса эшләйем, лекциялар уҡыйым. Минең тормош девизым: "Теләгән - әмәлен табыр, теләмәгән - сәбәбен табыр".

**➔ Тимәк, күп эштәреңде интернет селтәре аша атҡараһың? Күптәр интернетты насар нәмә тип иҫәпләй...**

- Мин ул фекер менән килешмәйем, сөнки интернет - ҡорал, уны ниндәй маҡсат менән ҡулланаһың, шундай уҡ һөҙөмтәгә ирешәсәкһең. Минең өсөн интернет - яҡшы нәмә. Унда ингән арала үҙем өсөн файҙалы сайттарҙа ултырырға, кәрәкле әйберҙәрҙе уҡырға тырышам. Бигерәк тә тыуған ерҙәрҙән алыҫта йөрөгәндә интернет иң яҡшы һәм арзан аралашау сараһы. Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, социаль сайттар, скайп аша атай-әсәйем, туғандарым менән һәр саҡ бәйләнештә була алам.

**➔ Социаль селтәрҙәге төркөмдәрҙе үҫтереү маҡсатында лекциялар уҡыйым тигәйнең, унда һине кемдәр саҡыра һәм кемдәр тыңлай?**

- Лекцияларымда "Бәйләнештә" сайтында сараларҙың, төркөмдәрҙең үҫешенә, таралыуына нисек булышлыҡ итергә кәрәклеге хаҡында һөйләйем. Ундай кисәләргә халыҡ бик күп йыйыла, ни тиһәң дә, "Бәйләнештә" сайты - Рәсәйҙәге иң популяр сайт. Мине ундай сараларға ҡала хакимиәте башлыҡтары, форумдар һәм конференциялар етәкселәре саҡыра.

**➔ Үҙеңдең ҡыҙыҡлы сәйәхәтең хаҡында һөйләп үт әле...**

- "Бум" сәйәхәтендә йөрөйөм, йәғни, бер ҡалаға килеп төшәм дә, шунда уҡ ҡайһы иҫтәлекле урындарҙы барып күрергә, ҡайҙа ҡунырға, ҡайҙа ашап алырға икәнлеген хәл итәм. Ҡаланы ҡарап сығам да, артабан ҡайҙа хәрәкәтләнеремде уйлайым. Шулай иткәндә, күңеллерәк. Алдан бер нәмәне лә планлаштырмайым. Бер үҙем генә түгел, күмәк компанияла сәйәхәт итергә яратам, шуға күрә, дуҫтарым, фекерҙәштәрем араһында ял итеү оҡшай. Рәсәй ҡалалары араһында 2012 йылда Мәскәү, Санкт-Петербург, Краснодар, Түбәнге Новгород, Тверь, Геленджик, Пятигорск, Ҡаҙан, Силәбе, Салехард, Великие Луки ҡалаларында, 2014 йылда Латвия, Литва, Австрия, Төркиә, Грузия, Әзербайжан, Македония, Сербия, Греция, Франция, Италия, Ватикан, Эстония, Дания, Швеция, Германия, Ҡытай, Вьетнам, Камбоджа, Лаос, Малайзия кеүек илдәрҙә булдым. Шул арала Балеар, Миртой, Мәрмәр, Ҡара диңгеҙҙәр буйында ял итергә насип булды.

**➔ Ҡайһы илдәр, ҡалалар нығыраҡ оҡшаны?**

- Амстердам (Нидерланды), Барселона (Испания), Будапешт (Венгрия), Истанбул (Төркиә) ҡалалары оҡшаны. Мәҫәлән, Барселонала яҡшы кешеләр күп, ҡала төҙөк, матур. Велосипедта йөрөргә яратҡанлыҡтан, бындағы тигеҙ юлдар минең өсөн бик уңайлы булды. Будапешт шулай уҡ бик матур ҡала: яртыһы тау, яртыһы тигеҙлектә урынлашҡан.

**➔ Ә ҡайһылары оҡшап етмәне?**

- Париж. Романтик ҡала иҫәпләнһә лә, миңә оҡшаманы. Туристар бигерәк күп, урамдары бысраҡ, халҡын әллә ни ҡунаҡсыл тип әйтеп булмай. Римда ремонт бара ине, шуға күрә, бөтә ерҙә емереклек, тәртипһеҙлек ярылып ята ине. Ғөмүмән, һәр ҡаланың да етешһеҙлектәре бар инде.

**➔ Сит яҡтарҙа бик оҙаҡ йөрөйһөң түгелме? Башҡортостан һағындырмаймы?**

- Әлеге ваҡытта Таиландта Пхукет ҡалаһындамын, тинем бит әле. Әйткәндәй, нисәмә айҙар дауамында ситтә йөрөп, тыуған яҡтарҙы, туған телде һағындыра. Яңыраҡ сит тарафтарҙа башҡорт сәйәхәтселәренең икенсе осрашыуы булды. Беренсеһе былтыр Мюнхенда июль айында булғайны. Быйыл бына Пхукет ҡалаһында осраштыҡ: Бөрйән ҡыҙы Алина, мин - Хәйбулланан бит инде, Пхукетта ике йыл йәшәүсе Сибай ҡыҙы Раушания һәм ай ярым элек Өфөнән ҡулына 10 мең һум аҡса тотоп, автостоп менән сығып киткән Баймаҡ егете Илнур. Рәхәтләнеп башҡортса һөйләшеп, хәтирәләр, тәьҫораттар менән уртаҡлашып, сыр-сыу килдек.

**➔ Хәйерле юл һиңә, Руслан!**

**Айгизә АСҠАРОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Ошо ауылда миңә тәү тапҡыр башҡорттарҙың ҡышҡы торлағын күрергә насип булды; йәй көндәрен улар малдарына яҡшыраҡ көтөүлөктәр табыр өсөн дала буйлап күсеп йөрөй һәм тирмәләрҙә йәшәй, ә көҙөн ҡышлауҙарында йыйыла.*



*ХАҠ ТАМЫРЫБЫҘ*

# СЕРҘӘР ҺАНДЫҒЫ УЛ – АРХИВ



**Халҡыбыҙ тарихын байытыу, тулыландырыу, асыҡлау эшендә музей, архив фондтары алыштырғыһыҙ сығанаҡ. Дәүләт ҡарамағындағылары, үҙәкләштерелгәндәре генә түгел, ә мәктәп, ауыл музейҙарында ла әле булһа иҫ киткес, тарихи яҡтан ҡиммәтле әйберҙәр осратырға мөмкин.**

Совет осоронда өйрәнелгән, фәнни әйләнешкә индерелгән тарихи сығанаҡтарҙың ҡайһы берҙәре бөгөн яңы күҙлектән баһалауҙы талап итә. Заманына ярашлы күп кенә документтар, мәҫәлән, милли мәсьәләләргә ҡағылғандары, әлбиттә, төшөрөп ҡалдырылған. Бындай осраҡта ғалимдарҙы ла тәнҡитләп булмай, ниндәй талап ҡуйылған, шуныһын үтәгәндәрҙер инде. Шул уҡ ваҡытта замана шауҡымына ҡарамай, эҙләнеүҙәрен еренә еткереп башҡарыусылар ҙа булған. Миҫалға башҡорттарҙың милли-азатлыҡ хәрәкәтен өйрәнгән абруйлы ғалим, тарих фәндәре докторы Билал Хәмит улы Юлдашбаевты килтерергә була. Ғилми хеҙмәт кенә яҙып туҡтамаған ул, бик күләмле документтар йыйынтығы ла әҙерләгән.

Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Ғилми архивында иҫәптә йөҙҙән ашыу фонд бар. Шуларҙың ун дүрте ғилми учреждениелар һәм ғилми институттарҙыҡы, ә 107-һе шәхси фондтар. 107 фондтың 27-һе Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир-ғалимдарҙыҡы. Был Ғилми архив 1956 йылда ойошторолған, тимәк, 2016 йылда уға 60 йыл туласаҡ.

Архив кәштәләрендәге документтар бер көндә тупланмаған, әлбиттә. Мәғлүмәттәр төрлө ысулдар менән йыйылған. 60-70-се йылдарҙа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Әхнәф Харисов хатта гәзит-журналдар аша халыҡҡа тарих буйынса мәғлүмәттәр хәбәр итеүҙе һорап мөрәжәғәт итә. Яуаптар килгәндән һуң фольклор экспедициялары ойошторола, бик күп мәғлүмәттәр алып ҡайтыла. Шуға күрә, иң бай фондтарҙың береһе Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтыныҡы, тиһәк яңылыш булмаҫ.

Бөрйән ере легенда-риүәйәттәренең ҡайһы берҙәре 1950 йылда Байназар балалар йорто уҡыусылары тарафынан әҙерләп тапшырылған альбомға теркәлгән. Балалар йорто тәрбиәләнеүселәрен пионервожатый М. Ә. Сөләймәнов йәйҙең матур көндәрендә Шүлгәнташ мәмерйәһен күрһәтергә алып барған. "Улар Шүлгән мәмерйәһе, Мәсем ташы, йәйләү урындарын күреп сыҡты. Был урындар балаларҙа тәрән тойғолар ҡалдырҙы. Улар тураһында телдән-телгә күсеп килгән халыҡ легендалары яҙып алынды", - тип яҙа уҡыусыларҙың етәксеһе М. Ә. Сөләймәнов. Документта был сәйәхәт тураһында бик ентекләп яҙылған. Альбомда 1916 йылда ғәрәп графикаһында яҙылған "Күсәкбей" легендаһы бар. Уны Сабирйән Мөхәмәтҡолов яҙып ҡалдырған. Ул ваҡытта уға ни бары 26 йәш кенә булған.

Шүлгәнташ мәмерйәһе тураһындағы мәғлүмәт айырым иғтибарға лайыҡ. Күп йылдар дауамында мәмерйәләге күлдең төбөндә ятҡан кәмә тураһында фаразлауҙар дауам итә. Был кәмәнең унда ҡасан, нисек хасил булыуын бер кем дә аныҡ ҡына итеп әйтә алманы бығаса. Был һорауға яуап Ғилми архивта һаҡланған булған икән. Быны нимә тиелә документта: "Бынан 62 йыл элек, 1888 йылда, Ырымбур ҡалаһынан губернатор үҙенең илле кешенән торған командаһы менән Таш өйҙө күрергә килә (ул ваҡытта Бөрйәндә халыҡ телендә мәмерйә "Ҙур таш өй" тип йөрөтөлгән). Был кешеләр араһында төрлө һөнәр эйәләре, хужалар, оҫталар була. Палаткалар ҡороп, Ағиҙел буйында ун көн яталар. 12 метрлыҡ баҫҡыс та улар тарафынан эшләнгән. Хәҙер ул серегән... Төптәге күлгә еткәс, улар кәмә мендерәләр һәм шуның менән ары сыҡмаҡсы булалар. Һыу эргәһенән бер нисә метр киткәс тә көслө ел сыҡҡан һәм кәмәне кире ярға килтергән. Улар бер нисә тапҡыр теге ярға сығырға маташып ҡарағандар, ләкин ел булыу сәбәпле сыға алмағандар. Һыуҙа шул кәмә ултыра, ул серегән", - тиелә документта. Был тарихты уҡыусыларға 1950 йылда Шәрәфулла Мөхәмәт улы Сафин һөйләгән. Ғәҙелгәрәй ауылында йәшәгән олатайға ул ваҡытта 88 йәш булған. 1888 йылда Ырымбур губернаторы вазифаһын генерал Николай Алексеевич Маслаковец үтәгән. Тимәк, ул йөрөгән инде мәмерйәлә һәм ошоғаса тиклем сер булып ҡалған кәмәһен ҡалдырып киткән...

Архивта шулай уҡ Биксурин Миндийәр тарафынан төҙөлгән алты һүҙлектең күсермәһе һаҡлана. Биксурин 1760 йылдарҙа Ырымбур губернаһы канцелярияһында төрки телдәр тәржемәсеһе булып эшләгән. 1780-1781 йылдарҙа Бохара ханлығына ебәрелгән Рәсәй илселегенең башлығы, ә 1819 йылда Хиуа ханлығында Рәсәй илселегендә тәржемәсе булып эшләй. Сит илдәр менән дипломатик эшмәкәрлек иткән шәхес төрлө телдәге һүҙлектәрҙе 18-се быуаттың икенсе яртыһында төҙөгән. Был һүҙлектәрҙең төп нөсхәһе Рәсәй Фәндәр академияһында һаҡлана. Һүҙлектәрҙең һәр береһендә өсәр-дүртәр йөҙ һүҙ. Иҫ китмәле уҡымышлы, зиһенле кеше булған. Югиһә, бер нисә тел белмәҫ ине. Һүҙҙәрҙе хиуа, бохара, ҡаҙаҡ, мишәр, ғәрәп, фарсы телдәренә тәржемәләгән. Бик оҫта итеп таблицаға тултырған, теге йәки был телдәге яңғырашын кириллицала теркәгән. Мәҫәлән, көмөш - ғәрәпсә фиҙҙат, фарсыса - сим, мишәрсә - кумуш, тип яҙа. Исем хиуаса - ад(т), бохараса - нам, ҡаҙаҡса - ат, мишәрсә - исим, тигән. Ғөмүмән, Миндийәр Биксуриндың биографияһы тураһында мәғлүмәт бик аҙ. Уның ҡайҙа, ниндәй ғаиләлә тыуып үҫеүе, ҡайҙа белем алыуы, яҡындары хаҡында мәғлүмәт әлегә табылмаған. Уның исемен билдәле шәхестәр рәтенә индерер өсөн бик ентекле эҙләнеү үткәреү талап ителә.

Ғилми архивта бығаса тиклем тикшеренеүсе тарафынан ҡаралмаған документтар араһында һис шикһеҙ иғтибарға лайыҡтары бар. Мәҫәлән, Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙе Ҡалмашбаш ауылы башҡорттарының ер биләү хоҡуғы тураһындағы жалованный грамоталарын раҫлауҙы һораған мөрәжәғәтнамәһе. 12 биттәге, рус телендәге текст һарғайып, уңып, юғалып бара. Шулай уҡ бер нисә тиҫтә биттән торған ғәрәп графикаһындағы уҡылмаған эш һаҡлана. Бында төрлө ауыл муллаларына указдар, иҡтисади һорауҙар, отчеттар, ҡайһы бер мәсеттәрҙең метрика китаптарының биттәре, хатта уҡылмаған, өйрәнелмәгән шәжәрә (!) лә бар.

Хаҡыбыҙҙың тарихы һәм ауыҙ-тел ижады документтарына йәш ғалимдар иғтибар итһә ине. Бер һүҙ менән әйткәндә, архив кәштәләрендәге документтар үҙ тикшеренеүсеһен көтә.

**Зилә НИҒМӘТЙӘНОВА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

## XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Башҡортто ҡалдырып, ҡәҙимге эштәребеҙ менән яланға сығып киттек. Һис тейелмәгән бай көтөүлектәр башҡа урындарҙы ҡарауға сарыф ителгән ваҡытыбыҙ өсөн үкенеү тойғоһон ҡуҙғытты; йәй үткәс, урманға ҡурай еләгенә барған кеүек булды инде. Шиңгән һәм иртәнге һыуыҡтан әлһерәгән үҫемлектәр араһында һарына һәм өйрәк үләнен (запья трава) танып була ине әле; башҡорттар уларҙың тамырҙарын, беҙ шалҡан бешереп ашаған кеүек, аҙыҡ сифатында ҡуллана: уларҙың оролары бар, һалма өсөн ҡулланылған ондоң бер төрө шунан яһала.

Йәнгужа йылғаһынан 10 саҡрым үткәс, Һалмыш йылғаһы аша сығып, иртәнгә Яманғол исемле башҡорт ауылына килеп еттек. Ошо ауылда миңә тәү тапҡыр башҡорттарҙың ҡышҡы торлағын күрергә насип булды; йәй көндәрен улар, ҡалмыҡтар кеүек, малдарына яҡшыраҡ көтөүлөктәр табыр өсөн дала буйлап күсеп йөрөй һәм тирмәләрҙә йәшәй, ә көҙөн ҡышлауҙарында йыйыла. Йорттары татарҙарҙыҡы һәм мариҙарҙыҡы кеүек төҙөлгән. Мейес урынына ярым цилиндр рәүешендәге камин яһайҙар, уның торбаһы эстән балсыҡ менән һыланған кәртәләрҙән хасил була. Бына ошо сыуал тип аталған камин уларға йылылыҡ бирә. Утын янып бөткәс, йылы оҙағыраҡ һаҡланһын өсөн, сыуал тишеген өй эсенән тиренән яһалған туп менән ҡаплап, ике таяҡ менән терәтеп ҡуялар. Ошо каминдан башҡа, уларҙың ҡаҙан ултыртылған бәләкәй усаҡтары бар. Бында һалма бешерәләр, ҡорот ҡайнаталар.

Беҙ ҡышлаған Табын ҡаласығы Нуғай юлы башҡорттарының Кесе Табын олоҫонда, Ағиҙел йылғаһының таулы уң яҡ ярында, уға Усолка йылғаһы ҡойған урында төҙөлгән. Өфө ҡалаһынан бында тиклем туҡһан саҡрымлап булыр, ә Ырымбурҙан ике йөҙ илленән самаһы. Ошо ҡаласыҡҡа башланғыс биргән тоҙло шишмәләр хәҙерге Табын йортонан 12 саҡрымда урынлашҡан. Балахон сауҙагәре Иван Утятников ошо урында тәү башлап тоҙ ҡайната башлаған, быны Соловарный ҡаласығы исемендә хәтерләйҙәр. Уның ысынлап та нығытмалары булып, әлеге Утятниковтың үҙенә һәм янындағы кешеләренә 1735 йылда баш күтәргән башҡорттарҙың һөжүменән һаҡланырға мөмкинлек биргән. Әммә был урын өҫтөнлөк итеүсе башҡорт көстәренә ҡаршы тороу өсөн бигүк ышаныслы булмағанлыҡтан, Утятников Табындан биш саҡрым алыҫлыҡта, тау итәгендә Вознесенск тип исемләнгән ҡаласыҡҡа нигеҙ һалған. Был урын ер валы һәм ҡойма менән нығытылған, һәм ошо нығытмала башҡорттарҙан ҡасып ултырған Утятников баш күтәреүҙе туҡтатыу өсөн мәкер ҡулланған. Ул Рәсәй Дворянын рөхсәт алдым, тип хәйләләп, башҡорттар менән солох килешеүҙәре төҙөүгә өлгәшә. Мәкерле солоҡҡа ҡул ҡуйылғас, ул яҡын-тирәләге иң күренекле башҡорттарҙы, шул иҫәптән төп ихтилалсы Килмәк Абызды ла ҙур мәжлескә саҡырып, эсереп, ҡайһыларын үлтереп, бәғзеләрен ҡул-аяҡтары бәйле килеш башҡорт комиссияһына оҙатҡан.

**(Дауамы бар).**

**✓ "Айыҡ ауыл" конкурсын да Ҡоролтай күтәреп алды. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа хатта закон ҡабул иттек, уға ярашлы, һәр ауыл үҙендә спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙы тыйырға хоҡуҡлы. Шуны бит күтәреп алырға кәрәк.**

**Бөтөн донъя башҡорттарының IV Ҡоролтайы үтәсәге тураһында Хөкүмәт ҡарары донъя күргәс, халыҡ аптырап ҡалды: бер ай эсендә генә оло ҡорға әҙерләнеп өлгөрөп буламы? Бөгөн Ҡоролтай Башҡарма комитеты ниндәй мәшәҡәттәр менән йәшәй һәм, ысынлап та, халыҡ борсолоуы раҫҡа сығып, сираттағы оло йыйын исем өсөн генә үтмәҫме? Ошо һорауҙарға яуап эҙләү маҡсатынан редакцияға Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил АҘНАБАЕВты һәм уның беренсе урынбаҫары Хәләф ИШМОРАТОВты әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

**Р. Аҙнабаев:** Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Уставы буйынса, һәр биш йыл һайын был йыйын үтергә тейеш. 2014 йылдың 21 февралендә уҙған Башҡарма комитет ултырышында 2015 йылда IV Ҡоролтай үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителеп, унда шундай юлдар яҙылғайны: "Хәҙерге шарттарҙа башҡорт халҡының үҫеш тактикаһын һәм стратегияһын әҙерләү маҡсатында сираттағы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын 2015 йылда уҙғарырға". Хөкүмәт ҡарары шуның һөҙөмтәһе булып тора ла инде. Бында тағы бер мәлде әйтеп китеү мөһим: 2013 йылдан алып Башҡарма комитеттың ултырыштарында, советтарҙа, түңәрәк ҡорҙарҙа, конференцияларҙа оло йыйында ҡарала торған мәсьәләләрҙе күтәреп сыҡтыҡ, яйлап ҡына әҙерлек эштәрен башланыҡ. Мәҫәлән, йәштәргә илһөйәрлек тәрбиәһе биреү буйынса 2013 йылдан бирле ҙур эш алып барабыҙ. Стәрлетамаҡта, Сибай, Бөрө, Өфө ҡалаларында конференциялар үткәрҙек. Улар ҙур сараға әҙерләнеүҙең бер йүнәлеше булды. Бынан тыш, мәғариф, мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу проблемаларына арналған конференция уҙғарҙыҡ, күп етешһеҙлектәрҙе асып һалдыҡ. Был сараны ойоштороу, үткәреү алдынан бөтөн районҙарҙы ла тиерлек йөрөп сыҡтыҡ. Сөнки туған телдә уҡытыу ҙа халыҡтан, үҙебеҙҙән тора. Мәктәптәрҙә балаларҙы башланғыс синыфтан русса уҡытыуға күсереп, уларҙың фекерләүен, донъяны ҡабул итеүен боҙабыҙ. Әсә теленең матурлығын, аһәңен, моңон тоймаған балалар үҫтерәбеҙ. Бына ошоға юл ҡуймаҫҡа тырышып көрәшәбеҙ ҙә инде. Шулай уҡ "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы закон буйынса фекер алышыуҙа әүҙем ҡатнашып, тәҡдимдәребеҙҙе индертеүгә өлгәштек. Рәсәйҙең 2025 йылға тиклемге Милли стратегияһын ҡабул иткәндә лә үҙ һүҙебеҙҙе әйттек.

Ер мәсьәләһе буйынса ла районҙарҙа йөрөп, фермерҙарҙың, СПК-ларҙың эше менән таныштыҡ, етешһеҙлектәрҙе асыҡланыҡ һәм бөтөн республика районлары, ауыл хужалығы министрлығы, фәнни институттар, белгестәр ҡатнашлығында Башҡарма комитеттың киңәйтелгән ултырышын үткәрҙек. Әлбиттә, унда ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың 100 проценты тормошҡа ашты тимәйем. Ер мәсьәләһе буйынса бөтөн илдә барған етешһеҙлектәр беҙҙә лә бар, әммә хәҙер халыҡ нисек эшләргә икәнлеген аңлай башланы.

**Х. Ишморатов:** Ниндәй генә йәмәғәт ойошмаһын алһаң да, уның абруйы эшмәкәрлеген халыҡты борсоған проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтеүенән тора. Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең Хушлашыу хатында өс йүнәлешкә: ер, тел, дин мәсьәләһенә иғтибар итергә, тип васыят ҡалдырған. Ошо өс йүнәлештә эҙмә-эҙлекле эш алып барһаҡ, милләтебеҙ йәшәйәсәк. Мин бында тағы йәштәр менән эшләүҙе лә индерер инем. Эйе, Ҡоролтай проблемалар күтәрә, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләй, әммә мәсьәлә күтәрелде лә хәл ителде, тип әйтеп булмай, киләсәктә лә уларға ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайтырға тура киләсәк әле. Сөнки тормош бер урында тормай, ваҡиғалар йылдам үҙгәрә, яңы закондар ҡабул ителә. Ошо ваҡытта халҡыбыҙ аптыранып, аҙашып йөрөмәһен өсөн ниндәйҙер йүнәлеш биреүҙе үҙебеҙҙең маҡсатыбыҙ тип һанайбыҙ һәм киләсәктә лә ошо төп йүнәлештәр буйынса эҙмә-эҙлекле эш алып барһаҡ ҡына милләтебеҙҙең киләсәге яҡты буласаҡ. Ҡайһы берҙә халҡыбыҙ, мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу кәмей, ерҙәребеҙҙе ситтәр алып бөтә, ағас баҫа, тип артыҡ меҫкенләнеп тә китә. Ә бит барыһы ла үҙебеҙҙән тора. Әгәр кемдер килеп нимәлер эшләп бирер тип көтөп ултырһаҡ, бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк. Ҡоролтай Башҡарма комитетының был проблемаларҙы хәл итерлек аҡсаһы ла, башҡа ресурстары ла юҡ. Әммә берҙәм булһаҡ - төп көс берҙәмлектә, ошо проблемаларҙы еңеп сығасаҡбыҙ. Ни өсөн тигәндә, Ҡоролтай активистары араһында муниципаль, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай, РФ Дәүләт Думаһы депутаттары ла, РФ Федераль Йыйылышының Федерация ағзалары ла бар. Беҙгә меҫкенләнергә түгел, киреһенсә, бер төптән булып, закондарға нигеҙләнеп, бергәләшеп проблемаларҙы хәл итергә, йоҡлап ятмаҫҡа, ә эшләргә, эшләргә, эшләргә кәрәк.

**Башҡарма комитетында күтәрелгән мәсьәләләрҙе халыҡҡа еткерергә бурыслылыр...**

**Р. Аҙнабаев:** Ҡоролтай эшләмәй, тип әйтеү ул ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Беҙ йәмәғәт ойошмаһы һәм берәү ҙә ғариза яҙып инмәй, ағзалыҡ юҡ, ул элекке йыйын принцибына ҡоролған: бөтөн халыҡ унда үҙенең вәкиле аша фекерен белдерә, ҡатнаша ала, йыйын ҡабул иткән ҡарар бөтөн халыҡҡа ҡағыла. Шуға күрә, ҡоролтай эшләмәй, тигән һүҙ - роп, уның эшен киң йәйелдереп ебәреү - ул Ҡоролтай эше түгелме ни? Был ойошма бөгөн халыҡтың рухын күтәреү, йолаларыбыҙҙы, боронғо шөғөлдәребеҙҙе тергеҙеү, ауылдарыбыҙҙағы йәшәйеште һаҡлау, айыҡлыҡҡа ҡайтыу, йәштәребеҙгә өлкән быуындың матур өлгөһөн күрһәтеү өсөн кәрәк.

**Х. Ишморатов:** Икенсенән, өҫтән күрһәтмә менән ниндәйҙер яһалма ойошма булдырһаҡ, партия, комсомол тарихынан беләбеҙ - ул юҡҡа сыға. Ул һәр кем үҙенә-үҙе, мин эшләмәйем, тигәнгә бәрәбәр. Ҡоролтайҙа әйтелгән һүҙҙәр, ҡарарҙар һәр бер башҡортҡа барып етергә тейеш. Ә халыҡ һаман да Ҡоролтай үҙе Өфөнән килер, тип көтөп ята. Уйлап ҡараһаң, бер нисә йыл инде федераль законға нигеҙләнеп, Территориаль йәмғиәт үҙидаралығы (ТОС) тураһында һөйләйбеҙ, өйрәтәбеҙ, кешеләрҙе ойоштораБыҙ. Әммә һәр бер ергә барып, ҡуҙғатып йөрөй алмайбыҙ бит. "Айыҡ Башҡортостан" йәмәғәт ойошмаһы егеттәре башлап ебәргән "Айыҡ ауыл" конкурсын да Ҡоролтай күтәреп алды. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа хатта закон ҡабул иттек, уға ярашлы, һәр ауыл үҙендә спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙы тыйырға хоҡуҡлы. Шуны бит күтәреп алырға кәрәк. Әммә, үкенескә күрә, Хөкүмәт аҡса бүлмәүе арҡаһында, 2014 йылғы конкурсыбыҙға йомғаҡ яһай алманыҡ. Әммә бынан ғына халҡыбыҙҙың айыҡлыҡ-

Шуға ла, ҡайҙа инициативалы халыҡ бар - беҙ шуларҙы хупларға, ярҙам итергә һәм артабан йүнәлеш бирергә тейешбеҙ. Шулай уҡ Ҡоролтай эргәһендә милләтебеҙҙең үҫешенә ярҙам иткән барлыҡ ойошмаларҙы тупларға, улар менән берлектә эшләргә тырышабыҙ. Ыңғай йүнәлештә эшләгән ойошмаларҙың тәжрибәһен башҡаларға таратырға әҙербеҙ. Бөгөнгө баҙар шарттарында, бәлки, альтруист булып күренәбеҙҙер, әммә кемдер ошо йүнәлештә эшләргә тейеш. Әлбиттә, бөтөн проблемаларҙы һәм уңышһыҙлыҡтарҙы Ҡоролтайға ғына япһарыу дөрөҫ булмаҫ. Рәсәй Президенты В. Путиндың дәүләт һәм йәмғиәт ойошмалары ҡулға-ҡул тотоношоп, бергә эшләгәндә генә ысын граждандар йәмғиәте төҙөргә мөмкин, тигән һүҙҙәренән сығып ҡарағанда, ҡоролтайҙың дәүләт органдары, йәмғиәт ойошмалары менән эҙмә-эҙлекле, ҡулға-ҡул тотоношоп, бер-

# ҠОРОЛТАЙ

## һинән, минән,



**▸ Халҡыбыҙҙың менталитеты шундай, уға кемдер килеп, нимә эшләргә икәнлеген төртөп күрһәтергә тейеш. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы эшләмәй, тип күпме генә ҡысҡырһаҡ та, Ҡоролтай - ул бит минән, һинән, беҙҙән, һеҙҙән тора. Уның район-ҡалаларҙа урындағы бүлексәләре бар. Шуға күрә һәр башҡорт мөмкинлегенән һәм хәленән килгәнсә ярҙам итергә, ә урындағы ҡоролтай етәкселәре үҙ территорияһында актив тупларға, Ҡоролтай**

ҡа ынтылышы һүнеп ҡалырға тейеш түгел, шуға ла беҙ районларға, конкурс туҡтап ҡалмаһын, быйылға район-ара итеп үткәрегеҙ, тип мөрәжәғәт иттек. Бына шундай бәләкәй эштәрҙән тора Ҡоролтайҙың ҙур эше. Юҡһа, Ҡоролтай эше ниндәйҙер ҙур эш башҡарғанда ғына күренә, тип уйлайбыҙ. Барыһы ла бәләкәй эштәрҙән, халыҡ инициативаһынан башлана. Йәки бына республика районларында, ауылдарында Ағинәйҙәр ҡорҙарын ойоштолектәге эшмәкәрлеге генә уңышлы барасаҡ. Беҙ ошоно күҙ уңында тотабыҙ ҙа инде. Сөнки, әгәр ҙә ата-әсәһе өйөндә башҡортса һөйләшмәһә, балалар баҡсаһында башҡорт төркөмө булһын, мәктәптә балалар башҡортса уҡыһын, тип, ата-әсәләр үҙҙәре йүгереп йөрөмәһә, Ҡоролтай Өфөнән тороп ҡына был мәсьәләне хәл итеп сыға алмаясаҡ.

*Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең Хушлашыу хатында өс йүнәлешкә: ер, тел, дин мәсьәләһенә иғтибар итергә, тип васыят ҡалдырған. Ошо өс йүнәлештә эҙмә-эҙлекле эш алып барһаҡ, милләтебеҙ йәшәйәсәк. Мин бында тағы йәштәр менән эшләүҙе лә индерер инем. Эйе, Ҡоролтай проблемалар күтәрә, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләй, әммә мәсьәлә күтәрелде лә хәл ителде, тип әйтеп булмай, киләсәктә лә уларға ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайтырға тура киләсәк әле. Сөнки тормош бер урында тормай, ваҡиғалар йылдам үҙгәрә, яңы закондар ҡабул ителә. Ошо ваҡытта халҡыбыҙ аптыранып, аҙашып йөрөмәһен өсөн ниндәйҙер йүнәлеш биреүҙе үҙебеҙҙең маҡсатыбыҙ тип һанайбыҙ һәм киләсәктә лә ошо төп йүнәлештәр буйынса эҙмә-эҙлекле эш алып барһаҡ ҡына милләтебеҙҙең киләсәге яҡты буласаҡ.*

**▸ Йәштәр менән эшләүгә иғтибар бүлеү тураһында әйтә биреп ҡуйҙығыҙ. Мәғлүм булыуынса, Ҡоролтай ҡарамағында Йәштәр советы бар. Ул III Ҡоролтай алдынан ойошторолоп, 2010 йылда беренсе Башҡорт йәштәре ҡоролтайы үтте. Йәштәрҙең баш бирмәҫлеге, буйһонмауссанлығы, саялығы, ҡыйыулығы менән ололарҙың тәжрибәһен һәм аҡылын бер маҡсатҡа йүнәлтеү буйынса ниндәй эш алып барыла?**

**Х. Ишморатов:** Ҡоролтайҙа яйлап конструктив фекер йөрөткән егеттәрҙе туплайбыҙ. Улар быйыл Асҡын районына барып, Һөйәнтүҙ фажиғәһе булған урында ҙур сара үткәрҙе. Силәбе, Ырымбур өлкәһендә үҙҙәренең тиҫтерҙәре менән осрашыуҙар ойоштороп, унда үҙҙәренең ойошмаһының структураһын булдырҙылар. Ҡырмыҫҡалы районында йәштәр һабантуйы уҙғарҙылар. Был аҙнала Башҡорт дәүләт аграр университеты базаһында йәштәр проблемалары буйынса ҙур төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференция үтте. Унда пленар өлөштән һуң йәштәрҙе борсоған мәсьәләләр буйынса алты секция

**✓ IV Ҡоролтайҙа эшлекле һөйләшеү беренсе урынға сығасаҡ. Төп тема булып башҡорт телен үҫтереү, милли мәғариф, ер менән файҙаланыу һәм башҡорт халҡының рухи мәҙәниәте мәсьәләләре торасаҡ.**

# УЛ... беҙҙән башлана




эшләне. Уларҙа ҡабул ителгән ҡарарҙар IV Ҡоролтайҙың резолюцияһын ҡабул иткәндә күҙ уңында тотоласаҡ. Йәштәрҙә динамика шул тиклем көслө, бөгөнгө йәш кеше иртәгә был категориянан сыға, арттарынан икенселәр үҫеп килә. Беҙ йәштәргә нисек эшләргә, нисек дәүләт органдары менән берлектә эш итергә өйрәтәбеҙ. Сөнки үҙебеҙгә алмаш әҙерләмәһәк, бөгөнгө эшмәкәрлегебеҙҙең баһаһы һуҡыр бер тингә тиң. Шуның өсөн дә ҡайһы ғына өлкәлә булмаһын, инициатив йәштәр осраһа, шунда уҡ үҙебеҙгә билдәләп ҡуябыҙ, киләсәктә улар менән бергә эшләүҙе күҙ уңында тотабыҙ. Бөгөн йәштәр араһында алдынғы фекерле, алдан күреп эшләй белгән шәхестәр бар, беҙгә уларҙы: фермер булһынмы ул, уҡытыусымы, ғалиммы, спортсымы йәки ябай кешеме - күрә белергә кәрәк. Ҡоролтайҙың ишеге ниндәйҙер инициатива менән килгән йәштәрҙең барыһына ла асыҡ.

Әлеге йәштәр командаһы бик көслө һәм киләсәктә лә матур эштәр эшләрҙәр, тип уйлайым. Шуға урындарҙа делегаттар һайлау буйынса ҡоролтайҙар үткәргәндә уларҙың 30 проценты 35 йәшкә тиклемге йәштәр булырға тейешлегенә баҫым яһайбыҙ, сөнки IV Ҡоролтай ваҡытында йәштәр проблемаларына арналған айырым секция буласаҡ.

**▸ Тәүге ҡоролтайҙар шундай юғары күтәренкелек менән үтте, халыҡ өсөн ысын мәғәнәһендә рух байрамына әйерелде, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙән, сит илдәрҙән килгән милләттәштәребеҙ артабан да башҡорт булып йәшәү өсөн рух көсө алып ҡайта ине. Хәҙерге иҡтисади көрсөк ваҡытында күрше өлкәләрҙән, сит илдәрҙән делегаттар саҡырыу мөмкинлеге бармы?**

**Р. Аҙнабаев:** Әлбиттә, тәүге ҡоролтайҙар халыҡтың рухын күтәреү өсөн шулай сағыу, матур үтергә, башҡорттарҙың барлығын, берлеген һәм ойошоуын бөтөн донъяға танытырға тейеш ине. IV Ҡоролтайҙа эшлекле һөйләшеү беренсе урынға сығасаҡ. Төп тема булып башҡорт телен үҫтереү, милли мәғариф, ер менән файҙаланыу һәм башҡорт халҡының рухи мәҙәниәте мәсьәләләре торасаҡ. Шулай уҡ Ҡоролтайға төбәктәрҙән, сит илдәрҙән делегаттар киләсәк. Төрлө проблемалар буйынса һүҙ барасаҡ. Эшлекле һөйләшеү булһын өсөн алдан конференциялар уҙғарабыҙ. Уларҙа ҡабул ителгән резолюциялар секция ултырышында ҡаралып, фекерҙәр тыңланып, тағы ла өҫтәмәләр, тәҡдимдәр индереләсәк.

**Х. Ишморатов:** Бөгөн заман талабы икенсерәк, глобалләшеү шарттарында, телдәр юғала башлаған ваҡытта беҙгә милләтте нисек һаҡлап алып ҡалырға, нисек баҙар шарттарына күнегергә - һөйләшеү дөйөм алғанда ошо йүнәлештә булырға тейеш. Йәмғеһе 443 делегат буласаҡ. Шулай уҡ арҙаҡлы, ҙур ҡаҙаныштары булған аҫыл шәхестәрҙе почетлы ҡунаҡ итеп саҡырырға йыйынабыҙ. Был Ҡоролтайҙа халҡыбыҙҙың иң лайыҡлы ҡыҙ-улдары ҡатнашыр, тип уйлайбыҙ. Беренсе Ҡоролтайҙан алып делегат ҡына булып йөрөүселәр ҙә бар, әммә үҫеп килгән йәштәргә лә юл бирергә кәрәк. Әгәр ошо йүнәлештә эшләмәһәк, киләсәгебеҙ булмаясаҡ. Ҡоролтайҙа ла күсәгилешлек булырға тейеш.

Бынан тыш, Ҡоролтай алдынан Һамар һәм Һарытау башҡорттары көндәре үтәсәк. 20 ноябрҙә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында уларҙың көсө менән ҙур концерт ойоштороласаҡ. Ойошманың Уставына үҙгәрештәр индереүҙе лә күҙ уңында тотабыҙ һәм ҡасандыр милли хәрәкәттә әүҙем ҡатнашып йөрөгән ағай-апайҙарыбыҙҙы, заманында суверенитет яулағанда ҙур өлөш индергән кешеләребеҙҙе Ҡоролтай Башҡарма комитеты ҡарамағында ойоштороласаҡ Ололар ҡоронда туплап, улар үҙҙәренең кәңәштәре менән киләсәктә Ҡоролтай эшмәкәрлегенә ярҙам итһендәр, үҙҙәренең багажында булған уй-фекерҙәре, тәжрибәләре менән бүлешһендәр, тигән ниәттәбеҙ.

**▸ Ҡоролтайҙың эшмәкәрлегендә Әхмәтзәки Вәлиди яҙған "өс тағанға" таянып эшләүегеҙ тураһында әйтеп киттегеҙ, тимәк, башҡорт халҡы уның васыятын үтәй, уның күрһәткән юлынан бара, уны үҙенә стратегик юл итеп алған. Ә бына ни өсөн һаман да Өфөлә Әхмәтзәки Вәлидигә һәйкәл юҡ? Был мәсьәлә лә Ҡоролтай өсөн әһәмиәтле проблемаларҙың береһе түгелме?**

**Р. Аҙнабаев:** Хөкүмәттең Ә.-З. Вәлидигә һәйкәл тураһында ҡабул иткән ҡарары бар. Ғәмәлдә, был документ яҙылған хаттар нигеҙендә, Ҡоролтайҙың, башҡорт халҡының талабы буйынса 2010 йылдың 10 мартында, бөйөк шәхесебеҙҙең тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы ҡабул ителде. Беҙгә бары был мәсьәләне даими күҙ уңында тоторға һәм уның үтәлешенә өлгәшергә генә кәрәк. Әлегә бары тик вәғәҙәләр менән генә һыйлайҙар.

**Х. Ишморатов**: Был мәсьәләне ҡабат-ҡабат күтәреп сығабыҙ. Шул уҡ ваҡытта Шәйехзада Бабичҡа Өфөлә бюст ҡуйыу буйынса 2014 йылда ҡарар сығарылды. Былтыр Муллаян Халиҡовтың тыуыуына 120 йыл тулыу уңайынан исемен мәңгеләштереү буйынса һүҙ күтәргәйнек, Хөкүмәттәге махсус комиссия Өфөлә һәм Нефтекамала яңы төҙөлгән урамдарҙың береһенә уның исемен бирергә тигән ҡарар ҡабул итте.

**Р. Аҙнабаев:** Күренекле кешеләрҙең исемен мәңгеләштереү эше Ҡоролтайҙа күптән бара. Исмәғил Тасимовты ғына алғанда ла, уның исемен күтәреп сығып, түңәрәк өҫтәлдәр үткәреп, эҙмә-эҙлекле эш алып барҙыҡ, Санкт-Петербургтағы Тау институтының стенаһына таҡтаташ ҡуйҙыҡ, конференция үткәрҙек. Хатта уҡыу йортоноң ректоры, был институт Исмәғил Тасимовтың тәҡдиме менән асылған һәм уның аҡсаһына тотолған, тип әйтергә мәжбүр булды. Был да беҙҙең өсөн бик ҡыуаныслы. Был эшмәкәрлектән беҙ бер ҡасан да ситләшмәйбеҙ һәм ҡасан да булһа Зәки Вәлидигә лә мотлаҡ һәйкәл ҡуйыласаҡ.

**▸ Хәҡиҡәт бәхәстә тыуа, тигән кеүек, хәҡиҡәт сағыштырыуҙа ла күренә. Ни өсөн Татарстанда Татар конгресына иғтибар ҙур, уларҙың абруйы бар, ә беҙҙә республикаға исем биргән халыҡтың иң юғары ижтимағи йәмәғәт ойошмаһына икенсерәк мөнәсәбәт күҙәтелә һымаҡ...**

**Х. Ишморатов:** Заманында Татарстан менән беҙҙең бюджет икеһе бер кимәлдә ине, һуңғы йылдарҙа улар алға ғәйәт ҙур аҙымдар эшләне. Иң ҙур ҡаҙаныштары - хосусилаштырыу ваҡытында "Татнефтте" республиканың милке итеп һаҡлап алып ҡалдылар һәм предприятиеның табышын үҙҙәренең рухи ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү буйынса бик матур ҡуллана белделәр. Был йүнәлештә, әлбиттә, татар ҡәрҙәштәргә көнләшеп ҡарайбыҙ.

**Р. Аҙнабаев:** Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, 5 йыл элек улар һәр ваҡыт беҙгә көнләшеп ҡаранылар. Бөтөн милли мәсьәләләр буйынса беҙ алда барҙыҡ, улар беҙҙән үрнәк алды, беҙҙең тәжрибәне өйрәнергә килде. Тимәк, беҙҙең дә яуланған күп ҡаҙаныштарыбыҙ бар, шуға күрә, төшөнкөлөккә бирелергә ярамай. Беҙ ҙә башҡаларҙа ниндәй ыңғай күренештәр, матур өлгөләр бар, үҙебеҙҙә файҙаланырға тырышабыҙ. Тормош шулай бит - бөгөн уларҙың сәнәғәте алға китте, хосусилаштырыуҙы уңышлыраҡ үткәрҙеләр, беҙ икенсе мәсьәләләр буйынса алдараҡ. Шуға киләсәккә өмөттәр ҙур.

**Х. Ишморатов:** Беҙгә, ысынлап та, һәр халыҡтың ыңғай сифаттарын күреп, уларҙы үҙебеҙҙә үҫтереү өҫтөндә эшләргә кәрәк. Бигерәк тә йәштәргә. Әлбиттә, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына ла дәүләт тарафынан Татарстан Республикаһында Татар конгресына булған кеүек иғтибар булһа, күп проблемаларҙы хәл итә алыр инек. Мәҫәлән, уларҙа ситтә йәшәгән татарҙарҙың рухи ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү буйынса дәүләт кимәлендә комиссия төҙөгәндәр, уға Дәүләт советы Рәйесе Фәрит Мөхәмәтшин үҙе етәкселек итә һәм был программаны тормошҡа ашырыуға 100 миллиондан ашыу аҡса бүленгән. Беҙҙә лә дәүләт органдары яғынан шундай иғтибар булһа, әлбиттә, уңыштар тағы ла артасаҡ.

**▸ Бөгөн йәмәғәт эшмәкәрҙәренә лә эшләү еңелдән түгел - бер яҡтан, Хөкүмәт баҫа, икенсе яҡтан, халыҡ ҡәнәғәтһеҙлек белдереп, ҡамсыһын һелтәп кенә тора. Әлеге ваҡытта Ҡоролтай етәкселеге һандал менән сүкеш араһында, тигән кеүек...**

**Р. Аҙнабаев:** Дөрөҫөн әйткәндә, ике яҡтан да баҫым бар. Һәм бында дөрөҫ йүнәлеш алып, дөрөҫ сәйәсәт алып барыу - бик ҡатмарлы мәсьәләләрҙең береһе. Шулай ҙа, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы депутаты булараҡ та, Ҡоролтай Башҡарма комитеты етәксеһе булараҡ та, иң беренсе урынға башҡорт халҡының мәнфәғәтен ҡуябыҙ. Депутат булараҡ, республика мәнфәғәтен дә күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Шунан сығып эш итәбеҙ. Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа халыҡ мәнфәғәтенә ҡаршы килгән закондарҙы, ҡарарҙарҙы үҙгәртеү буйынса тәҡдимдәр менән сығыш яһайбыҙ. Ҡоролтай ултырыштары ла тыныс ҡына үтмәй, ниндәй ҙә булһа бәхәс тыуып тора. Бер ҡатлам шул тиклем кемделер тәнҡитләргә ярата, ә үҙҙәренә ниндәйҙер эш ҡушһаң, эшләмәйҙәр. Йәғни, ул кешеләр үҙҙәренең нимә эшләргә тейешлеген белмәй, әммә кешенең нимә эшләргә тейешлеген яҡшы белә.

**Х. Ишморатов:** Ундай милләттәштәргә, әлбиттә, эш менән булырға, күберәк халыҡ араһында йөрөргә, осрашыуҙарҙа ҡатнашырға, дөйөм эшкә үҙ өлөшөн индерергә кәңәш итәбеҙ итеүгә. Халыҡ араһында йөрөп, уның нисек йәшәгәнен, нимә уйлағанын йөрәгең аша үткәрһәң генә халыҡ һине аңлай. Әгәр инде тел аша ғына үткәрһәң - көлөп кенә ҡарай...




***Ҡоролтайҙа әйтелгән һүҙҙәр, ҡарарҙар һәр бер башҡортҡа барып етергә тейеш. Ә халыҡ һаман да Ҡоролтай үҙе Өфөнән килер, тип көтөп ята. Уйлап ҡараһаң, бер нисә йыл инде федераль законға нигеҙләнеп, Территориаль йәмғиәт үҙидаралығы (ТОС) тураһында һөйләйбеҙ, өйрәтәбеҙ, кешеләрҙе ойошторабыҙ. Әммә һәр бер ергә барып, ҡуҙғатып йөрөй алмайбыҙ бит. "Айыҡ Башҡортостан" йәмәғәт ойошмаһы егеттәре башлап ебәргән "Айыҡ ауыл" конкурсын да Ҡоролтай күтәреп алды. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа хатта закон ҡабул иттек, уға ярашлы, һәр ауыл үҙендә спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙы тыйырға хоҡуҡлы. Шуны бит күтәреп алырға кәрәк. Әммә, үкенескә күрә, Хөкүмәт аҡса бүлмәүе арҡаһында, 2014 йылғы конкурсыбыҙға йомғаҡ яһай алманыҡ.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетын эшләмәүҙә ғәйепләүсе йәки эшлекле тәҡдимдәре булып та, делегат булып үтә алмаған барлыҡ теләүселәрҙе 20 ноябрҙә Рәсәй Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты менән берлектә Киров урамы, 15 адресы буйынса уҙғарыласаҡ Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияға саҡырабыҙ. Сара сәғәт 2-лә башлана. Кемдең әйтер һүҙе бар - рәхим итегеҙ! Бынан тыш, Ҡоролтайҙың сайты эшләй. Уның аша ла әйтер һүҙегеҙҙе, тәҡдимдәрегеҙҙе еткерә алаһығыҙ. Уларҙың эшлеклеләре резолюцияла сағылыш табасаҡ. Тағы ла, кем мине тыңлаһын, тип, өндәшмәй ултырып ҡалыуҙы хуп күрмәксеһегеҙме? Ә бит Ҡоролтай эше һинән, минән, беҙҙән башлана...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

**✔ Властар һәр саҡ таланттарҙы үҙенә буйһондорорға тырыша. Батша заманында ла, большевиктар заманында ла әҙәбиәтселәрҙе Себергә һөргөнгә оҙатҡандар, атҡандар, репрессиялағандар.**



ХӘТЕРКИТАП



# АРҠА ТЕРӘРЛЕК АҒАЙҘАР БАР ИНЕ...

**Аҫылғужа Ишем улы Баһумановты Өфөгә барғанымда бер тапҡыр ғына күрергә насип булды. Алсаҡ йөҙлө, ихлас күңелле, йор һүҙле, бар булмышынан ниндәйҙер яҡты нур урғылып торған кеше менән аралашыу, ниңәлер, мәңгеллеккә хәтеремдә уйылып ҡалды.**

Ул саҡта Аҫылғужа ағай "Китап" нәшриәтендә эшләй инде. Икенсе шиғри йыйынтығым туғыҙ йыл буйына нәшриәттә сират көтөп ятты. Уның сығырына инде өмөтөмдө өҙгәйнем. Көтмәгәндә Өфөнән Аҫылғужа ағайҙан ҡыуанслы хат килеп төштө. "Шиғри йыйынтыҡтар китабы әҙерләйем, һинең шиғырҙарың ихлас, ысын күңелдән яҙылған, Алла бирһә , уларҙы ошо китапҡа индерергә тырышырмын..." - тип вәғәҙәләгәйне ул.

Ярты йыл самаһы үткәс, паспорт мәғлүмәттәрен килтерергә Өфөгә саҡыртты. Шулай ҙа, аңлауым буйынса, ошо китапты сығарыуға ҙур ҡаршылыҡтар бар ине. Инде өмөттәре өҙөлгән әҙиптәрҙе, йәш шағирҙарҙы ихлас күңелдән йыуатты Аҫылғужа Ишем улы. Һәр бер изге башланғыстың аҙағы яҡшы тамамланасағына ышандырҙы. Ошо ҡыҫҡа ғына дәүер эсендә уның менән хаттар алышырға ла өлгөрҙөм. Аҫылғужа ағайҙың сабырлыҡҡа, изгелеккә, дөрөҫ юлға өндәгән йылы хаттары әле һаман да минең архивымда һаҡлана.

Эйе, ҡыйын саҡтарҙа арҡа терәрлек, ел-дауылдан ышыҡ булырлыҡ, ышаныслы ағайҙар бар ине ул заманда. Әйткән һүҙендә тора белде ил ағаһы Аҫылғужа ағай. Ун ете авторҙың шиғри йыйынтыҡтарын туплаған "Балҡыштар" исемле китап 2004 йылда донъя күрҙе. Шул саҡтарҙа рәхмәт йөҙөнән Аҫылғужа ағайға арнап, "Умартасы" исемле шиғыр яҙғайным.

Ысынлап та, башҡорт әҙәбиәтенең егәрле, йомарт күңелле бер умартасыһы булды Аҫылғужа ағай. Үҙенең күңел кәрәҙҙәрендәге йылылыҡты, сабырлыҡты, изгелекте сығҡаларға һис йәлләмәй, ихлас өләште ул. Уның рухы, һис шикһеҙ, беҙҙең күңелдәрҙә мәңгелеккә һаҡланасаҡ .

## Умартасы

*Аҫылғужа Баһумановтың яҡты иҫтәлегенә*

*Кәрәк ине яраларҙы*
*Дауалайһы, уңалтаһы.*
*Йөрәккенәм шундай һыҙлай,*
*Нишләргә һуң, ҡалайтаһы?*
*Кәрәк ине шифалы бал,*
*Кәрәк ине умартасы.*
*Иң шифалы булды, ағай,*
*Һинең күңел умартаһы .*
*Һиңә килдем. Кәрәк ине*
*Йөрәгемде йыуатаһы.*
*"Хәлдәремде аңла, - тинем, -*
*Аҫылғужа, ил ағаһы".*
*"Хәлдәрең бик мөшкөл, - тинең, -*
*Тормошоңдоң күп ҡараһы.*
*Намыҫыңды һаҡлар кәрәк,*
*Намыҫ бит ул - күҙ алмаһы.*
*Шағирлыҡ ул - тәбиғәттән,*
*Кеше булыу тәүҙә мотлаҡ.*
*Ҡайғыларың, шатлыҡтарың*
*Беҙҙең менән булһын уртаҡ".*
*Бына ниндәй шәп кешене*
*Яҙған беҙгә юғалтаһы.*
*Ожмахтарҙа булһын йәнең,*
*Аҫылғужа - умартасы.*

**Рамай ҠАҺИР.**

ӨС ҺОРАУ

# ӨЛКӘН БЫУЫНДАРҘЫ...

## тәржемә итәм



**Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың: "Шиғриәттә бөтә темалар ҙа яҙылған, һеҙҙең быуынға беҙҙе тәржемә итергә генә ҡалды", - тип әйтеүе Фәрит ӘХМӘҘИЕВтың киләсәк һөнәрен һайлауға этәргес булғандыр, бәлки. Ун ике йыл "Ватандаш" журналында мөхәррир, журналистика тураһында ике монография, әллә күпме фәнни мәҡәлә авторы булыуға ҡарамаҫтан, ул үҙен барыбер ҙә тәржемәсе тип иҫәпләй. Уға төбәлгән өс һорау ҙа ижады киңек үк күп ҡырлы.**

**➔ Рәсәйҙә шағирҙарҙы шағирҙан да юғарыраҡ, тип баһалайҙар. Яҙыусылар элек-электән йәмғиәттең авангардында барған. Ә быna тәржемәселәрҙең эшмәкәрлеген нисек ҡылыҡһырларға мөмкин, сөнки улар бит икенсе авторҙың хис-тойғоларын да, яҙылған әҫәрҙең стилен һәм характерын да тапшырырға тейеш. Рәсәйҙә Әҙәбиәт йылында тәржемәселәрҙең көйәте тулыһынса файҙаланылдымы?**

- Шиғыр яҙыусы һәр кемде шағир тип әйтеп булмай, ә инде "шағирҙан да юғарыраҡ" тип баһаланғандары бик һирәк. Һәр кем тормошонда бер тапҡыр ғына булһа ла шиғыр яҙып ҡарағандыр, моғайын. Әммә тарих хәтере уларҙың иң-иңдәрен генә һаҡлай. Шағирҙарға һәр ваҡытта ла яҡшы мөнәсәбәт булған, тип әйтһәк, был дөрөҫлөккә тап килмәҫ. Властар һәр саҡ таланттарҙы үҙенә буйһондорорға тырыша. Батша заманында ла, большевиктар заманында ла әҙәбиәтселәрҙе Себергә һөргөнгә оҙатҡандар, атҡандар, репрессиялағандар. СССР заманында улар Яҙыусылар союзында ағза булып торған һәм һәр аҙымын тикшереп, дөрөҫ юлдан барамы-юҡмы икәнлеген күҙәтеп торғандар. Шуға ҡарамаҫтан, әҙиптәрҙең хәле сағыштырмаса яҡшыраҡ була. Улар йәмғиәттең элитаһы тип һанала, яҡшы гонорарҙар ала. Күпселек яҙыусыларыбыҙ ошо осорҙа формалашып, ижадтарында яҡшы уңыштарға өлгәшә, халыҡтың яратҡан яҙыусыһына әүерелә.

Тәржемәселәр - яҙыусыларҙың элитаһының элитаһы. Уларҙың хеҙмәте һәр саҡ кәрәк булған. Тәржемәселәр ҙә яҡшы йәшәгән. Юҡҡа ғына 1990 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзы Мәскәүгә, Әҙәбиәт институтына бер төркөм студентты тәржемәселеккә уҡырға ебәрмәгән бит. Хәҙер СССР ҙа, ҙур тираждар ҙа, ҙур гонорарҙар ҙа юҡ. Яҙыусы хеҙмәте тейешле кимәлдә баһаланмай. Бөгөн, барлыҡ яҙыусылар кеүек үк, тәржемәселәр ҙә ижад итеп кенә йәшәй алмай. Әммә заман үҙгәреүҙең икенсе яғы бар: элек рөхсәт ителмәгән темаларға яҙырға мөмкин. Шуға күрә, һәр үҙгәрешкә ике яҡлы ҡараш ташларға кәрәк. Ниндәйҙер кире һөҙөмтәнең икенсе яғы һәр саҡ ыңғай була.

Тәржемәсе булараҡ, ҡулъяҙмаларға етди ҡарайым. Барыһын да һәм бөтөн китаптарҙы ла руссаға тәржемә итергә кәрәкмәй ҙә. 1995 йылда Әҙәбиәт институтын тамамлағас, һөнәрем буйынса башҡортсанан рус теленә тәржемә менән шөғөлләнә башларға хыялландым. Диплом эше итеп Динис Бүләковтың "Ғүмер бер генә" тигән романын тәржемәләнем. Флүр Ғәлимовтың әҫәрен руссаға тәржемә иттем, баҫылманы, Ғайса Хөсәйеновтың "Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев" тигән китабын тәржемә иттем, ул айырым баҫма булып сыҡманы, "Ватандаш" журналында ғына донъя күрҙе. Атайымдың, яҙыусы һәм ғалим Вафа Әхмәҙиевтың фәнни хеҙмәттәренең тәржемәләре лә егерме йыл үткәс баҫылды.

Әлбиттә, тәржемә эше минә бик оҡшай, ваҡытым булмаһа ла, Мирас Иҙелбаевтың "Юлай улы Салауат" тигән китабын заказ буйынса тиҙ эшләнем, ул нәшриәткә тапшырылғас та донъя күрҙе. Был китапты мин үҙемдең граждандлыҡ бурысымды үтәр өсөн эшләнем.

Ил Президенты В. Путин әҙәбиәт буйынса сығыш яһап, тәржемәнең ҙур әһәмиәткә эйә икәнлеген белдерҙе. Ә бөгөн беҙ нимәгә эйә? Исмаһам, Әҙәбиәт йылын файҙаланып, ҡайһы бер китаптарҙы, авторҙарҙы башҡа телдәргә тәржемә итеп ҡалырға мөмкин ине. Әммә барыһы ла шул финанс ҡытлығына барып төртөлә. Шуға күрә, артабан республика Хөкүмәте яҙыусылар өсөн гранттар булдырған кеүек, тәржемәселәр өсөн дә гранттар булдырһын ине!

**➔ Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында яҙыусы-фронтовиктар ҡәләмен штыкка тиңләгән, уларҙың ялҡынлы, рухлы һүҙе халыҡҡа, хәрбиҙәргә рух, дәрт, өмөт өҫтәгән. Ни өсөн бөгөн халыҡ яҙыусыларҙың күңелдәргә үтеп инерлек һүҙен көткәндә, улар шым ҡалыуҙы хуп күрә?**

- Һуғыштан алда яҙыусыларҙы курстарға саҡырып, уларға офицер дәрәжәһе биргәнлектәрен барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Уларҙы шулай һуғышҡа әҙерләгәндәр. Һуғыш илһөйәрлек тойғоһон көсәйтеп, яҙыусыларыбыҙ ҡәләм менән дә, штык менән дә Бөйөк Еңеүҙе яҡынайтҡан. Әммә был хәл-торошта барыһы ла асыҡ күренә - алда дошман һәм уны еңергә кәрәк. Еңеүҙән һуң һуғыштың кеше өсөн ни тиклем ҡанһыҙ булыуын аңлау килде.

Бөгөн заман бөтөнләй икенсе төрлө. Яҙыусыларыбыҙ халыҡтың тормошо тураһындағы һорауға яуап эҙләй, ләкин һәр кем быға яуап таба алмай. Яҙыусы бөгөн нимәгә саҡырырға тейеш? Әгәр ауылда халыҡ эшһеҙ, мәктәптәр буш икән, кем гәйепле? Берәүгә лә эшләү тыйылмай бит. Сәбәптәрҙе һәм дошманды ситтән эҙләргә кәрәкмәй, бары тик эшләргә кәрәк - ҡыйыу автор халыҡҡа быna шул турала әйтергә тейеш. Ундай авторҙар бар. Ауыл яҙмышы уларҙы әсендерә. Күптән түгел генә беҙҙә суицидтарҙың артыуы тураһында уҡып ултырҙым. Ә бит динебеҙҙә үҙ-үҙеңә ҡул һалыу оло гонаһ. Ләкин үҙенә элмәк һалған кеше был хаҡта белмәҫкә лә мөмкин. Ғөмүмән, бар йәһәттән халыҡтың аңын асырҙай, рух өҫтәрҙәй, уларҙы ғәфләт йоҡоһонан уятырҙай әҙиптәр кәрәк бөгөн.

**➔ Ижад кешеһе йыш ғашиҡ була, тиҙәр. Әҙип өсөн нимә ул мөхәббәт?**

- Һәр кем яратып һәм ғашиҡ булып йәшәйҙер. Был уның булмышына һалынған. Әммә бары тик яҙыусы ғына ошо иң юғары хисте образдар, матур һүҙҙәр аша әйтеп бирә алалыр. Донъя ла матур, унда йәшәүселәр араһында ла матур кешеләр бихисап. Әммә һәр кем үҙенә идеал эҙләй, беҙ шулай яратылғанбыҙ һәм бары тик матур күнелдә генә мөхәббәт йәшәй. Ғашиҡлыҡты, мөхәббәтте тар мәғәнәлә генә ҡабул итеүселәр ҙә бар. Минең өсөн - ул тын алыу кеүек ғәҙәти булырға тейеш, йәғни һин тын алған һайын нимәләрҙер ғашиҡ булып, мөхәббәт хисе кисерергә тейешһең. Тәбиғәткәме, яңы көнгәме, балаларҙың йылмайыуынамы һ.б. Был да үҙенә күрә бер философия. Әйткәндәй, әҙәбиәтсе булһам да, философия фәндәре кандидаты ғилми дәрәжәһен яҡланым һәм көтмәгәндә ниндәйҙер яңы ижад тулҡынына эләктем - былтыр яҙ робағиҙар яҙа башланым, әлеге ваҡытта мин робағиҙарға ғашиҡмын. Тәүҙә уларҙы рус телендә ижад иткәйнем, һуңынан башҡортсаға тәржемәләнем. Ҡайһы бер осраҡта башҡорт варианты шәберәк тә килеп сыҡты, сөнки унда тәрәнерәк, аңлайышлыраҡ мәғәнә һалырға мөмкин. Автор менән тәржемәсенең оҫталыҡ буйынса ярыштары ике шағир бәйгеһенә оҡшап китте шулай...

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# АСЫУ ТИҘ ҮТҺӘ ЛӘ...

## йөрәктә һүҙе ҡала

- Йүнһеҙҙең йәшәүенән ни файҙа - елгә оскан саң кеүек.
- Килде-китте кешенән һыуҙа яткан таш яҡшы.
- Эшкинмәгән күп мыжыр, эш һөймәгән тел "һатыр".
- Аҙыҡлы юл арытмаҫ, арҙаҡлы ир ялҡытмаҫ.
- Кәнде һыр бирмә: сәй эсһәң, бал эстем, өйрә эсһәң, өйрәк ашаным, тин, тип әйтә торғайны өләсәй.
- Ярлы байыһа, артын синкәгә күтәрә.
- Ашағанда ҡабаланма - ҡарылырһың, эшләгәндә ҡабаланма - абынырһың.
- Әңгәмә ҡоророға һүҙ, өй төҙөргә мал һәм көс кәрәк.
- Емтекле ергә себен, аҡсалы урынға ҡомһоҙ йыйыла.
- Бәндәнең нәфсеһе арткан һайын яуызлығы ла көсәйә.
- Аҡсаң булмаһа ла намыҫың булһын: намыҫы таҙаның йөҙө көләс, күңеле ныҡ, эше хаҡ.
- Асыу дауылдай тиҙ үтһә лә, яманлығы йөрәкте ҡатыра.
- Ялҡаулыҡ бөтөн тәндә эренле шешкә батырған яман сир ул.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Мин төрлө халыҡтарҙың фольклорын өйрәндем, әммә бер халыҡ та башҡорттар кеүек моңдо үҙ асылында тапшыра алмай. "Урал", "Ҡара юрға", "Уралым" көйҙәре күңелдә аңлатып бөткөһөҙ хис-тойғолар уята.*



ИЖАДХАНА

**Ғүмер буйы нимәлер эшләп, көндәлек мәшәҡәттәргә күмелеп йәшәп, бер көн килеп, был донъяға нимә өсөн тыуҙым икән, тигән һорауға яуап таба алмай аптырап ҡалыусылар бихисап. Йәшәү мәғәнәһен, үҙ асылын табыу теләге һәр кешегә таныш. Берәүҙәр тапалған һуҡмаҡтан борола алмай юлын дауам итһә, икенселәр тормошон ҡырҡа үҙгәртеп, үҙе теләгән тарафҡа юл яра. Бына шундай үҙ асылын тапҡан йәштәребеҙҙең береһе, "Йатаған" этно-төркөмө етәксеһе Илдар Шакир менән ижад, йәшәү мәғәнәһе, милли үҙаң тураһында әңгәмәләштек.**

# ШӘХЕС БУЛЫРҒА ТЕЛӘҺӘҢ...

## милли тамырҙарыңа ҡайт




*"Йатаған" егеттәре (һулдан уңға): Рәсим Луғаманов, Илдар Шакир, Аяз Нухов, Морат Йәноҙаҡов.*

### Үҙ юлымды таптым

Мин сығышым менән Силәбе өлкәһенең Минйәр ҡалаһынан. Билдәле төркөмдәрҙә гитарасы булыу хыялы мине Миәс сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжының халыҡ хоры етәксеһе бүлегенә алып килде. Артабан Собинов исемендәге Һарытау дәүләт консерваторияһына уҡырға индем. Унда традицион рус мәҙәниәтен тергеҙеү менән шөғөлләндем, фольклорсыға уҡыным. Фольклорсы булараҡ, миңә барлыҡ ижад төрҙәре лә ҡыҙыҡ. Дүрт йыл православие сиркәүендә хорҙа, Һарытауҙағы берҙән-бер абхаз халыҡ коллективында йырланым, ике йыл Һарытау өлкәһе филармонияһында эшләнем. Кәләшем миңә Илһам Байбулдин һәм Рәис Низаметдинов башҡарған халыҡ көйҙәре тупланған дискты бүләк иткәс, үҙ милләтемдең фольклорына ҡыҙыҡһыныу тыуҙы. Тәү сиратта ҡурайҙа уйнарға өйрәндем, сөнки уның моңо генетик хәтерҙе уята. Ҡурай уйнаған башҡорт тыуған еренән, милләттәштәренән ситтә булғанда ла, тамырҙарын белеп бөтмәһә лә, ата-бабалар тарихын хәтеренә төшөрә. Мин төрлө халыҡтарҙың фольклорын өйрәндем, күп фестивалдәрҙә ҡатнаштым, әммә бер халыҡ та башҡорттар кеүек моңдо үҙ асылында тапшыра алмай. "Урал", "Ҡара юрға", "Уралым" көйҙәре күңелдә аңлатып бөткөһөҙ хис-тойғолар уята, уларҙы бер тапҡыр ишеткәндән һуң, онотоуы мөмкин түгел. "Урал" йыры иһә башҡорт халҡы өсөн "Фатиха" сүрәһенә тиң. Был көйҙө ҡурайҙа уйнаған кеше милләт өсөн доға ҡыла.

2012 йылда Өфөгә килеп, профессор Айрат Ҡобағошев менән таныштым һәм ул миңә З. Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт академияһына думбыра бүлегенең өсөнсө курсына уҡырға күсергә тәҡдим итте. Гитара һәм көснәлә (гусли - **ред.**) уйнай белгәс, думбырала өйрәнеп китеүе әллә ни ауыр булманы. Шулай ҙа яҡын дуҫым Мазан Паштаровҡа Ҡалмыҡ иленә ҡунаҡҡа барып ҡайтҡас, думбыраны үҙем өсөн яңынан астым. Улар сүстән эшләнгән ике ҡыллы думбырала бармаҡ менән сиртеп уйнай. Ә беҙҙе металдан эшләнгән өс ҡыллы думбырала медиатор ярҙамында уйнарға өйрәттеләр. Миненсә, төрлө халыҡтар менән тығыҙ аралашып йәшәгән башҡорттарҙың ике ҡыллы думбыраһы ла булған. Сөнки ҡайһы бер башҡорт халыҡ көйҙәре нәҡ шундай думбырала башҡарыу өсөн тәғәйенләнгән кеүек. Шул көйҙәрҙе башҡарғанда ҡылдары металдан эшләнгән думбыра матур яңғырамай, ҡармаҡ сүсенән яһалған думбыра, киреһенсә, бик моңло, көслө ишетелә. Ҡаҙаҡ ауылдарында бөгөн дә думбыра ҡылдарын ҡармаҡ сүсенән йә тарамыштан эшләп, бармаҡ менән сиртеп уйнаған, ҡушылып йырлаған аҡындар бар. Башҡорт думбыраһы ла медиатор менән генә уйналырға тейеш түгел.

Профессор Айрат Миңлеәхмәт улы әйтеүенсә, 25 йыл элек традицион музыка кафедраһы асылғанда улар ҡайһы йүнәлештә эшләргә кәрәк булыуын аныҡ төҫмөрләмәгән, бары Сергей Рыбаковтың "Урал мосолмандары көйҙәре һәм йырҙары" китабында яҙылған мәғлүмәткә таянған. XIX быуаттың билдәле фольклорсыһының китабында думбыра тураһында бик әҙ яҙылған, сөнки автор был уйын ҡоралын үҙ күҙҙәре менән күрмәгән. Башҡорттар, тамбурға оҡшаш, тик өс ҡыллы музыка ҡоралы бар, тип һөйләгәндәр. Башҡорт думбыраһы тураһында бына шундай берҙән-бер рәсми мәғлүмәт һаҡланып ҡалған. Мин быйыл З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тәүге ятағансы һәм традицион думбырала уйнаусы булараҡ тамамланым, бөтә концерт программамды думбырала бармаҡ менән сиртеп уйнаным. Хатта Моцарт, Вивальди кеүек донъя классиктарының әҫәрҙәрен дә думбырала башҡарҙым. Был инструменттың мөмкинлектәре киң, тип уйлайым.

### Ятаған

З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһына уҡырға килеп, бер аҙ ваҡыт үткәс, профессор Айрат Ҡобағошов, көснәлә уйнай беләһеңме, тип ҡыҙыҡһынды. Яуабым ыңғай булғас, ятаған тигән музыка ҡоралын һынап ҡарарға тәҡдим итте. Ятағанды Айрат Миңлеәхмәт улы Ырымбурҙағы бер музейҙа XIX быуатта башҡорттар уйнаған музыка ҡоралы булараҡ һаҡланған ҡомарҡыға ҡарап тергеҙгән. Музейҙа һаҡланған ҡомарҡының бер өлөшө һарыҡ һөйәктәренән эшләнгән, ете ҡылдан торған. Тәүге ятағандың нимәһелер эшләнеп етмәгән һымаҡ ине, шуға мастер Гөлнур Ғәлимова менән уны өс тапҡыр төрлөсә үҙгәртеп ҡорҙоҡ. Хәҙер беҙҙең ятағанға тағы ла ике ҡыл өҫтәлде. Ятаған килеп сығышы менән ҡытайҙарҙың гудженг тигән музыка ҡоралына барып тоташа. Был музыка ҡоралының атамаһы йә "ете", йә "ята" һүҙенән килеп сыҡҡан, тип фараз ителә. Ятаған күп төрки халыҡтарҙа бар, тик уларҙың атамаһы саҡ ҡына икенсе төрлө яңғырай. Мәҫәлән, хакас халҡында ул - чатхан, ҡалмыҡтарҙа - ятхан, ҡаҙаҡтарҙа - жэтэгэн, монголдарҙа ятаған тип атала. Әйткәндәй, ятаған башҡорттарға нәҡ шул монголдар аша килеп ингән, тип фаразлана. Ҡалмыҡтарҙың "Тюльпан" исемле ижади коллективы бар, улар ятхала уйнап өйрәнергә теләүселәрҙе Монголияға белемдәрен камиллаштырырға ебәрәләр икән. Ҡаҙаҡтар үҙҙәрендә ятағанды ун йыл элек кенә тергеҙгән.

Ятағанды яҡшылап өйрәнеп алғас, уникаль башҡорт музыка ҡоралдарын үҙ эсенә алған этник төркөм ойоштороу теләге менән яна башланым. Тәүҙә ойошторған "Динияр" төркөмөнөң эше ярты юлда туҡтап ҡалды, сөнки ятағанды ситкә ҡуйып, думбыра менән мауығып киттем. Мине музыкаль клип төшөргәнсе генә эшләгән "Торатау" төркөмөнә думбырасы булараҡ саҡырҙылар, унан Урал Иҙелбаев күреп ҡалып, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына алып килде, һуңынан "Әссәләм" һәм "Сал Урал" төркөмдәре, Азат Биксурин менән эшләү мөмкинлеге асылды. Ләкин ятағанға киренән әйләнеп ҡайтҡас, тағы ла ижади коллектив туплау теләге барлыҡҡа килде. Бөгөн беҙҙең "Йатаған" төркөмө составында дүрт кеше: ятағансы, думбырасы - мин үҙем, ҡурайсы - Морат Йәноҙаҡов, барабансы - Рәсим Луғаманов һәм ҡыл-ҡубыҙҙа, мерн-хуур, виолончелдә уйнаусы - Аяз Нухов. Төркөмдөң атамаһында "ятаған" һүҙен дөрөҫ яҙмауҙың сәбәбе - ижадыбыҙ менән ҡыҙыҡһыныусылар тиҙ арала интернет селтәренән беҙ уйнаған көйҙәрҙе табып, тыңлай алһын өсөн эшләнгән пиар. Сөнки "Ятаған" тип яҙһаң, тәү сиратта ислам ҡылысы һәм Украина танкы килеп сыға. Әлеге көндә "Йатаған" этно-төркөмөнөң ижадын үҙ итеүселәр һаны арта бара, беҙ төрлө сараларҙа, күп халыҡ йыйылған концерттарҙа ҡатнашырға тырышабыҙ, юғары уңыштарыбыҙ ҙа бар. "Аҡ ҡалпаҡ", "Ишбирҙин" көйҙәрен хәҙер "Юлдаш" һәм "Ашҡаҙар" радио-тулҡындарында ишетергә мөмкин, улар буйынса клип та төшөрҙөк. Милләттәштәр үҙебеҙҙең көйҙәрҙе тыңлап, мин һәм минең дуҫтарым рухланған кеүек рухланһын, тигән уй менән янып ижад итәбеҙ.

Әлегә минән башҡа ятағанда уйнаусылар юҡ, күптәр быны минең профессиональ музыкант булыуыма ҡайтарып ҡала, ноталарҙы яҡшы беләһең, тиҙәр. Ысынын әйткәндә, ятағанда уйнағанда бер ваҡытта ла нота тураһында уйлағаным юҡ. Һәр кешегә Аллаһы Тәғәлә ниндәйҙер бер мөмкинлектәр бирә, файҙаланып өлгөрөргә кәрәк. Миңә лә, теләгең булһа, тот та уйна, тигәндәй бөтә ишектәр асылды. Быны таный алыу мөһим. Әлеге көндә ун өс ҡыллы ятаған эшләп бирҙеләр. Бер башлаған эште артабан да дауам итеү, башҡорт традицион думбыраһын һәм ятағанды үҫтереү, халыҡҡа танытыу, үҙемдән башҡа оҫта музыканттар әҙерләү буйынса эш башлап торам. Теләүселәргә традицион думбыра һәм ятаған буйынса дәрестәр үткәрәм. Әлегә думбырала уйнау оҫталығы менән ҡыҙыҡһыныусылар күберәк, ятаған икәү генә булғас, артыҡ кеше иғтибарын йәлеп итмәй. Әммә киләсәктә халыҡ уны танып, башҡорттарҙың шундай моңло уйын ҡоралы булыуын белер һәм үҙләштерер, тип өмөтләнәм.

### Халыҡтың киләсәге - этник музыкала

Бөгөн этник музыка донъя кимәлендә юғары баҫҡысҡа күтәрелә, үҫешә, ҡыҙыҡлыраҡ була бара. Шулай ҙа әлегә ул йәштәрҙән бигерәк профессиональ музыканттарҙы ылыҡтыра. Сөнки улар музыка кеше күңеленә яҡтылыҡ алып килергә, яҡшылыҡҡа ынтылырға һәм милли мәҙәниәткә һөйөү уятырға тейеш булыуын аңлай. Эстрада йырсыларының аудиторияһы сикләнгән бит ул, уларҙы тик билдәле бер осорҙа ғына тыңлайҙар. Йәше уҙғас, кеше үҫә һәм уның күңел талабы бөтөнләй үҙгәрә, ҡасандыр тыңлаған эстрада йырҙары онотола. Ә йырҙар телдән-телгә, быуындан-быуынға күсеп барырға тейеш. Замандаштарым, балалар яратып тыңлаған йырҙар ("попса" тибеҙ уларҙы) барыбер халыҡтың тарихын, милли үҙенсәлектәрен сағылдырмай. Шуға ла йәштәргә төрлө милли музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәнергә кәңәш итәм. Мәҫәлән, ҡурайҙа уйнаһа, ул кеше йырҙарын да икенсе төрлө ижад итәсәк. Ҡыҙғанысҡа күрә, аңыбыҙға көнсығыш мәҙәниәте, әллә мәҙәниәтһеҙлеге нығ һеңгән, боронғо башҡортлоҡто кире ҡайтарып та булмаясаҡ. Рәсәйҙә, Ҡаҙағстанда ла сит ил йырсыларының билдәле көйҙәренә һүҙҙәр ижад итеп йырлаусылар күп. Бындай йырҙар бер көнлөк, улар иҫтә ҡалмаясаҡ. Ә бына быуаттар буйы халыҡ хәтерендә һаҡланып килгән көй-моңдарға аранжировка эшләп, заманса итеп үҙгәртеп халыҡҡа еткереү - икенсе эш. Был йәһәттән "Арғымаҡ" этно-рок төркөмөн өлгө итеп алырға мөмкин. Миңә көйҙөң төп нөхсәһенә яҡын торған музыка оҡшай.

Бөгөн донъя сәйәсәте кешеләрҙе бер төрлө итеүгә ҡоролған. Халыҡ араһында үҙенсәлегең менән айырылып торорға, шәхес булырға теләһәң, милли тамырҙарыңа ынтылырға кәрәк. Сөнки һәр кем был ергә кәрәкле ваҡытта килә, һәр кемдең бурысы — милләтенә файҙа килтергән эш башҡарып, артынан яҡты эҙ ҡалдырыу. Бөтә халыҡтарҙың киләсәге милли мәҙәниәт, милли музыка, милли уйын ҡоралдары артында. Юғиһә, халыҡты халыҡ иткән үҙенсәлектәр, рухи байлыҡ юҡҡа сығып, ябай шаблонға әйләнәсәк. Сергей Рыбаковтың ғилми хеҙмәтендә әйтелгән иҫ киткес бай фольклорыбыҙҙы түкмәй-сәсмәй киләсәк быуынға еткереү, башҡорт рухлы булып ҡалыуҙы хәстәрләйек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аҡыллы кеше аңлы булыр, ә аңлы кеше милли рух, туған тел һәм халыҡ тураһында уйланмай ҡалмаҫ. "Йатаған" этно-төркөмө етәксеһе Илдар Шакир ҙа шундай уйлы һәм хәстәрле йәштәрҙең береһе. Әңгәмә ғаилә тәрбиәһе темаһына боролғас, ул: "Башҡорт мөхитендә үҫеп, рус телен бөтөнләй белмәһәм ине, тип хыялланам. Үҙемә был бәхет тәтемәһә лә, ҡыҙымды шулай тәрбиәләргә тырышам", - тине. Бөгөнгөһөн генә түгел, киләсәген дә хәстәрләгән аңлы кеше бына нисек фекер йөрөтөргә тейеш. Юғиһә туған телде өйрәнеү, милли уйын ҡоралдарын һаҡлауҙың мөһимлеген һәр кемгә иҫбатлап хәлдән таябыҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# МАҠТАЙ-МАҠТАЙ ЭШЛӘТ

■ Пенсильвания университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә кешенең нимә яҙыуына ҡарап, уның ниндәй ауырыу менән яфаланыуын да билдәләргә була. Кемдер таблетка эсергә онотҡанлығы тураһында хәбәр итә. Кемдер зарарлы ризыҡтарҙың һүрәтен күп ҡуя. Хәбәрҙәр яҙышҡанда һүҙҙәрҙе аҙ ҡулланыу, дуҫтарҙың һаны күп булмауы, мәҫәлән, депрессия тураһында һүҙ йөрөтөргә мөмкинлек бирә. Ҡайһы берҙә социаль селтәрҙәрҙә кешенең йәшәү рәүеше лә сағыла - ниндәй диета тота, физик әүҙемлек кимәле ниндәй дәрәжәлә, һ.б. Ниндәйҙер бер билдәле ауырыу менән ауырығандар уға ҡағылышлы терминдарҙы йышыраҡ ҡуллана. Мәҫәлән, "Facebook" социаль селтәрендә "эс ауыртыу" тигән һүҙбәйләнеште ҡулланыусыларҙың 21 процентына был диагноз ҡуйылған була.

■ Күптәргә үҙен яҡшы тойоу өсөн тәүлегенә 7,5 сәғәт йоҡларға кәрәк. Йоҡо туймау хәүеф тойғоһон, депрессия, диабет, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен һәм бәхетһеҙ осраҡтарҙы булдыра. Лидс университеты психологтары 18 йәштән 80 йәшкә тиклемге 1024 кешенән һорау алған. 30-ҙан 50 йәшкә тиклемге респонденттарҙың 25 проценты йоҡоһо туймауын белдергән. Дөйөм алғанда, йылдың 15 көнөндә уларҙың йоҡоһо туймаған. 42 процент кеше эшенә бәйле стресҡа зарланған. 30 процент билдәләүенсә, эш йоҡо сифатына насар йоғонто яһаған. Әйткәндәй, Калифорния университеты ғалимдары билдәләүенсә, кеше тәүлегенә 8 сәғәт йоҡларға тейеш тигән һүҙ бары тик миф ҡына. 6-7 сәғәт йоҡо барыһы өсөн дә етә.

■ Банандың ҡабығы ла файҙалы, тип белдерә "The Daily Mail" сайты. Беренсенән, банан ҡабығында клетчатка күп, ул эсәктәр эшмәкәрлеген яйға һала. Магний, калий, A, C, B6, B12, аҡһымға ла бай икән ул. A витамины тештәргә һәм йомшаҡ туҡымаларға кәрәк, B6 витамины иммунитетты нығыта, баш мейеһе һәм йөрәктең эшмәкәрлеген нормала тота. Был витамин шулай уҡ шәкәр кимәлен яйлай, кәйефте күтәрә. B12 витамины баш мейеһенә һәм нервы системаһына мөһим. Ғалимдар 2011 йылда уҡ банан ҡабығында полифенол һәм каротиноидтар барлығын асыҡлағайны. Ошо файҙалы сифаттары банан ҡабығының баһаһын арттыра ла инде, дөйөм алғанда, ул матдәләр алышыныуын әүҙемләштерә, калорияла ла юҡ, тиерлек. Тик диетологтар иҫкәртеүенсә, банандарҙы пестицидтар менән эшкәртәләр, шуға ла йә органик бананды ғына һатып алырға, йә уны ныҡ итеп йыуырға кәрәк. Банан ҡабығын бешереп, киптереп ҡулланалар.

■ Ғалимдар 96 илдең 600 компанияһында эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙән һорауҙар алып, шундай һығымталарға килгән. Баҡтиһәң, күптәргә аҡсалата премияларға ҡарағанда маҡтау һүҙҙәре һәм башҡа матди булмаған бүләкләүҙәр кәрәк икән. Был компанияларҙың етәкселәре хеҙмәткәрҙәрен һайлау алдына ҡуя. Мәҫәлән, хеҙмәткәр исемлектән үҙенә кәрәк бонусты һайлап ала. Медицина страховкаһы йәки графикты үҙенә теләгәнсә ҡорорға мөмкинлек биреү араһынан күптәр икенсеһен һайлаған. Әйткәндәй, Гарвард университеты ғалимдары асыҡлауынса, етәксеһе йышыраҡ маҡтаһа, хеҙмәткәр эшенән китеү тураһында һирәгерәк уйлай.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 6-се һабаҡ: "Үҙең тураһында һөйлә"

Минең "йәшел йылан" ҡоллоғонан ҡотолоуым тураһында иң тәүҙә, әлбиттә, бергә эскән шешәләштәрем белде. Әйтергә кәрәк, был ҡарарымдың ҡоро һүҙ генә түгел, етди аҙым икәненә иң тәүҙә улар үҙ күҙҙәре менән күреп инанды. Ни өсөн тигәндә, алда әйткәнемсә, Шешәбикә менән хушлашһам да, ҡайһы бер табындарҙа мин һаман да сәй йә һыу эсеп кенә ултыра инем әле.

Был хаҡта ишетеп кенә белеүселәр: "Һе, тумыртҡа тәүбәһе, алкаш, әллә кем булған булып, күпме ҡыланып йөрөр тиһең, күр ҙә тор, барыбер ысҡына бит ул", - тип, минең ҡабат эсеүемде түҙемһеҙләнеп көттө. Әммә көтә-көтә, өтөк булдылар. Ҡайһы берҙәре аҙаҡтан, мәжлестәрҙә бергә тура килеп, шулай уҡ үҙ күҙҙәре менән күрҙе.

Башҡалар ҙа быға ышанһын өсөн апаруҡ ваҡыт кәрәк буласаҡ әле миңә. Был ҡыйыу аҙымым өсөн иң тәүҙә атайым менән әсәйем, башҡа туғандарым ҡыуанды. Бигерәк тә атайым спиртлы эсемлектәргә битараф булмаған туғандарыма мине өлгө итеп ҡуйҙы. Күҙ менән ҡаш араһында абруйым үҫеп киткәндәй тойолдо.

Яйлап-яйлап эсеүемде ташлауым тураһындағы хәбәр таралып, туғандарымдың, дуҫтарымдың һәм таныштарымдың ышанысында инаныуға әүерелә барған һайын, мин бер хәл-күренешкә диҡҡәтемде туҡтаттым. Иғтибар итеп кенә ҡалманым, уны артабанғы көндәремдә лә файҙаландым.

Быға тиклем һине яҡшы белгән, ара-тирә аралашҡан һәм ишетә-күрә таныған кешеләргә эсеүеңде ташлауың тураһында күберәк һөйләргә, был хәбәрҙе мөмкин тиклем күберәк таратырға кәрәк икән. Уларҙың араһында үҙең һәм башҡалар өсөн абруй һаналған, исемдәре халыҡ араһында киң танылыу яулағандары булһа, бигерәк тә һәйбәт. Ни өсөн тиһегеҙме? Аңлатып үтәм.

Беҙ һүҙҙе абстракт төшөнсә итеп кенә беләбеҙ. Уны тотоп, әйбер кеүек тойоп булмай, әммә аныҡ һүҙҙең йоғонтоһо теләһә ниндәй матдәнең тығыҙлығына ҡарағанда ла ҡеүәтлерәк көскә эйә. Юҡҡа ғына "Иң тәүҙә һүҙ булған" тип әйтмәйҙәр. Һүҙ менән кешенең тормошон балҡытып, шулай уҡ уны үлтереп тә була. Әгәр ҙә һинең хаҡта яҡшы хәбәр таралһа, яҡшы атҡа атланаһың икән. Таралған һүҙ кешеләр араһында әйләнеп йөрөй-йөрөй ҙә, үҙ эшен барыбер эшләй. Был һүҙҙәрҙең асылына тоғро ҡалһаң, улар һиңә ғүмерең буйы, хатта донъялыҡтан киткәс тә хеҙмәт итә. Һүҙ - иң аныҡ предмет, төшөнсә. Һүҙ - бумеранг, яҡшы ниәт менән осорһаң, һиңә изгелек булып әйләнеп ҡайта.

Һөҙөмтәлә һинең үҙ-үҙеңә ышанысың арта, ихтыярың нығый. Ә инде абруйлы кешеләргә килгәндә, һин уларға эсеүеңде ташлауың тураһында һүҙ еткерһәң, үҙеңдән-үҙең ошо һүҙең өсөн яуаплылыҡ тоя башлайһың. Был ябай ғына яуаплылыҡ тойғоһо түгел. Үҙ тәүбәңдән тайпылып ҡара - Аллаһы Тәғәлә алдында гонаһҡа батаһың. Үҙ һүҙеңдә тормай ҡара, киренән эсә башлаһаң, ояҡа ҡалаһың бит. Улай ғына ла түгел, шул абруйлы кешеләр алдында, уларҙың ҡарашында юҡҡа сығаһың. Был - рухи яуаплылыҡ, сөнки исемдәре билдәле шәхестәр был абруйҙы халыҡҡа хеҙмәт итеп яулаған. Улар ҡайҙа ғына булһа ла, бигерәк тә ситкә сыҡҡанда, тотош халыҡ исеменән сығыш яһай. Тимәк, улар алдында һүҙ биреү халҡың алдындағы антҡа ла тиң.

Уларға нисек итеп әйтергәме? Яндарына килергә лә: "Ағай, апай, мин теге "йәшел йылан"дың муйынын быуып ырғыттым, һеҙ миңә ышанһағыҙ, ҡабат ауыҙыма ла алмаясаҡмын!" - тип кенә өндәшергә. Мин бик күптәрҙең янына барҙым һәм шулай тип әйттем, үҙемә рухи яуаплылыҡ, уларҙың ышанысы аша ихтыяр көсө алдым.

Тормош бит кешене төрлө хәлгә ҡуя, беҙ хатта берике сәғәттән һуң, иртәгә нимә булырын да белмәйбеҙ. Әле генә шатланабыҙ, бәхетле тойғолар кисерәбеҙ, күп тә тормай, ҡайғырабыҙ, күңел төшөнкөлөгөнә биреләбеҙ. Әйләнәбеҙҙәге башҡа ваҡ-төйәк алдатҡыстар, ымһындырғыстар бер шешә һалҡын һыра, йәки йөҙ грамм шарап эсергә тамшандырып ҡына тора. "Бер шешә һыра, йәки йөҙ грамм шарап эс тә ҡуй, артығы кәрәкмәй" тигән аңлауҙар ҙа башҡа килеп ҡуя. Бына шул саҡта инде теге абруйлы кеше иҫкә килеп төшә. Үҙ-үҙеңде алдарһың да, уның алдында нимә тип яуап бирерһең. Күптәр тап ошондай мәлдәрҙә алдана ла инде. "Йөҙ грамм эскәндән ни булған?" тип, эсеп ҡуя ла, шундай уҡ хәл киренән ҡабатланһа, шул уҡ һүҙҙәрҙе тағы ла ҡабатлап, тағы ла түңкәреп ҡуя. Ә бит халыҡта "Тамсы ташты тишә" тигән бик тапҡыр бер әйтем бар. Көн һайын иллешәр-йөҙәр грамлап ҡына ҡабул ителгән шарапҡа өйрәнеү ай аҙағында ярты давайлай башлай. Тамсы эсте тишмәһә лә, ихтыярыңды бешә, телеңде сисә. Хәйер, "Тамсынан күл йыйыла" тип тә әйтәләр бит.

"Эсә белеп эсеү" тигән төшөнсәне хәҙер йыш ҡулланалар. Был осраҡта күберәк баҫымды "эсә белеп" тигәненә яһайҙар. Ә бит был һүҙбәйләнештең "эсеү" тигән төп өлөшө лә бар. Эсә белеп эскәндәр өсөн дә барыбер "Тамсы ташты тишә" һәм "Тамсынан күл йыйыла" бит. Был һүҙҙәрҙе мин уйлап сығарманым. Улар халыҡтың меңәр йыллыҡ тормош тәжрибәһенән, аҡылынан һәм зиһененән тупланған һығымта, һөҙөнтө һәм сырымта. Эсә белеп эсеүселәр төркөмөнә ҡараусылар үҙҙәренең шарап алдында көсһөҙлөгөн йәшерер өсөн ошо һүҙҙе ҡуллана, йәмғәтселек алдында "ала ҡарға" булып күренергә тырыша. Эсеү - беҙҙең халыҡҡа, тәбиғәтебеҙгә һәм булмышыбыҙға бөтөнләй ят күренеш. Уны аҡлау һәм яҡлау өсөн һүҙҙәр юҡ беҙҙең лөғәттә. Күптәр йөҙ грамды ҡабул иткәндә аш һеңдереү, ҡан тамырын киңәйтеү, стресты бөтөрөү өсөн тип һылтана. Ошо өс маҡсат өсөн шараптан тыш әллә күпме башҡа ысул бар. Был хаҡта алдараҡ һөйләшербеҙ.

Нисек кенә булмаһын, халҡыбыҙ араһында ҙур абруй яулаған шәхестәр, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, минең был сирҙән ҡотолоуымда ныҡ ярҙам итте. Әйтергә кәрәк, үҙҙәренең донъяла булыуҙары, абруй яулауҙары менән. Шәхестең халыҡ һәм йәмғиәт алдында яуаплылығы тураһында күп һөйләйҙәр, әммә кирәһенсә булған осраҡ өсөн аңлатма юҡ. Минең уйымса, йәмғиәттең һәм халыҡ вәкилдәренең шәхес алдындағы яуаплылығы тураһында ла асыҡтан-асыҡ һөйләшер мәл килеп етте. Сөнки талаптар ике яҡҡа ла ҡуйылырға тейеш. Бигерәк тә йәмғиәтебеҙҙе "йәшел йылан" быуып алған саҡта. Уларҙың башҡалар өсөн йәндәрен фиҙа ҡылып йәшәүҙәре минең тормошомдо ҡырҡа үҙгәртергә ярҙам иткән икән, мин уларҙы ысын мәғәнәһендәге шәхес, инсан тип атайым. Рәхмәт уларға!

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ТЫРНАҒЫҢДЫ БУЯМА!

**Һорау: Тырнаҡтарға лак буялған килеш тәһәрәт алып, намаҙ уҡырға буламы?**

- Юҡ, булмай. Лак кешенең тиреһенә һыу индермәй, шунлыҡтан тәһәрәт дөрөҫ булмай. Тәһәрәт дөрөҫ булмағас, намаҙ ҙа дөрөҫ түгел. Ғөсөлө боҙолған булһа (күрем, нифаз, яҡынлыҡ ҡылғандан һуң), ғөсөлө лә дөрөҫ булмай. Ә ғөсөлһөҙ йөрөү бик хәүефле. Бындай ҡатын һәр ваҡыт хәүеф эсендә йөрөй. Шайтандар өсөн, сихыр өсөн ундайҙарға зарар ҡылыу бик еңел. Бындай ҡатындар үҙҙәрен ҙур ҡурҡынысҡа дусар итә. Ғөмүмән, ғөсөлһөҙ йөрөү - ҙур гонаһ. Был шулай уҡ грим, һыу үткәрмәгән помадаларға ла ҡағыла. Ә ҡына һымаҡ буяуҙарға ҡағылмай, сөнки баш тиреһенә һыу үтеп керә, ул ҡамасауламай.

*✓ Әсәнең һөтө төшөп өлгөрмәһә, бәпесте йәш балалы берәй ҡатын килеп имеҙеп китә. "Бәләкәскәй, бөгөн һиңә күкрәк һөтөмдө имеҙҙем, ошо көндән минең бәпәйем менән бер туғандар кеүек булаһығыҙ", - тип әйтер булдылар.*



МАТУР ХӘТИРӘ



**"Тормош - диңгеҙ, ғүмер - аҡҡан һыу" тигән боронғолар. Йәшең алға тәгәрәгән һайын, артыңа боролоп ҡарап, шул тормош диңгеҙендә һинең менән бер заманда йөҙгән кешеләрҙе һағынып иҫеңә төшөрәһең. Ҡайһы берҙәре диңгеҙ төбөндә, нурҙар сәсеп, йым-йым итеп ятҡан аҫыл таштар кеүек, һинең иғтибарыңды үҙҙәренә йәлеп итеп, онотттормай, хәтер ептәреңде һүттерәләр. Үҙҙәренә генә хас һәләт эйәләре - инәйҙәр, бабайҙар әллә ниндәй уҡыу йорттарында уҡымағандар ҙа, шулай булыуға ҡарамаҫтан, тәбиғәт менән серҙәш булыуҙары, донъяуи белемдәренең ни хәтлем тәрән икәнлектәре менән хайран итәләр.**

# ТӘБИҒӘТ МЕНӘН СЕРҘӘШ ИНӘЙҘӘРЕМ

Беҙҙән бер өй аша ғына өс ҡыҙы менән Йәнғәлина Мәрйәм инәй йәшәне. Оло ҡыҙы Клара менән көн һайын бесәнгә баралар. Туғыҙ йәшлек Маһизәр менән өс йәштәр самаһындағы Вәсилә донъя көтөп ҡалалар. Бер көндө Вәсилә, әсәйем янына барам, тип, бөтөнләй кире яҡҡа сыҡҡан да киткән. Бөтә ауыл халҡы урмандарҙы тетеп эҙләп, Вәсиләне таба алманыҡ. О, шул ваҡыттағы Мәрйәм инәйҙең һыҙланыулы, әрнеүле күҙ ҡараштары... Йөрәктәребеҙҙе өтә ине.

Ауылыбыҙҙа ире һуғышта үлеп, тол ҡалған Хәлитова Йомаһолтан инәйгә кешеләр ноҡот һалдырырға йөрөй торғайны. Мәрйәм инәй ҙә Йомаһолтан инәйҙән бәләкәсенең яҙмышын юратырға барған. Йомаһолтан инәй оҙаҡ итеп таштарын һыйпап ҡарап торған да:

- Ҡыҙың төшкә тиклем табыла, бер ҡара кеше, бер аҡ кеше табып алып килер, - тигән. Беҙ был хәбәргә әллә ни әһәмиәт бирмәнек, дөрөҫөн әйткәндә, ышанманыҡ. Вәсиләне эҙләп, арып, арманһыҙ булып ҡайтып киләбеҙ. Бәй, ҡарап ебәрһәк, аҡ йөҙлө Әхмәтов Исмәғил ағай менән ҡуңыр йөҙлө Вафир Толомғужин ағай Вәсиләне алып ҡайтып киләләр ине. Йомаһолтан инәй ул таштар теленең серен нисек аңлағандыр, башҡа һыймай, әле булһа шуға хайран ҡалам.

Беҙҙең бала саҡ йәй көндәре урманда үтте, тиһәм дә, хата булмаҫ. Атайым сайыр һыҙа, беҙ, бала-сағалар, һәр беребеҙ һыҙат алып, сайыр йыйырға төшөп китәбеҙ. Унан ҡалһа, бесән мәле етһә, ҡуна йөрөп бесән эшләйбеҙ.

Шул саҡтарҙа ҡулдарымдағы сөйәлдәрҙең биҙрәткәнен һис кенә лә оноторлоҡ түгел. Сайырҙан таҙартҡанда, сөйәлдәрем ныҡ һыҙлай ине. Тиҫтерҙәрем араһында ҡулдарымды күрһәтергә ныҡ оялыр булдым. Бер көндө әсәйем: "Хәҙисә апайыңа барып ҡара, һине шәбәйтер ул", - тип, мине өмөтләндереп, Әминева Хәҙисә апайға ебәрҙе. Сөйәлдәремде дауалағанда берәй доға уҡыныمы икән, униһын хәтерләмәйем. Епте әллә нисәгә төйнәне лә: "Алып ҡайтып, ошо епте ергә күм, еп серип бөтһә, сөйәлдәрең дә бөтөр", - тине Хәҙисә апай. Мин осоп тигәндәй ҡайта һалып, епте йәһәт кенә ергә күмеп тә ҡуйҙым. Ысынлап та, әллә ни күп ваҡыт та үтмәне, сөйәлдәрем, һыпырып алғандай, юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙылар.

Тағы ла сана шыуып уйнап йөрөгән саҡта ҡулымдың быуыны сыҡты. Ҡаһарманова Ғәйниә апайға барғайным, "һә" тигәнсә быуынымды урынына ултыртып та ҡуйҙы. Өйөбөҙгә килеп йөрөгән Ғәйшә инәйем дә үҙе бер тылсым эйәһе ине. Үҙем университетта уҡып йөрөгән саҡта балаларымды әсәйемә ҡалдырып киткәйнем. Улымды ҡорт саҡҡан. Бал ҡортонан сағылыу бөтә кешегә лә килешеп бөтмәй шул. Сағылған урыны ҡарайып, балам һығыла башлаған. Әмәлгә ҡалғандай, Ғәйшә инәй беҙҙә булған. "Уй, килен, үлә бит был бала", тип, тиҙ генә улыма эркет эсереп, тәненә эркет һөртөп, төрөп һалып та ҡуйған. Һығылып, тын да ала алмай ятҡан балам шәбәйеп киткән.

Бала саҡта ҡатындарҙың дауаханаға барып, бәпәйҙән ҡотолғандарын хәтерләмәйем. Бына түҙемһеҙлек менән көткән кендек инәйе килә, беҙ, береһенән-береһе ваҡ, ыбыр-сыбыр балалар, тыуасаҡ туғаныбыҙ кем булыр икән, тип, шым ғына уйланып ултырабыҙ. Ниһайәт, бәпәй илаған тауышты ишетеп, еңел тын алып ҡуябыҙ. Ғаиләбеҙ ҙур булһа ла, тағы ла бер кешегә арттыҡ бит әле, тип, эй ҡыуанабыҙ, шатлыҡтарыбыҙҙың иге-сиге булмай. Кендек инәйҙәребеҙ, бала тыуыу менән, матур итеп йыуындырып, ауыҙына һары май ҡаптырып, кендегенә, тиҙерәк төшһөн өсөн ҡорот урап, төрөп һалып ҡуйырҙар ине. Бер баланың да сепсис менән ауырығанын хәтерләмәйем. Әсәһенең түшенә һөт төшкәнсе, бала, шул һары май менән туҡланып, ятып тора. Әсә кешегә һуған, борос, тоҙ, май һалып, эҫе генә итеп ҡорот иҙеп эсерерҙәр ине. Элек ауылда йәш балалар күп булды. Әсәнең һөтө төшөп өлгөрмәһә, бәпесте йәш балалы берәй ҡатын килеп имеҙеп китә. "Бәләкәскәй, бөгөн һиңә күкрәк һөтөмдө имеҙҙем, ошо көндән минең бәпәйем менән бер туғандар кеүек булаһығыҙ, татыу ғына йәшәгеҙ инде," - тип әйтер булдылар баланы имеҙгән әсәләр.

Ә кемдәр генә хәтерләмәй һуң үҙҙәренең кендек инәләрен? Бикбаева Мәхүб, Хөснитдинова Хәкимә, Сәғитова Ғәйшә, Йомағолова Ғәйшә, Тулыбаева Сафия, Йәнғәлина Гөлфариза, Бураҡанова Зәлифә, Әхмәтова Маһибәҙәр, Әминева Файза инәйҙәр, фельдшер-акушер Яҡупова Мәрйәм инәй - ауылыбыҙҙа кендек инәләре булдылар. Яҡупова Мәрйәм инәйҙән башҡа береһенең дә махсус белемдәре булманы. Улар ябай ауыл инәйҙәре ине. Йомағолова Ғәйшә инәйҙең: "Ҡатындар бәпәй табырға ауырығанда ла уҡый торған доғалар бар бит ул", - тип әйткәне хәтерҙә. Ололар баланың холоҡ-фиғелен кендек әбейенә оҡшатып: "Һай, ерҙән алған инәкәйеңә оҡшағанһың шул," - тип әйтер булдылар. Өләсәйҙәр йәш баланы йыуындырғандан һуң, мейес йылыһында кирелдереп-һуҙылдырып тәненә массаж эшләрҙәр ине. Бәлки, шуғалыр ҙа, беҙҙең тиҫтер балалары умыртҡа бағанаһы ҡыйшайыу, ДЦП ауырыуҙары менән яфаланманы.

Ауылыбыҙҙа үҙе бәләкәй генә, ҡураныс ҡына кәүҙәле, халҡыбыҙҙың йолаларын яҡшы белгән, күп тарихи ваҡиғаларҙың шаһиты - Хөснитдинова Хәкимә өләсәйҙе оло быуын кешеләре яҡшы хәтерләйҙер. Ул, ғәҙәттә, бала һатып биреү йолаһын башҡара торғайны. Үтә лә һаҡсыл кеше ине ул Хәкимә өләсәй. Бәләкәйенән алып ҙурына тиклем әллә нисә төрлө бизмәндәре, киндер эшкәртә торған ҡулайламалары бар ине. Аслыҡ ваҡытында Кәбир ағайымды, үҙенә алып аҫырап, үлемдән алып ҡалған ул. Беҙгә фәһем булһын тиептер инде, ауылыбыҙҙа булып үткән күп кенә тарихи хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләй ҙә, фекерҙәрен әйтем, мәҡәлдәр менән нығытып ҡуйыр ине.

Хәкимә өләсәйҙең Тимер ауылында йәшәүсе ейәнсәре Зөһрә Солтанова, үҙенең өләсәйҙәре тураһында хәтирәләре менән уртаҡлашып, ошоларҙы һөйләне: "Бер көн, үлерҙән бер аҙна ғына элек, беҙҙең өйгә Яубаҫарова Сәүҙә апай килеп керҙе. Ул Тимер ауылында колхозда эшләп, пенсияға сыҡҡан. "Зөһрә, беләһеңме, һинең Хәкимә өләсәйең әүлиә ине бит", - тине. Шунан йәш саҡтағы үҙе менән булған бер ваҡиғаны һөйләне: "Ғәлиәкбәрҙән ун саҡрым ғына алыҫлыҡта һарыҡ көтөп йөрөй инем. Бармағым шешеп китте. Бөрйән больницаһына алыҫ, тип, Ғәлиәкбәргә фельдшерҙы эҙләп киттем. Төш мәле ине, урамда ап-аҡ күлдәк кейгән бер әбей осраны. "Ҡайҙа китеп бараһың?" - тип һораны. Мин хәлемде аңлатып бирҙем. Ул бармағымды ҡараны ла: "Һиңә фельдшер кәрәкмәй, ҡайҙа үҙем дауалайым", - тине. Үҙенә эйәртеп өйөнә алып ҡайтты, сәй эсерҙе. Бармағымды өшкөрҙө лә: "Бармағыңды ошо банканың эсенә тығып ултыр, хәҙер өс бөртөк ҡорт төшөр, - тип, бармағымды банка эсенә тығып ҡуйҙы. Ысынлап та, бармағымдан өс бөртөк ҡорт килеп төштө, һыҙланыуым да ҡул менән һыпырып алғандай юҡ булды. Мин ҡыуанып ҡайтып киттем", - тип һөйләгәйне.

Атайымдың әсәһе, Ғәйшә өләсәйем тураһында, ҡыҙғанысҡа күрә, әҙ генә беләм. Бәләкәй саҡта мин бик шаян, тиктормаҫ булғанға, Хәкимә өләсәйем "ен ботағы" тип йөрөтә торғайны. Бер мәл ҡапҡа башынан ҡолап төшөп, мейем һелкенде. Белмәйенсә, оҙаҡ йөрөп ташлағанмын. Гел баш ауырта, ҡоҫҡо килә ине. Әсәйем Ғәйшә өләсәйемде алып килде. Еп менән үлсәп, арҡырыһынан буйына ҡаҡҡыслап, һуҡҡыслап, еңелсә генә мейемде үҙ урынына ултыртты өләсәйем. Әле булһа ғәжәпләнәм: хәҙер кем шешкән бармаҡты ҡортон төшөрөп шәбәйтер ҙә, мейене ябай ғына ысул менән урынына ултыртыр ине икән?

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Үҙ-үҙеңә абсолют ышаныуҙың төп серҙәре

### Беренсе сер: бер кемгә лә аңыңың әлеге кимәлен үҙгәртеү оҡшамай

Бының үҙенә күрә сәбәптәре лә бар:

● Аңыбыҙҙа һүрәтләгән бөтөн нәмә Хәҡиҡәт тураһындағы күҙаллауҙарыбыҙға нигеҙләнә. Беҙ уның ни тиклем боҙолғанын йәки үҙгәртелгән булыуын иҫәпкә алмайбыҙ. Аңыбыҙ барлыҡ ғәмәлдәрҙе һәм реакцияны контролдә тота.

● Үҙгәреү зарурлығы, хатта мөмкинлеге ни өсөн кәрәкмәгәнлеген аҡлау өсөн "логик нигеҙләүҙәр" уйлап табыуы күпкә еңелерәк.

● Беҙ бары тик хәҙерге ҡиммәттәребеҙҙе хуплаусы тәьҫораттарҙы ғына һайлайбыҙ. Шул уҡ ваҡытта ғәмәлдәге инаныуҙарға тап килмәгән бөтөн нәмәгә күҙ йомабыҙ йәки уларҙан ҡәтғи баш тартабыҙ.

● Төпкө аңыбыҙҙы һәм үҙәк нервылар системаһын тормоштағы хәл-ваҡиғаларға ҡарата нерв реакцияларына программалағанбыҙ. Был ысынбарлыҡта булған нәмәләрҙе нисек бар - шулай ҡабул итергә мәжбүр итә. Икенсе төрлө әйткәндә, беҙ үҙебеҙҙе нисек тойорға һәм нимә эшләргә мәжбүр итеүгә ярашлы ғәмәлдәр ҡылабыҙ. Үҙебеҙ шундай система булдырғас, бары тик үҙебеҙ генә уның төп ҡанундарын үҙгәртә алабыҙ.

Аң үҙгәртергә кәрәк булған нәмәләр тураһында иҫкәртә, әммә шул уҡ ваҡытта беҙгә ошо хәл-торошобоҙ башҡаларҙыҡынан айырмалы кеүек тойола. Был күп нәмәне урап үтергә, кәрәк икән, инаныуҙарыбыҙға хәүеф менән янаған башҡа идеяларҙы ҡәтғи кире ҡағырға мәжбүр итә. Аңды үҙгәртеү юлындағы иң ҙур ауырлыҡ - хаталы дәлилдәрҙең тормошто ҡабул итеүебеҙҙе боҙоп күрһәтеүен аңларға теләмәү. Бына ни өсөн ваҡыты-ваҡыты менән ҡараштарыңды шик аҫтына ҡуйып, ялған позициялар менән эш итмәйбеҙме икәнлеген тикшереп торорға кәрәк.

Бер бөтөн шәхестең инаныуҙары һәм донъяға ҡарашы һәр саҡ үҙгәреп тора. Ә бына невроз менән сирләүсе шәхестәргә килгәндә, улар инаныуҙары ни тиклем яңылыш һәм формаһы боҙолған булмаһын, улар уға теше-тырнағы менән йәбешеп ята. Невротикка элекке фекерҙәре өҫтөндә уйланыу өсөн сәбәп булып уның иҫке моделдәрен үҙгәртеп, ғәҙәттәрен үҙгәртергә мәжбүр итеүсе етди көрсөк тора.

Әгәр аңығыҙ ялған һәм боҙолған аңлатмалар, ҡиммәттәр менән программаланған икән, уларҙы нисек тә булһа аҡлау өсөн тормош рәүешегеҙҙе шуларға ярауҡлаштыра, ялғанды дөрөҫ тип ҡабул итә башлаясаҡһығыҙ. Һуңынан, үҙегеҙҙең хаҡлығығыҙҙы раҫлар өсөн дәлилдәрҙе бутайһығыҙ. Йәғни үҙ ҡойроғо артынан баҫтыртыусы эткә оҡшап ҡаласаҡһығыҙ. Бер ялған инаныу үҙе артынан икенсеһен тарта. Һуңынан инде бөтөнләй айыҡ фекерләү һәм дөрөҫ ғәмәлдәр башҡарыу һәләтен юғалтасаҡһығыҙ.

Беренсе өҫтөнлөк. Тәү сираттағы өҫтөнлөк булып аңдың сиктәрен киңәйтеү тора. Шуны тормошҡа ашырып, күптән хыялланған, әммә үҙ-үҙенә ышанған кеше булырға ҡамасаулаған яңылыш дәлилдәрҙән ҡотоласаҡһығыҙ. Теләгән һөҙөмтәгә өлгәшер өсөн түбәндәгеләрҙе эшләргә кәрәк:

1. Автоматик рәүештә һәм бер нигеҙһеҙ үҙегеҙҙең хаҡ һәм ялған тураһындағы күҙаллауҙарығыҙҙы яҡлауығыҙҙы туҡтатығыҙ, улар яңы идеяларға юл яба.

2. Аңлатмаларҙы, ҡиммәттәрҙе, инаныуҙарҙы, күҙаллауҙарҙы, һаҡланыу ысулдарын, ғәмәлдәрҙе, маҡсаттарҙы, өмөттәрҙе һәм теләктәрҙе артыҡ баһаламағыҙ.

3. Ысын ихтыяжығыҙҙы һәм сәбәптәрҙе аңлап, уларҙы ҡайтанан ҡарағыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**



## 2 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00"Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Палач". Детективный сериал. 19-я, и 10-я, заключительная, серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Парижский отсчет". Худ. фильм (16+).
02.10, 03.05 "Квинтет". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Семейные ценности". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Письма на стекле. Судьба". 1-3-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.50 "Черный бизнес развитого социализма". "Цеховики", "Следственный эксперимент. История отравлений". Док. фильмы (12+).
02.20 "Сын за отца". Сериал (16+).
04.15 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (12+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (12+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Бай" (12+).**
**18.15 "Орнамент" (0+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Биш дауа" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Ленинградец". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Любви все возрасты покорны".**

## 3 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Палач". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Клуб Веселых и Находчивых". Встреча выпускников-2015" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Встреча выпускников-2015" (16+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 "Артур Ньюман". Драма (12+).
02.00 "Джон и Мэри". Худ. фильм (16+).
03.50 "Вегас". Сериал (16+).
04.40 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Шесть миллионов свидетелей". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Письма на стекле. Судьба". 4-я и 5-я серии (12+).
23.55 "Вести.doc" (16+).
00.35 "Чужая память. Дежавю", "За гранью. Искусственный взрыв" (12+).
02.10 "Сын за отца". Сериал (16+).
03.10 "Небесный щит".
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**11.00 "Полезные новости" (0+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Асыҡ дәрес" (12+).**
**18.55 Хоккей. ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Барс" (Казань).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Просто вместе". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Встреча с молодостью" (12+).**

## 4 НОЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Максим Перепелица". Худ. фильм.
07.55 "Кубанские казаки". Худ. фильм.
10.00 Новости.
10.15 "Белые росы". Худ. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Дело было в Пенькове". Худ. фильм (12+).
14.10 "Полосатый рейс". Комедия (12+).
16.00 "Весна на Заречной улице". Мелодрама (12+).
17.50 "Служебный роман". 2 серии. Лирическая комедия.
21.00 "Время".
21.35 "Великая". 1-я и 2-я серии. Исторический сериал (12+).
23.30 "Вишневый сад". Концерт Пелагеи.
01.20 "Ослепленный желаниями". Худ. фильм (12+).
03.25 "Вегас". Сериал (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.05 "Семь нянек". Худ. фильм.
06.35 "Любовь земная". Худ. фильм.
08.35 "Дмитрий Донской. Спасти мир". Док. фильм (12+).
09.35 "Вместо нее". 8 серий. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.15 "Вместо нее". Продолжение сериала (16+).
17.35 "Призрак". Комедия (6+).
20.00 "Вести".
20.50 "Письма на стекле. Судьба". 6-я и 7-я серии (12+).
22.50 "Дмитрий Хворостовский и друзья". Трансляция из Государственного Кремлевского дворца.
00.25 "Прошлым летом в Чулимске". Драма (16+).
02.15 "Сватовство гусара". Худ. фильм.
03.45 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" - 20 лет в эфире!" (12+).**
**09.00 "Народы Башкортостана". День народного единства на БСТ. Русские (6+).**
**09.30, 10.15, 14.00, 14.45 "Орнамент"**
**09.45 "Народы Башкортостана". День народного единства на БСТ. Башкиры**
**10.30 "Народы Башкортостана". День народного единства на БСТ. Татары (6+).**
**11.00 "Радость нашего дома" (0+).**
**11.30 "Это моя Родина" (0+).**
**12.00, 14.15 "Это мы!" (0+).**
**12.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "С праздником!" (12+).**
**15.00 "Народы Башкортостана". День народного единства на БСТ. Латыши (6+).**
**15.30 "Поколение Маугли" (6+).**
**17.15 "Покровские ворота". Худ. фильм (0+).**
**19.45, 20.45 "Телецентр" (0+).**
**20.30 "Сәңгелдәк" (0+).**
**21.30 Новости (0+).**
**22.00 "Историческая среда" (6+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**23.00 "Папа". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Судьба, выбранная мной" (12+).**

## 5 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Служебный роман".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Великая" (12+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Великая". 3-я и 4-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Лучшие дни впереди" (16+).
02.15 "Большой год" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Большой год". Сериал (16+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Горячие следы". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Письма на стекле. Судьба". 8-я и 9-я серии (12+).
22.55 "Поединок" (12+).
00.35 "Бастионы России. Выборг", "Бастионы России. Старая Ладога" (12+).
02.35 "Сын за отца" (16+).
03.35 "На качелях власти. Пропавшие жены" (12+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (6+).**
**17.15 "История признания" (12+).**
**17.30 "Новости культуры".**
**17.45 "Историческая среда" (6+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорттар" (6+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Дружба и никакого секса?" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Половецкая мистерия" (12+).**

## 6 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20 "Великая". Исторический сериал
14.25, 15.15 "Время покажет". Ток-шоу (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.45 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Музыкальный конкурс (12+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.35 "Фарго". Детективный сериал (16+).
01.40 "Группа "The Who" (16+).
02.50 "Вегас". Худ. фильм (16+).
03.40 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.44, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.00, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Чужая дверь". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-3". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Письма на стекле. Судьба". 10-12-я серии (12+).
23.50 "Жена Штирлица". Мелодрама (16+).
01.50 "Васильки для Василисы".
03.50 "Горячая десятка" (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.55 Футбол. Молодежное первенство РФПЛ. ФК "Уфа" (Уфа) - ФК "Амкар" (Пермь).**
**15.45 "Истории в табличках" (6+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.15 "Ал да гөл" (0+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорт йыры" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Голливудский финал" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Любовь под вязами" (12+).**

## 7 НОЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

04.50, 06.10 "Ищите женщину". Худ. фильм.
06.00 Новости.
07.55 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.05 "На 10 лет моложе" (16+).
10.55 "Екатерина Великая. Женская доля" (16+).
12.00 Москва. Красная площадь. Торжественный марш, посвященный 74-й годовщине Парада 7 ноября 1941 г.
12.45 Новости (с субтитрами).
13.10 "Идеальный ремонт".
14.05 "Теория заговора" (16+).
15.05 "Голос". Музыкальный конкурс (12+).
17.10 "Следствие покажет" с Владимиром Маркиным (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 "ДОстояние РЕспублики: Евгений Крылатов".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Ален Делон, уникальный портрет". Документальный фильм (16+).
24.00 "Сицилийский клан" (16+).
02.20 "Леди в цементе" (16+).
04.10 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00 "Люди в океане". Худ. фильм (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.30 "Правила движения" (12+).
10.15 "Это моя мама" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Людмила Гурченко. За кулисами карнавала" (12+).
12.20 "Дальше любовь". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Дальше любовь". Продолжение сериала (16+).
16.45 "Знание - сила". Телевикторина.
17.35 "Главная сцена". Музыкальный конкурс (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Письма на стекле. Судьба". 13-16-я, заключительная, серии (12+).
00.50 "Одинокий ангел". Мелодрама (16+).
02.55 "Назначение". Худ. фильм.
04.50 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Место волшебной рыбки" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (6+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2015". II тур (6+).**
**16.55 Волейбол. Чемпионат России. Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Газпром-Югра" (Сургут).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**20.45 "Осрашыу" (12+).**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Легенды спорта" (12+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Властелин любви". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Девушка с монистами" (12+).**

## 8 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.25, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.50 "Кадриль". Худ. фильм.
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.20 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Олег Меньшиков. "Время, когда ты можешь все!" К юбилею автора (12+).
13.25 "Покровские ворота". Комедия.
16.10 "Время покажет". Темы недели
17.50 "Точь-в-точь" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
23.00 "Метод. Сеанс четвертый". Криминальный сериал (18+).
01.00 "Теленовости" (12+).
03.30 "Модный приговор".
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.45 "Кольцо из Амстердама". Худ. фильм (12+).
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Служанка трех господ". Худ. фильм (12+).
13.10 "Евгений Петросян. "Улыбка длиною в жизнь". К 70-летию артиста. Фильм 5 (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Евгений Петросян. "Улыбка длиною в жизнь". К 70-летию артиста. Фильм 5. Продолжение (16+).
16.00 "Синяя Птица". Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов.
18.00 "Шепот". Драма (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "Кактус и Елена". Мелодрама (12+).
02.35 "Не сошлись характерами" (12+)
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 Мультфильмы (0+).**
**09.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**09.30 "Легенды спорта" (6+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**15.00 "Весело живем" (12+).**
**15.15 "Пациенты доверяют мне жизнь…" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Вестник "Газпром трансгаз Уфа" (12+).**
**16.45 "Мулла" (12+).**
**19.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**19.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**20.00 "История признания" (12+).**
**20.15 "Любимое дело" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Это мы!" (0+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Байыҡ-2015". II тур (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Пули над Бродвеем". Худ. фильм (16+).**
**02.00 "Свидание с джазом" (12+).**

✓ *Һин эҙләгән бәхет һинең менән килгән күләгәгә оҡшаш: артынан сапһаң - тоттормай, ҡасһаң - артыңдан ҡыуа төшә.*

*(Ғәрәп халыҡ мәҡәле).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ИЛЕ БАРҘЫҢ - ТЕЛЕ БАР




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**42-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Сәлих. Эйелмәй. Ғәли. Иркен. Сания. Уҙаманы. Кәмәләр. Мирра. Лемхай. Әхиәр. Тәм. Шәүрә. Әсмә. Терн. Һижри. Совет. Омар. Озерова. Исаев. Манреса. Вәлиева.

**Вертикаль буйынса:** Күрәҙәсе. Исмәғилев. Либретто. Эшсе. Заимов. Нурлы. Степ. Тенор. Озерки. Әлмөхәмәтов. Манас. Хәйри. Ала. Сым. Шәһри. Иртә. Япа. Вәлиев.

## КОТЛАЙБЫҘ!

Октябрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Хәмиҙә Исчурина, Миңлеәхмәт Ғәҙелшин, Миңлебай Дәүләтбаев, **Дүртөйлө районы** Түбәнге Мансар ауылынан Рәзинә Ғәлиева, **Бәләбәй ҡалаһынан** Гүзәл Иманғолова, Благовещен ҡалаһынан Әлфинә Мәхмүтова, **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Юлай Ҡыҙрасов, Хөбәйбә Әҙелгужина, Зилә Мөхәмәтова, Мәрйәм Ишкилдина, **Стәрлетамаҡ районы** Октябрьское ауылынан Гөлфиә Ғибәҙуллина, Күсәрбай ауылынан Ғәйнетдин Ишаев, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Нурсилә Сөләймәнова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Миләүшә Моратова, Ҡашҡар ауылынан Яңылбикә Баязитова, Яманһаҙ ауылынан Зөлфиә Ҡудашева, **Иглин районы** Красный Восход ауылынан Әдис Закиров, **Хәйбулла районы** Әбүбәкер ауылынан Гөлзиә Билалова, Рәсимә Әбүбәкерова, **Федоровка ауылынан** Мәрйәм Ҡужина, **Өфө районы** Николаевка ауылынан Мөхәммәт Ҡолдәүләтов, **Ғафури районы** Үтәк ауылынан Роза Юлмөхәмәтова, Ҡормантау ауылынан Маһира Муллағәлиева, **Федоровка районы** Бала Сытырман ауылынан Рәйфә Вәлиева, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Фәһимә Дилмөхәмәтова, **Белорет районы** Инйәр ауылынан Фаягөл Сәйғәфәрова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ҡотлайбыҙ! Һеҙгә ҡоростай сәләмәтлек, заман ауырлыҡтарынан өҫтөн булып, күңел бөтөнлөгөн тойоп йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**31 октябрь "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәнһүҙин), комедия

**1 ноябрь "Әллә ҡатын, әллә ен?.."** (Т. Москвина), дөрөҫ булмаған комедия

**3 ноябрь "Һаран"** (Ж.-Б. Мольер), комедия

**4 ноябрь "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәнһүҙин), комедия

**5 ноябрь "Ике төш"** (М. Багаев), драма

**6 ноябрь "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович), драма

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**1 ноябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. Башлана 12.00

**3 ноябрь "Диңгеҙ буйын иңләй ала эт"** (С. Айытматов), хикмәт

**5 ноябрь "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миннуллин), музыкаль комедия

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**3 ноябрь "Сәнғәт төнө: Театр+Кино".** "Сируси", "Өс хат", "Бәхет ҡошо" фильмдары, "Күңелле йәшәйбеҙ" тележурналы актерҙары менән осрашыу

**5 ноябрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия

**7 ноябрь "Һатам! Иремде һатам!!!"** (Н. Ғәйетбаев), комедия

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Ноябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (20) дүшәмбе | 6:51 | 8:21 | 13:30 | 16:06 | 17:36 | 19:06 |
| 3 (21) шишәмбе | 6:53 | 8:23 | 13:30 | 16:04 | 17:34 | 19:04 |
| 4 (22) шаршамбы | 6:55 | 8:25 | 13:30 | 16:02 | 17:32 | 19:02 |
| 5 (23) кесе йома | 6:57 | 8:27 | 13:30 | 16:00 | 17:30 | 19:00 |
| 6 (24) йома | 6:59 | 8:29 | 13:30 | 15:58 | 17:28 | 18:58 |
| 7 (25) шәмбе | 7:01 | 8:31 | 13:30 | 15:56 | 17:26 | 18:56 |
| 8 (26) йәкшәмбе | 7:03 | 8:33 | 13:30 | 15:54 | 17:24 | 18:54 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

## КИҘЕҮҘӘН ҺАҠЛАН

**Әлеге ваҡытта баш ҡалала киҫкен респиратор-вирус инфекцияһы ауырыуы эпидемик кимәлгә етмәһә лә, сентябрҙән уның артыуы күҙәтелә. Әлегә киҙеү осрағы теркәлмәгән.**

Киҙеүҙе профилактикалауҙың иң һөҙөмтәле ысулы булып вакцинация тора. Быны "Сәләмәтлек" өҫтөнлөклө милли проектын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәләре лә раҫлай. Был программа сиктәрендә 2005 йылдан алып республикала йыл һайын 800 мең кеше прививка эшләткән, 2014 йылдан был һан 1 миллионға еткән. Шул иҫәптән баш ҡала халыҡтың 25 проценты, йәғни 300 меңдән ашыуы иммунизация үткән. Был маҡсатҡа аҡса федераль бюджеттан бүленә. Ҡала хакимиәтендә киҙеүҙе һәм ОРВИ-ны иҫкәртеү буйынса уҙғарылған кәңәшмәлә баш ҡаланың ойошма-предприятиелары менән бәйләнештәрҙе нығытыу зарурлығы, киң мәғлүмәт саралрында профилактика эштәре буйынса сығыштар ойоштороуы, аңлатыу эштәре алып барылыуы билдәләнде.

✔ ***Ни өсөн ирҙәр ҡатындарына ғына башҡаларға ҡарата ҡылмай торған насарлыҡтар ҡыла?***

***(Пьер Бомарше).***



СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# БӘЙГЕГӘ САҠЫРАБЫҘ!

**Белорет районы үҙешмәкәр башҡарыусылар араһында Ғәли Хәмзин исемендәге призға район конкурсы уҙғара.**



Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Ғәли Хәмзиндың исемен мәңгеләштереү өсөн республикала быйыл икенсе тапҡыр унын исемендәге призға бәйге үтә. Ул 2015 йылдың 20 ноябрендә Белорет районы Ҡоҙғон-Әхмәр ауылында башлана. Һайлап алыу ике турҙан торасаҡ. Беренсе тур 12 ноябрҙә сәғәт 11-ҙә Инйәр ауылы мәҙәниәт йортонда һәм 13 ноябрь сәғәт 10-да Сермән ауылы мәҙәниәт йортонда була. Икенсе тур 20 ноябрҙә, сәғәт 11-ҙә Әхмәр ауылында башлана.

Беренсе бәйге 2013 йылда үткәйне. Ғәли Хәмзинды барыһы ла матур тауышлы, һәләтле йырсы итеп хәтергә ала. Ул бигерәк тә башҡорт халыҡ йырҙарын оста башҡара ине. 1985 йылда халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың Бөтөн Рәсәй конкурсында беренсе урын ала. Ғәли Хәмзин һәләтле ойоштороусы ла ине, "Йәдкәр" фольклор төркөмөн ойоштороп, 25 йыл ошо төркөмдө етәкләне. Рәсәй, донъя кимәлендә башҡорт сәнғәтен лайыҡлы күрһәтә, хатта бер ваҡыт АҠШ-ның Миннесота штатының Миннеаполис ҡалаһының почетлы гражданы исеме бирелә. Уның ижады элекке СССР илдәренә лә яҡшы таныш.

# ГЕРОЙҘАР ШӘЖӘРӘЛӘРЕ

**Көйөргәҙе районы Ермолаево ауылында "Шәжәрә байрамы" үтте. Билдәле сәнғәт һәм фән әһелдәренән торған баһалама ағзалары Башҡортостандың 24 районынан 28 эште ҡараны.**



Республикабыҙҙа "Шәжәрә байрамы" күптән уҙғарылып килһә лә, быйыл уның Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына бәйле Советтар Союзы Геройҙары шәжәрәләренә арналыуы уға айырыуса үҙенсәлек өҫтәне. Көйөргәҙеләр яҡташтары, республиканан тәүгеләрҙән булып СССР-ҙың иң юғары баһаһына - Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған Ғәфиәтулла Арыҫлановҡа бюст асты. Ғәфиәтулла Шаһимарҙан улына герой исеме менән бергә Ленин ордены һәм "Алтын Йондоҙ" миҙалы тапшырыла.

Байрамда Илештән - Муса Гәрәевтың, Әбйәлилдән - Таһир Кусимовтың, Миәкәнән - Минлегәле Ғәбәйҙуллиндың, Учалынан - Шакирйән Мөхәмәтйәновтың, Баҡалынан - Даян Мурзиндың, Көйөргәҙенән Ғәфиәтулла Арыҫлановтың яҡташтары сығыш яһаны һәм геройҙарҙың шәжәрәләре менән таныштырҙы. Бәйгенең гран-приһы Әбйәлил районынан Фәнилә Билаловаға тапшырылды. Фәнилә Ишбулды ҡыҙы Т. Кусимов музейының мөдире булып эшләй. Шәжәрәне музейға нигеҙ һалыусы, уның тәүге директоры Ғүмәр Ғилман улы Ғилманов төҙөгән, бөгөнгө көндә уны күҙ ҡарашындай һаҡлап, йылап тулыландыра ла музей хеҙмәткәрҙәре. "Был беҙҙең музейҙың ғына түгел, тотош районның енеүе, сөнки унда һәр кемдең өлөшө бар", ти Фәнилә Билалова. Әйткәндәй, генералдың әсәһе ягынан нәҫелендә лә хәрби чинға эйә кешеләр булған. Район мәҙәниәт йортонда ойошторолған күргәҙмәгә фотолар, архив материалдары, һуғышта ҡатнашыусыларҙың шәхси әйберҙәре ҡуйылды. Унда легендар генерал Таһир Кусимовтың фронтташ дуҫтары бүләк иткән ҡылысын да күрергә мөмкин ине. Республиканың һуғыш, хеҙмәт, Ҡораллы көстәр һәм хоҡуҡ-һаҡлау органы ветерандары советы рәйесе Марат Муллағәләмов билдәләүенсә, бындай байрамдар тәү сиратта үҫеп килеүсе йәш быуын өсөн кәрәк. Билдәле шәхестәребеҙҙең күркәм өлгөһө сифатында ғына уларҙа илһөйәрлек тәрбиәләп була.

# ҠУРАЙҘА - МОНАКО ГИМНЫ

**Башҡортостандың халыҡ артисы Роберт Юлдашев һәм "Ҡурайсы" этно төркөмө "Монако йәрминкәһе"н асыуҙа ҡатнашты. Коллектив башҡорт көйҙәре менән бер рәттән ҡурайҙа Монаконың гимнын башҡара.**



"Монако йәрминкәһе" Монакола Рәсәй йылы саралары сиктәрендә октябрь аҙағында үтте. Ул Европаның мәҙәни һәм туристик үҙәктәренең береһе. Быйыл күргәҙмәлә Мәскәү ҙә ҡатнашты. Сараны асыуҙа Мәскәү хөкүмәте вәкилдәре, Монако кенәзлегенең премьер-министры Мишель Роже һәм йәрминкәнең директоры Морис Коэн булды.

Мәскәү стендында "Life in Moscow" тип аталған фотокүргәҙмә, китаптар күргәҙмәһе ойошторолдо. Павильонда пластинкалар уйната торған граммофон ҡуйылған, тамашасылар араһында Леонид Утесовтың яҙмалары ҙур һорау менән файҙаланған.

# БЕҘҘЕКЕЛӘР ИТАЛИЯҒА БАРАСАҠ

**"Suns Europe-2015" Халыҡ-ара йыр бәйгеһенең һайлап алыу туры тамамланды. Был бәйгене "Евровидение" менән сағыштырырға булыр ине. Тик унда аҙ һанлы халыҡтар вәкилдәре саҡырыла. Төп талап - сығыш туған телдә булырға һәм халыҡтың мәҙәниәтен тулыһынса күрһәтергә тейеш.**

Һайлап алыу турында бөтөн донъянан 80 ижади коллектив ҡатнашҡан. Финалға туғыҙ ҡатнашыусы үткән. Мәскәүҙең "Заман" башҡорт этно ансамбле конкурстың йомғаҡлау өлөшөндә сығыш яһарға саҡырыу алған. Ансамблдең етәксеһе Радмир Муфтахин әйтеүенсә, коллектив баһалма ағзаларына "Ай нуры" тигән композиция тәҡдим итәсәк. Уның авторҙары - шағирә Тамара Искәндәриә менән Айҙар Хәмзин.

Конкурстың финалы декабрҙә Италияның Удинэ ҡалаһында үтә. Еңеүсе Европа фестивалдәрендә ҡатнашыуға мөмкинлек аласаҡ.

# СӘНҒӘТ ТӨНӨ

**3 ноябрҙә Мәҙәниәт министрлығы тәҡдиме менән бөтөн ил буйынса "Сәнғәт төнө" акцияһы үтәсәк. Халыҡтар берҙәмлеге көнөн байрам итеү сиктәрендә ойошторолған был сараға Башҡортостандың бар мәҙәниәт усаҡтары ла ҡушыла.**

Акция быйыл "Сәнғәт берләштерә" тигән девиз аҫтында үтә. Унда әҙәбиәткә һәм киноға айырыуса урын биреләсәк, сөнки Әҙәбиәт йылы тамамланыу менән Рәсәй киноһы йылы башланасаҡ. Музейҙар, китапханалар, театрҙар, концерт берләшмәләренең ишектәре был кистә тамашасылар өсөн асыҡ буласаҡ. Билдәле шәхестәр менән осрашыуҙар, әҙәби уҡыуҙар, экскурсиялар, күргәҙмәләр, музыкаль ҡунаҡханалар барыһына ла оҡшаясаҡ, ти ойоштороусылар.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЛТЫН ЯНЫНДА...

## тимер ҙә ялтырай

Мин-мин тигәнгә тәүбә бар, һум тимергә балға бар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ни өсөн ирҙәр ҡатындарына ғына башҡаларға ҡарата ҡылмай торған насарлыҡтар ҡыла?

**(Пьер Бомарше).**

Әгәр ҙә бәхет йорто төҙөргә тура килһә, ундағы иң ҙур бүлмәне көтөү өсөн тәғәйенләргә тура килер ине.

**(Ж. Ренар).**

Ғаилә бәхетенә һуҡыр ҡатын менән һаңғырау ир генә өлгәшә ала, тип әйткән кеше бик аҡыллы булғандыр.

**(М. Монтень).**

Һин эҙләгән бәхет һинең менән килгән күләгәгә оҡшаш: артынан сапһаң - тотторпмай, ҡасһаң - артыңдан ҡыуа төшә.

**(Ғәрәп халыҡ мәҡәле).**

Беҙҙең бәхетһеҙлектәрҙең сере шунда: бәхетлебеҙме, юҡмы, тип уйланырға ваҡытыбыҙ күп.

**(Б. Шоу).**

Бәхет - ул үҙ эҙмышына күнеү һәм тормоштағы хәлең менән ҡәнәғәт булыу.

**(Эразм Роттердамский).**

Бәхетһеҙҙәр һәм насар йоҡлауысылар, ғәҙәттә, был сифаттары менән ғорурланырға ярата.

**(Бертран Рассел).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:" Бер кеше тотош ауыл халҡы алдында ғәйепле тип табыла. Ғәйепләне соҡорға ташлайҙар, ә унан зыян күргән кешеләрҙең һәр береһенә уны үҙе теләгәнсә хөкөм итергә ҡушалар. Берәүҙәр соҡор ситенә басып, ғәйеплегә төкөрә, икенселәр бысраҡ ташлай, өсөнсөләр серек йомортҡа ырғыта. Ә бер кеше соҡор төбөндәге ғәйепләнеүсегә тос ҡына бер таш бәрә. Ғәйепләнеүсе унан аптырап һорай:**

**- Мин бындағы кешеләрҙең барыһын да беләм, уларҙы мин ысынлап та рәнйеттем һәм уларҙың минән алыр үсе бар. Ә һин ниңә миңә таш ташлайһың?**

**- Ә һин мине бынан егерме йыл элек рәнйеткәйнең, - ти кеше.**

**- Улай булғас, егерме йыл буйы ҡайҙа булдың һуң һин? - тип аптырап һорай ғәйепләнеүсе.**

**- Ошо йылдар буйы мин әле һиңә бәргән ташты йөрәгемдә йөрөттөм, - ти кеше.- Быйна хәҙер һине шундай меҫкен хәлдә күргәс, ул ташты йөрәгемдән алып, һиңә олаҡтырҙым..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәррират:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зөйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**

Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**

E-mail: **info@kiskeufa.ru kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 октябрь 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717 Заказ 4978